ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

8-14 ғинуар (һыуығай) 2022

№ 1 (991)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Беҙ үҫешергә тейешбеҙ! 4

Кем ул Солтанмәхмүт Юлдашев? 7

Тәүҙә һин ырыуыңды асыҡла, ырыуың башҡортлоғонда раҫлар... 8-9

Гәзитебеҙҙә - тарихыбыҙ сағылышы 12

ТВ-программа 14









*"Йөрәгендә иң ҡәҙерлеһе - халҡы булмаған кеше кеше түгел. Кескәй генә йөрәгеңә бөтә донъя һыйһын - шунда ғына һин донъяның дуҫы булырһың. Йөрәгенә донъяны һыйҙырған кеше бер ҡасан да үҙе өсөн генә йәшәй белмәҫ. Ундай кеше - бөхетле кеше".*

***Рәми Ғарипов.***

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕ БАР!*

## "УҘҒАН ЙЫЛ ӨСӨН ХАЛЫҠ АЛДЫНДА ОЯТ ТҮГЕЛ"



**28 декабрҙә Башҡортостан юлдаш телевидениеһы, "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы, социаль селтәрҙәр аша трансляцияланған телеәңгәмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров йылға дөйөм йомғаҡ яһап шулай тине. Ике сәғәт ярым дауамында Радий Фәрит улы 2021 йылда нимәләр эшләнгәне, ниндәй проблемалар осрауы, төбәк ниндәй йүнәлеш менән барыуы тураһында һөйләне, тормошобоҙҙоң төрлө өлкәләренә ҡағылған һорауҙарға яуаптар бирҙе.**

"Борсолоуҙар күп, ләкин икеләнеүҙәр аҙ" - өс йыл республика Башлығы булып эшләгән осорон Радий Хәбиров шулай билдәләне. Ни тиһәң дә, етәксе булып тыумайҙар һәм һәр эштең үҙ үҙенсәлеге бар шул. Ә шулай ҙа етәксе булырға өйрәнәләр, был турала Радий Фәрит улы ла: "Беҙ ҡарар ҡабул итергә һәм улар өсөн яуаплылыҡ тойорға өйрәндек, кешеләр эштең асылын аңлай башланы", - тип билдәләне.

**(Дауамы 5-се биттә).**

*ФЕНОЛОГ ЯҘМАЛАРЫ*

## ЙӘ ЯУА ЛА, ЙӘ ЮҠ...

**Борон-борондан халҡым ҡоштарҙың, йәнлектәрҙең, хатта бөжәктәрҙең үҙен нисек тотоуына ҡарап, һауа торошон, тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе фаразлай алған.**



Был тәңгәлдә ҡәрсәйемдең һынамыштары бик тура килә торғайны. Ҡыштың айырым көндәренә ҡарап, яҙҙың, йәйҙең нисек килерен билдәләй ине ул. Көҙөн айырым көндәрҙе билдәләп, урман-ҡырға сығып килер ҙә, "Быйыл ҡыш ҡаты һыуыҡтар булырға оҡшаған. Ҡырмыҫҡа үҙ иләүен бигерәк бейек, ҙур итеп һалған" йәки "Быйыл ҡыш йомшағыраҡ килер, ҡырмыҫҡа иләүе тәпәш кенә" тиер ине. Һуңғы йылдарҙа ҡәрсәйемдең әйткәндәрен һынап ҡарамаҡҡа мин дә иләүҙең ҙурлығын-бәләкәйлеген һынағаным бар. Ысынлап та, тура килә. Ҡырмыҫҡаға ҡағылышлы тағы шундай һынамышы бар ине ҡәрсәйемдең: "Көн матурайыр, ахыры, ҡырмыҫҡалар йәнләнде".

Ай ҡәртәләнһә, буран була, тигәне лә раҫ килә торғайны. Болотло көндә бесәй арҡаһына ятһа, көн йылыта тигәне лә дөрөҫ.

Ағасҡа бәҫ һырыһа, һоло яҡшы уңыр, тигән юрауы ла бар ине ҡәрсәйемдең. Ғөмүмән, ҡарға, ҡышҡа бәйле һынамыштары күп булды һәм һәр ваҡыт тура килә ине. Ҡар ни тиклем күп яуһа, яҙын үлән дә шул ҡәҙәре күпереп үҫер, тигәне әле лә бик актуаль.

Халыҡ һынамышына ярашлы, 19 декабрҙә ҡар яуһа, ҡыш - һалҡын, буран булһа, ҡыш буйы буран буласаҡ. Быйыл ҡар ҙа яуҙы, еле лә көслө булды. Һыуыҡ та, буранлы ла булырға тейеш тә, әммә һуңғы йылдарҙа илдә генә түгел, республикала ла климат үҙгәрә. Шуға күрә халыҡ һынамыштары тура килмәүе лә ихтимал. Йылдан-йыл ҡар аҙыраҡ яуа. Һыуыҡтар ҙа элекке һымаҡ түгел. Бер нисә йыл рәттән аномаль эҫе күҙәтелә. Дөйөм климаттың үҙгәреүенә бәйле ҡыштарҙың йылдан-йыл йылы килеүе күҙәтелә. Быйыл да бик ныҡ һыуыҡ булырға тейеш түгел. Әммә ҡапыл үҙгәреүенә әҙер булырға кәрәк, тип уйлайым.

Сентябрь аяҙ булһа, ҡыш һалҡын булырға тейеш. Тик быйыл һарысайҙа ямғыры ла, болото ла булды. Шуға күрә һалҡын ҡышҡа өмөт итергә түгел. Һәр хәлдә, гидрометеорологтар ҙа икеләнә: 2022 йылда һауа торошо ҡышын да, йәйен дә үҙгәреүсән була, тип белдерҙеләр белдереүгә. Был гидрометеорологтар тураһында халыҡ телендәге лаҡапты раҫлай инде: йә яуа ла, йә юҡ, тип шаярталар бит.

**Хәмиҙә ҠУНАҠҠУЖИНА.**
**Күмертау ҡалаһы.**

*ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТ*

## НАСАРҘЫ ҠАБУЛ ИТМӘ!

**Тирә-яҡта аҡылы, һәләте, кешелеклелеге менән дан тотҡан бер уҡытыусы йәшәгән. Ул йәш егеттәрҙе хәрби кәсепкә өйрәткән.**

Көндәрҙән бер көндө уның янына үҙенең ҡанһыҙлығы, көнсөллөгө менән айырылған йәш һуғышсы килгән. Ул тирә-йүндә ҡаршы яҡтағыларҙы кәмһетеп, мыҫҡыл итеп, улар тураһында хөсөт таратып көсһөҙләндереү алымын ҡулланырға яратыуы менән танылған булған. Тик барыбер ниндәй ҙә булһа яңылышлыҡ ҡылып, яу һайын еңелә килгән.

Был юлы ла шулай килеп сыҡҡан: һуғышсы күнекмә ваҡытында бер нисә тапҡыр мыҫҡыллы һүҙҙәр ҡысҡырған да, аҡыл эйәһе нимә әйтер икән тип, уның реакцияһын күҙәткән. Тик уҡытыусы бер нәмә лә булмаған кеүек эшен дауам иткән. Шулай бер нисә тапҡыр ҡабатланған. Уҡытыусының кәмһенеп, көсһөҙләнеүен күрергә теләгән һуғышсыға күнекмәне ташлап китеүҙән башҡа сара ҡалмаған. Был хәлде иғтибар менән күҙәткән уҡыусылар аҡыл эйәһенән һорамай түҙмәгән:

- Уҡытыусы, һеҙ ни өсөн уның һөжүменә, кәмһетеүенә түҙҙегеҙ? Уны көрәшкә саҡырырға ине, - тигәндәр.

Аҡыл эйәһе:

- Әгәр һеҙгә алып килгән бүләкте ҡабул итмәһәгеҙ, ул кемдеке иҫәпләнә? - тип һораған.

- Бүләк бирергә теләгән кешенеке, - тип яуаплаған бер тауыштан уҡыусылары.

- Көнсөллөк, асыу, күрә алмаусылыҡ, хөсөт менән дә шулай. Уларҙы ҡабул итмәһәң, уны алып килгән кешенең үҙендә ҡала һәм уны көсһөҙләндерә... - тип аңлатҡан уҡытыусы.

12+

МӨҒЖИЗӘЛӘР ДОНЪЯҺЫНДА

# НИНДӘЙ ДӘҮЕРҘӘ ЙӘШӘЙБЕҘ?

**Яңы йылды ҡаршылағандан һуң түҙемһеҙләнеп йылы яҙҙы һәм эҫе йәйҙе көтә башлаясаҡбыҙ. Ә ысынында әлеге мәлдә һалҡын дәүерҙә йәшәп ятҡанлығыбыҙҙы беләһегеҙме? Бына был хаҡта геолог Исхаҡ Фәрхетдинов социаль селтәрҙәге үҙ сәхифәһендә яҙа:**

- Ер шарының геологик тарихына күҙ һалғанда бер нисә көслө һыуыҡтар булғанлығын белергә мөмкин. Мәҫәлән, 2.4 - 2.2 миллиард йыл элек ерҙә ныҡ көслө һыуыҡтар булып, уны тотошлай боҙ ҡаплаған. Был дәүер геологияла Гурон боҙлауығы тип атала. Бындай оҙайлы һыуыҡ осорҙо фәнни телдә гляциоосор (гляциоэра) тип атайҙар. Ә оҙайлы йылы ваҡыттар термоосор (термоэра) исеме аҫтында йөрөтөлә. Шулай итеп, Гурон боҙлауығынан һуң оҙайлы термоосор башлана. Уны бөйөк боҙлауыҡ паузаһы тип атайҙар. Ул яҡынса 1,5 миллиард йыл дауам итә (2200 - 750 миллион йыл элек).

Ә 750 - 540 миллион йыл элек ергә Африка гляциоосоро йылылыҡ алып килә. Уның ҡатламдары (тиллиты) айырыуса Африкала яҡшы һаҡланған. Шулай уҡ улар Себерҙең Патом таулығында (Патомское нагорье) һәм Алдан ҡалҡанында (Алданский щит), Ҡырғыҙстанда, Ҡытайҙа, Оманда, Канадала, Бразилияла һәм шулай уҡ Көньяҡ Уралда ла бар **(фото)**. Ләкин был һыуыҡ осорҙо ла йылылыҡ алмаштырған һәм 540 - 440 миллион йылдарҙа ерҙә Иртә палеозой термоосоро (Раннепалеозойская термоэра) батшалыҡ иткән.



Ә 440 - 260 миллион йыл элек ерҙә тағы ла йылылыҡты "һүндергәндәр" һәм Гондван гляциоосоро башланған. Уға алмашҡа Мезозой-палеоген термоосоро (мезозойско-палеогеновая термоэра) килә. Бынан 250 - 35 миллион йыл элек була был осор һәм ул ваҡытта динозаврҙар рәхәтләнеп йылыла йәшәй.

Әлеге мәлдә беҙ Антарктик гляциоосоронда йәшәп ятабыҙ. 35 миллион йыл элек башланған һәм бөгөнгө көндә лә дауам иткән был осорҙа төрлө ҡыҙыҡлы ваҡиғалар булған. Мәҫәлән, Антарктида тулыһынса боҙ менән ҡапланған, Европа һәм Төньяҡ Америка биләмәләрен ифрат ҙур һәм гәйрәтле боҙло ҡалҡандар ҡаплап алған, шулай уҡ 200 меңдән алып 14 меңенсе йылға тиклем әлеге Мәскәү урынында 3 саҡрымға еткән боҙ ҡатламы булған.

Бөгөн ғалимдар Ер шарында климаттың йылыныуы тураһында һөйләй. Ҡасан Антарктик гляциоосорона алмашҡа йылы термоосор килер? Үҙебеҙҙең эшмәкәрлек менән уны артыҡ тиҙләтмәйбеҙме һәм Ер шарының үҙенә генә билдәле процестарына йоғонто яһауыбыҙ ниндәй эҙемтәләргә алып килер?

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

БЫЛ АЙҘА...

# ДОНЪЯНЫ ИМАН ҠОТҠАРЫР!

**Яңы йылдың тәүге айы - һыуыҡайға аяҡ баҫабыҙ, хәйерле булһын! Һыуыҡына ғына түҙербеҙ, ә бына тажзәхмәт вирусы шул һыуыҡҡа ҡатып, дөмөкһә ине, тип теләйек әле. Ҡыштың тап үҙәге булған ғинуарға былдай башҡортса атама юҡҡа бирелмәгәндер бит! Ни тиһәң дә, ай исемдәре халҡыбыҙҙың борондан килгән оҙайлы фенологик күҙәтеүҙәренә нигеҙләнгән: ғинуар - ҡаты һыуыҡтар мәле.**

Дөрөҫ, Ер йөҙөндә һәр йәһәттән: халыҡ-ара хәлдәрҙә, иҗтимағи-сәйәси, социаль-иҡтисади өлкәләге кризис һәм шуларҙың һөҙөмтәһе булараҡ, кеше психологияһында һуңғы өс тиҫтә йыл буйына (1991 йылдан иҫәпләгәндә) барған "бөйөк депрессия" күренеше менән бәйле йәшәйешебеҙ тәртиптәре генә түгел, әйләнә-тирә мөхит һәм тәбиғәт ҡанундары ла боҙолдо, сиктәренән сыҡты. Иртәгә ни булырын белмәгән бер саҡта тәбиғәт ҡылығын ҡуҙаллау мөмкинме икән? Синоптиктар 2021-2022 йылғы ҡыштың яуым-төшөм һәм һауа температураһы буйынса рекорд ҡуясағы тураһында иҫкәрткәйне инде һәм, ысынлап та, декабрь баштарында илдең күп төбәктәрендә мул итеп ҡар яуҙы, унан йылытып ебәрҙе һәм һауа температураһы нулдән юғары күтәрелеп, ямғыр яуып аптыратты. Хәҙер инә Ҡыш бабай сәләм ебәрә: ысын һыуыҡтар башланды, иҫке йыл аҙағы етеүен һиҙеп, буранлап-буранлап алды. Башҡортостанда Яңы йылдан һуң һауа температураһы минус 8-ҙән минус 14-кә тиклем (төндә -15) тирбәләсәк, ҡар яуасаҡ, ә шулай ҙа республикала ғәҙәттән тыш һауа торошо көтөлмәй, ти метеорологтар. Ә бына Уралға арктик һауа массалары үтеп ингән хәлдә генә тағы ла ҡатыраҡ һыуытып ебәреүе ихтимал. Аяҙ, ҡояшлы көндәр вәғәҙә ителә, айҙың бары 5-6 көнөндә генә болотлап ҡар яуып алыуы мөмкин.

Эйе, аяҙ, ҡояшлы көндәр тәбиғәткә генә түгел, йәшәйешебеҙ рәүешенә лә бик кәрәк. Тамам маҙаға тейеп, әҙәмде йонсотҡан, ҡайғыларға һалған был тажзәхмәттең тамыры ҡорормо, юҡмы? Улай тиһәң, был күп башлы дейеүҙең бишенсе башы ағыулы сәсә башланы. Уның төп билдәһе - тиҙ үрсеп, тиҙ йоғоусанлығы, ә инде эҙемтәләре һәм ниндәй вакцина кәрәклеген әлегә берәү ҙә әйтә алмай, бары тик хәүефле фараздар ғына таратыла. "Омикрон-апокалипсис", "омикрон супермутант" ҡушаматтары алып өлгөргән был вирустан локдаун да, куар-код та ҡотҡара алмаясаҡ, имеш. Ә шулай ҙа уның менән танышып өлгөргән төрлө ил белгестәре кәңәштәренә ҡолаҡ һалыу зыян итмәҫ ине. Америка эпидемиолог- иммунологы Майкл Мина, мәҫәлән, омикрон таралыуын аэропорттарҙа һәм вокзалдарҙа "тоталь ПЦР-экспресс" үткәреү һәм автомобиль хәрәкәтен сикләү юлы менән туҡтатып булыр ине, тиген фекерҙә. Ләкин тажзәхмәткә ҡаршы башҡа саралар кеүек үк, быныһының да ризаһыҙлыҡ тулҡыны тыуҙырыуы бик шик юҡ. Бәғзе бәндәләргә бөгөн сабырлыҡ ҡылыу, ваҡытлыса уңайһыҙлыҡтар менән килешә алыу һәләте бөтөнләй хас түгел. Һәр хәлдә, рәсәйҙәр бер ни булмаған ҡиәфәттә сит илдәргә сәйәхәт ҡылыуын, диңгеҙ ярҙарында ҡомда ҡыҙыныуын дауам итә, һөҙөмтәлә ситтән үлемесле вирус алып ҡайта. Бөгөн кеше бер нәмәгә ҡарап тормаҫтан, фәҡәт нәфсе ҡандырып ҡалыу өсөн генә йәшәй кеүек тойолоп китә. Әҙәмдә әҙәм иткән тәртип-тәрбиәлелек, әхлаҡ сифаттары, иман юғала

БЫНАҒАЙЫШ!

# ФӘҠИРЛЕКТӘН...

## тағы бер сара



**Дәүләт машинаһы эшләмәй, тип ҡарағыҙ: ярлы халыҡ категорияһын кәметеү өсөн бөтөн булған фантазия эшкә егелә, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ. Әле яңыраҡ ҡына беҙ фәҡирҙәр һанын иҫәпләүҙең яңы ысулы хаҡында хәбәр иткәйнек. Яңы формула байтаҡҡа кәмәтә түгелме шул "күҙгә сүп" ҡатламды? Ҡағыҙҙа булһа ни...**

Эйе, был өлкәлә ашығыс эш дауам итә. Әле бына фәҡирлеккә ҡаршы көрәшкә хатта ки РФ Үҙәк Банкы үҙе килеп ҡушылды! Юҡ, аҡса таратмай таратыуын, әлегә шартын ҡуя: фәҡирҙәргә "аҡсаларын" (?) һаҡлыҡ кассаһына һалырға тәҡдим итә һәм төп (ключевая) ставканан юғарыраҡ проценттар вәғәҙәләй. Шул уҡ ваҡытта Банктың сикләүсе талаптары ла ҡаты ғына: ярлы граждандар тик бер генә вклад аса ала икән һәм уның да суммаһына сик ҡуйыласаҡ, юғиһә, әрһеҙләшеп, миллионын да килтереп һалыр берәй йолҡошо, кем белә, процент бит юғары, тиҙәр. Шуның өсөн дә, күрәһең, иҫәп асасаҡ һәр ярлы кеше "йолҡошлоҡҡа" тикшереү ҙә үтәсәк әле: уларҙы социаль тәьминәттең берҙәм дәүләт мәғлүмәт системаһы аша энә күҙәүенән үткәрмәкселәр, юғиһә, шәп проценҡа ҡыҙышып, берәй ҡомһоҙ байы йә урта хәлле әҙәм килеп ҡыҫылыуы ла бар...

Был һеҙгә көршәктәге һыуын түкмәҫ элек балаһын ҡыйнаусы әкиәт геройын иҫкә төшөрмәйме, йәмәғәт? Шулай тәртип ҡаты инде ул беҙҙә байырға теләгән ябай халыҡ өсөн, һәр тине күҙҙән үткәрелә. Ике

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәйҙә 2022 йылды Халыҡ сәнғәте һәм рухи мәҙәни мираҫ йылы тип атарға ҡарар ителде. Был ҡарар Рәсәй халыҡтарының үҙенсәлекле йолалары, кәсептәре һәм сәнғәтен күтәрмәләү, һаҡлау, шулай уҡ йәмғиәттә уларҙы популярлаштырыу, милли һәм дини ҡиммәттәргә ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәт тәрбиәләү йәһәтенән әһәмиәтле буласаҡ. В. Путин ойоштороласаҡ сараларҙың йөкмәткеле булыуын һәм илдең күп милләтле халҡының үҙенсәлектәрен күҙ уңынан ысҡындырмауҙы тәьмин итергә ҡушты.

✓Башҡортостанда 2022 йыл Һөнәри белем биреү тармағын яңыртыу, лайыҡлы хеҙмәт шарттары һәм хеҙмәт династиялары йылы тип иғлан ителде. Ошо турала хәбәр итеп, республика етәксеһе Радий Хәбиров: "WorldSkills конкурсын лайыҡлы үткәрҙек, унда беҙҙең команда шәп сығыш яһаны, шунан һуң беҙ һөнәри белем биреү системаһы менән ныҡыраҡ эшләү кәрәклегенә иғтибар иттек. Хәҙер Рәсәй Хөкүмәте менән Өфөлә профессиональ белем биреү хеҙмәткәрҙәренең квалификацияһын күтәреү буйынса федераль үҙәк асыу тураһында һөйләшеүҙәр алып барабыҙ", - тип белдерҙе.

✓1 февралгә муниципалитет башлыҡтары Радий Хәбировҡа халыҡтың яңы коронавирус инфекцияһынан прививка яһатыуы тураһында отчет бирергә тейеш. Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә республика етәксеһе ошо хаҡта белдерҙе. "15-ләп муниципалитетта был күрһәткес 60 проценттан кәмерәк", - тине Башҡортостан Башлығы. Һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин һүҙҙәренсә, республика халҡының 81 проценттан ашыуы (2 026 697 кеше) вакцинацияны тулыһынса тамамлаған, 201 меңе ревакцинация үткән.

✓Республика Башлығы Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрына Кино фондын булдырыу өсөн финанслауҙы күҙ уңында тоторға ҡушты. "Уҙған аҙнала беҙ кинематографистар менән осраштыҡ. Бөгөн башҡорт киноһы бар тип ышаныслы әйтә алабыҙ, ул бик ҡыҙыҡлы, сағыу. Ҡабул ителгән мөһим ҡарарҙарҙың береһе - Рәсәй кино фонды кеүек Кино фондын булдырыу", - тип белдерҙе Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә.

***✓ Бигерәк тә бөгөн күренә был: океан арьяғында ятҡан илдең ҡоралды көстәре һауанан да, һыу территорияһынан да, ҡоро ерҙән дә беҙҙең киңлектәрҙе байҡай, Рәсәй сиктәренә яҡын уҡ үҙ көстәрен һәм ҡорал арсеналын туплай.***



барғандай арабыҙҙан. Рухи хазиналар, күңел байлығына ынтылыш күңел асыу, ашап-эсеү менән алышына бара. Ошо йәһәттән, бәлки, тыуасаҡ йылды ил Президенты тарафынан 2019 йылда уҡ вәғәҙә ителгән "Халыҡ сәнғәте һәм рухи-мәҙәни мираҫ" йылы тип нарыҡлау, ысынлап та, урынлы һәм ваҡытлы.

Дөрөҫ, пандемия, ҡатмарлы халыҡ-ара хәл һәм башҡа проблемалар йөҙөндә мәҙәниәт, сәнғәт һәм рухи мираҫ мәсьәләләре икенсе планға күсеүе лә ихтимал, ләкин шуныһы ла бар: халыҡтарҙың рухи үҫеш торошон күрһәтеүсе мәҙәниәт һәм әхлаҡ кимәле теләһә ниндәй проблемаларҙы ла еңеп сығырға ярҙам итер ине. Мәҫәлән, ғинуарҙың ғына түгел, яңы йылдың да тәүге көнө - Бөтөн донъя тыныслыҡ көнөнә **(1)** бағышланыуы осраҡлы түгелдер. Көсөргәнешле халыҡ-ара хәл пандемиянан да хәүефлерәк афәт - донъя һуғышы менән янай, тип яҙа "Военное обозрение" порталы. Бөтөн донъя тыныслыҡ датаһын билдәләү, йәғни Тыныслыҡ хаҡына бөтөн донъя ғибәҙәт ҡылыу көнө планета халҡы менән бергә Америка Ҡушма Штаттары халҡының да ятҡан байрамы булыуға ҡарамаҫтан, был илдең башлыҡтары һәм Пентагон, киреһенсә, именлек идеологияһынан бик алыҫ тора, көс һәм ҡорал өҫтөнлөгө сәйәсәте алып бара. Бигерәк тә бөгөн күренә был: океан арьяғында ятҡан илдең ҡоралды көстәре һауанан да, һыу территорияһынан да, ҡоро ерҙән дә беҙҙең киңлектәрҙе байҡай, Рәсәй сиктәренә яҡын уҡ үҙ көстәрен һәм ҡорал арсеналын туплай. Ике йөҙлөлөк һәм хаттин ашып шашыныуҙың сиге булырмы? Тыныслыҡ нигеҙен тәшкил итеүсе әҙәп-әхлаҡ, мәҙәни кимәл категориялары онотолоп торған заман шаһитыбыҙ. Шулай булмаһа, әхлаҡһыҙлыҡ миҫалдары: комик артистан президент вазифаһына үрләгән Зеленскийҙың, бер төрлө һөйләп, икенсе төрлө эшләүсе АҠШ президенты Байдендың ҡыланыштарын нисек аңлатырға? Был клоунадаға Евросоюздың тамаша ҡылып, сәпәкәй итеүе лә юғары әхлаҡ тураһында һөйләмәй, әлбиттә. Ошондай шарттарҙа "партнер"ҙарға лайыҡлы отпор биреү ҙә бит күп йәһәттән илебеҙ етәкселегенең мәҙәнилек һәм әхлаҡ кимәленә бәйле.

...Ҡасандыр Достоевский "Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр," тигән, ләкин заманына күрә гармония һәм камиллыҡҡа илтеүсе идеалдар ҙа алмашынып тора. Бөгөн беҙҙе донъяла именлек хаҡына халыҡ-ара толерантлыҡҡа, изге ғәмәлдәргә өндәүсе дин - иман нуры ҡотҡарыр, ҡотҡарһа. Әмәлгә ҡалғандай, тап ошо айҙа Бөтөн донъя дин көнө **(16)** билдәләнә. Был үҙе бер изге ишара, әйтерһең дә. Тайғандарға - таяу, аҙашҡанға - маяҡ, сирлеләргә - өмөт, һауһаҡтарға - игелек ҡылыу, гонаһлыға - тәүбәгә килеү юлы ул дин. Ер йөҙөн ҡаплап алған тажзәхмәт пандемияһының баҫылыуын һорап, ялбарып, диндарҙар көнө-төнө Юғары көс - Илаһҡа ғибәҙәт ҡыла, изге доға һәм аяттар бағышлай, әлегесә уйһыҙ-моңһоҙ бәндәләр өсөн ярлыҡау һорай, дәүләт машинаһы арбаһынан төшөп ҡалған һәм онотолған ҡарт-ҡоро, ғәрип-ғөрәбәне мәрхәмәтлек һәм хәстәрлек менән солғай. Зәһәр зәхмәт хакимлыҡ иткән был ике-өс йыл эсендә кешелек күпме яҡындарын, дуҫ-иштәрен, таныштарын һәм башҡа бик яҡшы кешеләрҙе юғалтты. Ошондай шарттарҙа, ысынлап та, һәр кемебеҙҙең ҡәлбендә Аллаһҡа ялбарыу, Уның ҡөҙрәтенә һыйыныу, Уға һығыныу көсө нығына барғандай. Был, бәлки, әҙәм балаһының ҡыу ағастай буш күңеллеге өсөн бик тә ҡиммәткә төшкән иман юлына баҫыуылыр, ниһайәт? Ни хәл итмәк: иман үҙенә юл ярғанда, шәһиттәрһеҙ булмай, ти бит Ислам тарихы...

Ә иҫәндәргә йәшәргә кәрәк: үткәндәр өсөн үкенерлек булмаҫлыҡ итеп, бөгөнгө көн менән, балалар хаҡына. Йыл башынан ошо хаҡта айыҡ, сәләмәт башҡа уйланып алырға форсат тыуасаҡ: оҙайлы Яңы йыл ялдары **(1-6** һәм **8)**, шулай уҡ уҡыусыларҙың ҡышҡы каникулдары башланды. Коронавирустың яңы төрө таралыу кимәленә бәйле, балаларҙың ялы оҙайтылыуы ла ихтимал. Тимәк, һәр кемгә ғаиләһе, балалары янында күберәк булыу, файҙалы ял итеү, йәнле аралашыу, саф һауала булыу, саңғы һәм конькиҙа шыуыу, хоккей уйнау өсөн мөмкинлектәр тыуа, мәлде файҙаланып ҡалығыҙ - бөгөн ваҡыттың һәр сәғәте һәм минуты ҡәҙерле икәнен онотмайыҡ!

Был айҙа тағы ла Раштыуа байрамы **(7)**, Бөтөн донъя "Рәхмәт", Заповедниктар һәм милли парктар **(11)** көндәре, РФ прокуратура **(12)**, Рәсәй матбуғаты **(13)**, Википедияның тыуған көнө **(15)**, Балаларҙың уйлап сығарыуҙар көнө **(17)**, БР хеҙмәт ветерандары **(18)**, Инженер ғәскәрҙәре, Аспирант, Ҡосаҡлашыу көндәре **(21)**, Рәсәй студенттары **(25)**, Халыҡ-ара таможня хеҙмәткәрҙәре **(26)**, Халыҡ-ара персональ мәғлүмәттәрҙе яҡлау **(28)**, Автомобиль уйлап сығарылған, Ядро һуғышына ҡаршы халыҡ-ара тупланыу **(29)** һәм халыҡ-ара Интернетһыҙ **(30)** көндәр билдәләнә.

**Һыуығайҙа тыуғандар:**

**1 -** этнограф, иҡтисад фәндәре докторы, сәйәсмән, 1917-1918 йылдарҙағы башҡорт милли хәрәкәтендә ҡатнашыусы, 1930-1945 йылдарҙа Венгрияның Милли музейында бүлек мөдире, 1945-1948 йылдарҙа Гамбург университетының төркиәт докторы **Ғәлимйән Тағандың тыуыуына - 130 йыл** (1892-1948).

**10 -** әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре кандидаты, М.Аҡмулла исемендәге БДПУ доценты, БР Яҙыусылар берлеге рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты, Башҡортостандың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре **Зәки Әлибаевҡа - 55 йәш** (1967).

**11 -** ғалим-төркиәтсе, филология фәндәре докторы, яҙыусы, Башҡортостандың халыҡ шағиры, публицист, журналист, йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев, "Башҡортостан Республикаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордендары кавалеры **Рәшит Шәкүргә (Рәшит Шәкүров) - 85 йәш** (1937).

**15 -** Башҡортостандың халыҡ шағиры, журналист, Салауат Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты **Хәсән Назаровҡа - 80 йәш** (1942).

**-** йырсы, педагог, З.Исмәғилов исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, РФ һәм БАССР-ҙың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты **Флүрә Килдейәроваға - 70 йәш** (1952).

**29 -** шағир, драматург, журналист, Салауат Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты **Салауат Әбүзәровҡа - 55 йәш** (1967).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

---

балалы бер ғаиләнең дөйөм килеме 25 тингә артыҡ булған өсөн аҙ тәьмин ителгәндәр исемлегенә индермәгәйнеләр, хәтерегеҙҙәме? Хәйер, бындай миҫалдар биреү генә түгел инде ул. Ә бит асылда юғары процент хаҡындағы был положение әле ҡабул да ителмәгән: "иләнмәгән, һуғылмаған", тигәндәй. Әммә ҡабул ителә ҡалһа, мин һиңә әйтәйем, был бөтөн баҙар күләмендә иң-иң отошло вклад буласаҡ икән.

Был нимә менән нигеҙләнә һуң? Төп (ключевая) ставка ағымдағы йыл эсендә ике тапҡырға артты, ти белгестәр. Мәҫәлән, марттағы ставка 4,25 процент булһа, октябргә ул 7,5-кә артты, ләкин депозит буйынса процентттар төп ставканан да (7,5 процент), инфляция кимәленән дә (8,1 процент) түбән ҡала килде. Ә бына ярлыларҙың һаҡлыҡ кассаһына һаласаҡ аҡсаһына өҫтәмә процент әлеге ике күрһәткестән дә артығыраҡ булмаһа ла, кәм булмаясаҡ, тип ышандыра проект авторҙары.

Бындай отошло шарттарға ҡыуанырға ғына ла бит... тик эш хаҡынан - эш хаҡына, пенсиянан пенсияға тиклем аҡса еткерә алмаған ярлы ҡатлам һаҡлыҡҡа һалырға аҡсаны ҡайҙан алыр? Әйткәндәй, рәсәйҙәрҙең 37 процентының һаҡлыҡ кассаһында бер тине лә юҡ. Күп аҡса менән эш итеп өйрәнгән юғары ҡаттарҙа ултырыусыларға ярлы халыҡтың аянысла хәле күренеп етеңкерәмәйҙер, ахыры, тип уйларға ғына ҡала.

Рәсәй Үҙәк Банкының был "ҡиммәтле" тәҡдиме, тәбиғи, экспертарҙа аңлау тапманы әлегә. "Быйылғы йылда граждандарҙың бөтөн хеҙмәт килемен "ашап" торған юғары инфляция арҡаһында йәмғиәттә Рәсәй Банкы эшмәкәрлеге менән ризаһыҙлыҡ арта бара, - ти эксперт Антон Гринштейн. - Һаҡлыҡта бер тин аҡсаһы булмаған рәсәйҙәр өсөн вәғәҙәләнгән был махсус вкладтың, айырыуса аҙ килемлеләрҙең хәлен иҫәпкә алғанда, был тәҡдимдең күҙгә күренерлек файҙаһы булмаясаҡ..."

Үҙәк Банк инфляцияның үҫеүе менән көрәшә, шуға күрә уға әйләнештәге аҡсаларҙы банк депозиттарына "бәйләп" тотоу кәрәктер, тигән фекер ҙә белдерелә. Өсөнсөнән, һәр яңылыҡҡа шикләнеп ҡарарға өйрәнгән күңел барыбер яҡшылыҡ өмөт итмәй дәүләт машинаһы манёврынан: кассаға һалырлыҡ аҡсаһы булғас, тимәк, ярлы түгел, тип әйтерҙәр һәм тағы ла күпмелер "процент" ярлы-ябаға урта хәлле ҡатламға әүерелеп китер, кем белә...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы хәбәр итеүенсә, республика Башлығының кинематографистар менән осрашыуында 2022 йылдан башлап кино проекттарына йыл һайын 50-шәр миллион һум аҡсаны күҙ уңында тотоу тураһында ҡарар ҡабул ителде. "Башҡортостан" киностудияһын йыл һайын заманса киноҡорамалдар менән йыһазландырыу, заманса кинотеатрҙар булмаған 14 муниципалитетта 2023 йылдың аҙағынаса яңыртылған кинозалдар асыу планлаштырыла. Өфөлә "Родина" кинотеатрының 70 йыллығына әҙерлек башлана.

✓2019-2020 йылдар өсөн әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһын тапшырыу тантанаһы уҙҙы. Премияға өс кеше - Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле артисы Айбулат Баһауетдинов, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы Азат Вәлитов, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Яҙыусылар союзы ағзаһы Александр Хватков лайыҡ булды. Наградаларҙы Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов тапшырҙы.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров күсмә "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте"ндә республикала һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары госпитален проектлай башлауҙары хаҡында һөйләне. Дауаханаһының майҙаны - 67 мең квадрат метр, ул Затонда төҙөләсәк.

✓2021 йылдың яҙында урмандарҙы парһыҙ ебәк күбәләгенә ҡаршы эшкәрткәндә хужалыҡтары зыян күргән умартасыларға компенсация түләнә. Субсидия алыусыларҙың исемлеге Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы сайтында баҫылған. Бөтәһе 17 миллион һумға яҡын аҡса бүленә. Аҡса 61 эшҡыуарға бирелә, субсидиялар күләме 1,3 миллион һумдан 25 мең һумға тиклем тәшкил итә.

✓2022 йылдан Рәсәйҙә ауыл хужалығы етештереүселәре өсөн "Агротуризм" гранты булдырыла. Ауыл хужалығын үҫтереү дәүләт программаһын үҙгәрткән ҡарарҙы Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин раҫланы. Аграрийҙар 10 миллион һумға тиклем грантҡа иҫәп тота ала. Кесе аграр эшҡыуарлыҡ вәкилдәренең ауыл туризмын үҫтереү проекттарына дәүләт ярҙамы алыу мөмкинлеге бар. Грант өсөн проекттарҙы Ауыл хужалығы министрлығы һайлай.

ЯҠШЫ ХӘБӘР!




# ҺАҠЛАУЛЫ БУЛАСАҠТАР

**Яңы йыл алдынан Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа "Янғантау"ға ЮНЕСКО-ның глобаль геопаркы статусын биреү тураһында сертификат тапшырҙылар.**

- ЮНЕСКО эштәре буйынса Рәсәй Комиссияһының дөйөм йыйылышында илдең сит ил эштәре министры Сергей Лавров беҙгә "Янғантау"ға ЮНЕСКОның глобаль геопаркы статусын биреү тураһында сертификат тапшырҙы, - тип яҙҙы Радий Фәрит улы үҙенең социаль селтәрендә. - Был республиканың профессор Лариса Николаевна Белан һәм "Янғантау" шифаханаһы директоры Альфред Рәшит улы Аҡбашев етәкселегендәге энтузиаст-ғалимдарының ҙур эш һөҙөмтәһе. Статустың үҙен 2020 йылда уҡ алғайныҡ, тик ковид арҡаһында сертификатты тапшырмағайнылар. Был беҙҙең өсөн ҙур ҡаҙаныш, беҙ артабан "Янғантау" геопаркы инфраструктураһын үҫтереүҙе дауам итәбеҙ. Алдағы ике йылда бында милли геройыбыҙ Салауат Юлаев иҫтәлегенә "Мәсетле" геология-музей комплексын һәм "Салауат ере" тарихи-мәҙәни комплекс төҙөйәсәкбеҙ.

Беҙ тағы төбәк әһәмиәтендәге "Торатау" төбәк геопаркын булдырҙыҡ. Былтыр ул ЮНЕСКО геопарктарының глобаль селтәре составына дәғүә иткән 16 биләмә исемлегенә инде. Быйыл иһә эксперттар делегацияһы килеүен көтәбеҙ.

Алдағы ике йылда был биләмәлә яңы туристик объекттар - этнокомплекс һәм Торатауға менергә уңайлы булған экологик һуҡмаҡ барлыҡҡа киләсәк. Төҙөлөштө капиталь эшләнгән визит-үҙәктән башлайбыҙ. Беҙ шулай уҡ "Тәбиғәт объекты" номинацияһында "Башҡортостан шихандары: Торатау, Йөрәктау һәм Ҡуштау" тәбиғәт-геология һәйкәлен ЮНЕСКО-ның бөтә донъя мираҫы исемлегенә индереү өсөн заявка әҙерләү буйынса эшләйбеҙ.

Шүлгәнташ - Башҡортостандың киң билдәле визит картаһы. Беҙ шулай уҡ "Шүлгәнташ мәмерйәһенең ҡаялағы һүрәттәре" объектын "Мәҙәниәт" номинацияһына заявка әҙерләүҙе тамамланыҡ. Бында һүҙ 14-19 мең йыл элек палеолит осоронда эшләнгән һүрәттәр тураһында бара. Киләһе йылдың яҙында конференц-залы, балалар фәнни үҙәге, заманса лабораториялары, иркен фонд һаҡлағыстары менән "Шүлгәнташ" тарихи-мәҙәни музей-комплексын асырға ниәтләйбеҙ.

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

# БЕҘ ҮҪЕШЕРГӘ ТЕЙЕШБЕҘ!



**Мәскәүҙә Рәсәй Президенты Владимир Путиндың сираттағы матбуғат-конференцияһы үтте. Ундағы ҡайһы бер фекерҙәргә генә туҡталайыҡ.**

## Өфөнөң юбилейы тураһында

Башҡортостан Юлдаш телевидениеһы хәбәрсеһе Гөлназ Хәйбуллина ил башлығының иғтибарын ҡыҙыл йөрәк (Өфөнән һөйөү менән) төшөрөлгән табличка аша йәлеп итте һәм шул арҡала һорау биреү мөмкинлегенә эйә булды. Журналист Өфөнөң 2024 йылда үтәсәк 450 йыллығына әҙерлек буйынса сараларҙы финанслашыу һәм бер ыңғай республикала хоккей буйынса чемпионат уҙғарыу тураһында һорау бирҙе.

Владимир Путин Өфөнөң Волга буйында иң яҡшы, һоҡланғыс урындарҙың береһе булыуын, һәр ваҡыт Рәсәйҙә Ислам донъяһы үҙәге булыуын һәм булып ҡалыуын билдәләне. Һорауға килгәндә инде, ил башлығы республика етәкселеге менән "Өфө юбилейға матур, лайыҡлы әҙерләнһен өсөн" мәсьәләләрҙе асыҡлап, булған ресурстарҙы бүлеү кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Өҫтәмә аҡса булғанда, улар тураһында ла уйларға мөмкин. Беҙ республикалағы коллегаларыбыҙ менән бергә хәл итербеҙ", - тине Владимир Путин һәм мотлаҡ тантаналарға килергә тырышасағын белдерҙе.

Хоккей буйынса донъя чемпионатына килгәндә, ул, "Салауат Юлаев" - яҡшы команда, һис һүҙһеҙ, иң юғары сифатлы. Өфө бер шикһеҙ иң юғары кимәлдәге халыҡ-ара ярыштарҙы үткәрергә һәләтле. Беҙ был тәҡдим тураһында уйларбыҙ", тине.

*Республика Башлығы Радий Хәбиров федераль үҙәктең ҡала юбилейын билдәләүҙе берлектә финанслау тураһында яңылыҡтарға аңлатма биреп: "Ил Президенты Указы менән Өфөнөң 450 йыллығына федераль статус бирелде, федераль кимәлдә ойоштороу комитеты бар. Бының өсөн Владимир Владимировичҡа ҙур рәхмәт, сөнки был бөтөнләй икенсе статус тигән һүҙ - байрам дөйөм федераль сараға әүерелә. Әлбиттә, быйыл августа Президент килгән саҡта проекттарыбыҙға ярҙам итеү мәсьәләһен дә тикшергәйнек. Президент ҡарарҙарҙы тиҙ генә ҡабул итә. 2024 йылға көрәш һарайын төҙөй башлайбыҙ, был йәһәттән 1,1 миллиард һум күләмендә федераль финанслау бар. Рәсәй Президенты һәм Хөкүмәте ярҙамында Өфөнөң 450 йыллығын лайыҡлы ҡаршыларбыҙ тип ышанам", - тине.*

*Башҡортостандың баш ҡалаһында хоккей буйынса донъя чемпионаты уйындарын уҙғарыу мөмкинлеге хаҡында фекерен Радий Фәрит улы түбәндәгесә белдерҙе: "Өфөнөң Зорге урамындағы иҫке Спорт һарайын төҙөкләндереү уйыбыҙ бар. Был эште тамамлағас, ғариза йәһәтенән үҙебеҙҙе ышаныслыраҡ тойорбоҙ тип уйлайым. Беҙҙең "Өфө-Арена" бар, был, ысынлап та, иң яҡшы боҙ һарайҙарының береһе. Журналист һорау биреп, Президент был мөмкинлекте инҡар итмәй икәнен аңланыҡ, тимәк, беҙгә артабан эшләргә кәрәк".*

## Пандемия һәм прививкаға ҡаршылар тураһында

Иҡтисадыбыҙ, тажзәхмәт менән осрашып, үҙенең туплана алыуын һәм тетрәнеүҙәргә әҙер булыуын күрһәтте. Түбәнәйеү кимәле 3 процент тәшкил итте, был башҡа алдынғы иҡтисадтар менән сағыштырғанда күпкә түбәнерәк. Аяҡҡа баҫыу ҙа башҡа илдәргә ҡарағанда тиҙерәк бара. Киләһе йылдың беренсе кварталы һуңында коллектив иммунитетҡа эйә булырбыҙ тип ышанам.

Яңы штамдар һаулыҡ һаҡлау системаһында проблема булған һәм иммунитет кимәле түбән урындарҙа барлыҡҡа килә. Шуға күрә мин вакциналарҙы таныу һәм уларҙы донъя буйынса таратыу тураһында һөйләйем. Вакцина алмаған граждандарҙы эҙәрлекләү саралары индереү кәрәкме? Юҡ, тип уйлайым. Баҫым һәр саҡ ҡаршылыҡ тыуҙыра. Икенсе юл менән барырға, халыҡҡа, уларҙың позицияһына ҡарамаҫтан, ихтирамлы булырға һәм билдәле саралар ҡабул итеү зарурлығы тураһында тыныс ҡына аңлатырға кәрәк. Сирҙе ҡабаттан йоҡтороу ҙа мөмкин. Вакцина алғандар араһында ҡабаттан сирләүселәр 3-4 процент. Уларҙың араһынан дауаханаға эләгеүселәр бер нисә тапҡырға аҙ. Мин әйткәнем бар: совет заманында берәү ҙә һорап тормаған, барыһына ла прививка эшләгәндәр.

Законды үтәгән кешеләр менән түгел, ә хоҡуҡ боҙоуҙар менән көрәшергә кәрәк. Әйтәйек, ялған вакцинация сертификатын эшләтеп алалар, бындай осраҡтар буйынса 270-тән ашыу енәйәт эше ҡуҙғатылған. Бында, әлбиттә, көрәшергә кәрәк. Ә глобаль алғанда - аңлатырға һәм инандырырға. Эшмәкәрлек йүнәлештәренең береһе - ковидтан һуң дауаланыу. Үкенескә күрә, ул беҙ телэгәнсә һөҙөмтәле эшләмәй - система аша бары тик миллион кеше генә үткән.

## Көнбайыш менән мөнәсәбәттәр тураһында

Беҙҙең ғәмәлдәребеҙ һөйләшеүҙәр барышынан түгел, ә Рәсәйҙең хәүефһеҙлеген бер ниндәй шарттарһыҙ тәьмин итеүҙән һәм тарихи перспективаға бәйле буласаҡ. Беҙ НАТО-ның артабан көнсығышҡа шыуышыуына юл ҡуймаясағыбыҙҙы иҫкәрттек. Бында нимә аңлашылмай? АҠШ беҙҙең тупһала, ә беҙ түгел.

1990 йылда беҙгә көнсығышҡа бер аҙым да яһамаясаҡбыҙ, тинеләр. Һөҙөмтә? Алданылар. Оятһыҙ рәүештә алданылар. НАТО биш тапҡыр киңәйтелде, хәҙер Румыния менән Польшала ла шундай система. АҠШ һәм Бөйөк Британия сигенә беҙ барманыҡ, улар беҙгә килде. Улар беҙҙән гарантия һорай. Беҙ түгел, улар беҙгә гарантия бирергә тейеш, ә тиҫтә йылдар буйына буш хәбәр менән алдаштырырға түгел. Беҙ берәйһенә янайбыҙмы ни? Рәсәйҙе еңеү мөмкин түгел, уны бары тик эстән генә тарҡатырға була.

## "Яңы этика" тураһында

Мин традицион ҡарашты тотам: ҡатын-ҡыҙ - ул ҡатын-ҡыҙ, ир-егет - ул ир-егет, әсәй - әсәй, атай - атай. Һәм йәмғиәтебеҙҙең эске әхлаҡи һағы бар тип өмөтләнәм.

Беҙ үҫешергә, технологияларҙа, иҡтисадта, гуманитар өлкәләрҙә лидер булырға ярҙам иткән барлыҡ яҡшы, прогрессив нәмәне үҙебеҙгә алырға тейеш. Шайтан ҡотҡоһонан һаҡланыу өсөн Рәсәй халыҡтарының эске, төпкө иммун системаһы яҡлауы етеренә өмөтләнәм. Бының менән тура күрһәтмәләр биреп, әрләп һәм ғәйепләп көрәшергә түгел, ә традицион ҡиммәттәрҙе һаҡлап көрәшергә кәрәк.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Республика балалар гематология һәм онкология үҙәген төҙөү барышы менән танышты. Объект Республика балалар клиник дауаханаһы биләмәһендә урынлашты. Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин һүҙҙәренсә, йыл һайын беҙҙең республикала ғына табиптар 17 йәшкә тиклемге балаларҙа 130-ға яҡын яман шеш осрағын асыҡлай. Башҡортостанда бөтәһе 850-нән ашыу бала диспансер күҙәтеүенә алынған.

✓"Рейтинг" мәғлүмәт коммуникациялары үҙәге Рәсәй Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университеты менән берлектә 2021 йыл өсөн Рәсәй Федерацияһы төбәктәренең баш ҡалалары мэрҙары һәм ҙур финанс-сәнәғәт үҙәктәре эшмәкәрлеген баһалауға арналған йомғаҡлау тикшеренеүен әҙерләне. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Сергей Греков был рейтингта 12-се урынды алды. Исемлектә беренсе урында - Мәскәү мэры Сергей Собянин, икенселә - Төмән мэры Руслан Кухарук, өсөнсөлә - Ҡаҙан мэры Илсур Метшин. Дөйөм алғанда, 88 ҡала мэрының эшмәкәрлеге баһаланды.

✓Өфөлә Ағиҙел йылғаһы буйында асылған һырғалаҡҡа Дуҫлыҡ монументы яғынан, йәки Конгресс-холдан төшөргә мөмкин. Һырғалаҡ көн дә эшләй: дүшәмбе-кесаҙна - көндөҙгө сәғәт 2-нән киске 9-ға, йома - көндөҙгө 2-нән киске 10-ға, шәмбе һәм йәкшәмбе - көндөҙгө 12-нән киске 10-ға ҡәҙәр. Инеү - бушлай. Конькиҙы прокатҡа алыу хаҡы - 350 һум, 115 сантиметрға тиклемге балаларға - 150 һум, мәктәп уҡыусыларына, студенттарға һәм пенсионерҙарға - 250 һум. Ике ғаилә тарифы ла ғәмәлдә: әсәй, атай, бала - 700 һум, әсәй, атай, ике бала - 800 һум.

✓Өфөлә Башҡортостандың халыҡ шағиры Факиһа Туғыҙбаеваға мемориаль таҡтаташ асылды. Иҫтәлекле таҡтаташ Революция урамында 1977 йылдан алып 2021 йылға тиклем Башҡортостандың халыҡ шағиры, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, "Аҡбуҙат" балалар журналын ойоштороусы һәм уның беренсе баш мөхәррире, журналист, йәмәғәт эшмәкәре Факиһа Туғыҙбаева йәшәгән йортҡа ҡуйылды.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕ БАР!

# "УҘҒАН ЙЫЛ ӨСӨН ХАЛЫҠ АЛДЫНДА ОЯТ ТҮГЕЛ"

**(Башы 1-се биттә).**

Ысынлап та, тормош етәкселекте генә түгел, һәр ҡайһыбыҙҙы оло һынауҙар алдына, шул уҡ ваҡытта йәшәү өсөн көрәш юлына баҫтырҙы, сөнки тажзәхмәт һөҙөмтәһендә күп яҡын кешеләребеҙҙе юғалттыҡ, ғүмерҙе баһаларға өйрәнә башланыҡ. Матди йәһәттәге һәр нәмәне тергеҙеп булған хәлдә лә, ғүмерҙе генә тергеҙеп булмай икәненә тағы бер инандыҡ. "Иң ауыры - кешеләрҙең үлеме", - тине республика Башлығы һәм шуға күрә пандемияға бәйле ҡәтғи саралар күрергә тура килеүен белдерҙе: "Беҙ бизнесты ҡотҡарыуҙы түгел, халыҡ сәләмәтлеген һайланыҡ", - тине ул. Шул уҡ ваҡытта бәләкәй һәм урта бизнесҡа ярҙам саралары булдырыуын да билдәләп үтте.

"Ҙур әңгәмәлә" дөйөм һәм республикаға ҡағылышлы һорауҙар менән бер рәттән, баш ҡалаға ҡағылышлы һорауҙар ҙа күтәрелде. Мәҫәлән, һуңғы ваҡытта шаушыу тыуҙырған "Олимпик-парк"тағы Лидо ҡунаҡханаһының емертелеүе тураһындағы һорауға Радий Хәбиров түбәндәгесә яуап бирҙе: "Төбәктә шундай ваҡиғалар була, уларҙан һуң мин ҡәһәр йыям. Был мәсьәләгә ҡыҫылмауым һәм үҙ фекеремде белдермәүемдең бер нисә сәбәбе бар. Беренсенән, Өфө хакимиәте һәм башҡа структураларҙың нисек эш итере ҡыҙыҡ ине. Икенсенән - "Лидо" мәсьәләһендә изге рыцарҙар юҡ. Уны төҙөгән ваҡытта барыһы ла үҙ өлөшөн ала, унда хаҡлылар юҡ, ғәйеплеләр генә бар. Объектты төҙөгән ваҡытта муниципалитеттың роле ниндәй булыуы аңлашылмай. Документтарҙы тикшерә башлаһаң, шахмат термины менән әйткәндә, пат торошо. Объектты ҡотҡарыу мөмкин түгел ине. Уны ҡабул итеү документтарына ҡул ҡуйырға ла ярамаған, сөнки бер-бер хәл килеп тыуһа, берәүҙең дә башынан һыйпамаҫтар ине.



Ҡунаҡхананы һүтеү тураһында ҡарар 2016 йылда уҡ ҡабул ителгән, шунан бирле халыҡҡа бер ни аңлатылмаған, мәғлүмәт блогы ла эшләп еткермәгән. Өсөнсөнән, бизнес-омбудсмен кемдәрҙәлер өмөт уятты, әммә унда бер өмөт тә юҡ ине. Кешеләрҙе өмөтләндереү дөрөҫ түгел. Күңелдә төйөр ҡалды. Бындай арзан хайп өсөн берәүҙе лә яҡларға ташланманым, сөнки берәүҙе лә яҡлап булмай ине. Участкала артабан нимә булыр - ҡарарбыҙ".

Мәғлүм булыуынса, республика Башлығы транспорт реформаһын башлау тураһында белдергәс, йәмғиәттә бер аҙ ҡәнәғәтһеҙлек тә һиҙелгәйне. "Ҙур әңгәмәлә" был һорау тағы ла күтәрелде. "Күптәр беҙҙе эшләгән эштәребеҙ өсөн әрләй. Хәҙер ПАЗ-иктарҙы йыш күрәһегеҙме? Улар менән көрәш - транспорт реформаһының бер өлөшө генә. Улар йөрөгән маршруттарҙың хужалары бизнес төҙөй, унда миллиардтар әйләнә. Әгәр транспорт реформаһын башламаһаҡ, мин яҡшы булыр һәм рейтингымды ла һаҡлап ҡалыр инем. Әммә автобус паркын яңыртабыҙ. Шәхси эшҡыуарҙар менән дә әңгәмәләр үткәрәбеҙ. Беҙ сифатлы транспорт инфраструктураһы булдырырға тейешбеҙ. Әлбиттә, Мәскәү менән ярышып булмай. Икенсе аҙым - ҡала һәм районда ла транспорттың нормаль системаһын булдырыу".

Өфө темаһын дауам иткәндә, Радий Фәрит улының ҡасан Өфөлә йәйәү йөрөгәнлеге тураһында һорау булды, сөнки баш ҡаланы машина тәҙрәһе аша ғына күҙәтеү менән унда йәйәү йөрөү араһында айырма бик ҙур...

"Минең муниципаль коммуналь хужалыҡ етәкселәренә һорауҙарым тыуа. Өфө властары тәнҡиткә лайыҡ. Был йәһәттән һәр урам һепереүсегә барып етергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта беҙ Өфөгә ярҙам кәрәклеген аңланыҡ һәм техника һатып ала башланыҡ. Халыҡтың бер өлөшөндә таҙартылмаған ҡарға бәйле үпкә бар. Быны ғәҙел тип һанайым. Яҡшыраҡ эшләргә кәрәк. Чиновниктар ниндәйҙер яҡшылыҡ эшләһә, кешеләр рәхмәт әйтә!"

Республика буйынса киң йәйелдерелгән "Башҡортостан ихаталары" программаһын тормошҡа ашырыу барышында бик күп ихаталар икенсе һулышын алды. Был турала ла республика Башлығының фекере иғтибарға лайыҡ: "Беренсе йылда 400 ихатаны ремонтлағайныҡ, икенсе йылда - 300, быйыл - 128. Мин уңайлы мөхит булдырырға, парктарҙы проекттарға яратам. "Беренсе Май" паркын иҫләгеҙ... Бәләбәйҙәге, Ишембайҙағы парктарҙы. Уларҙы һанай китһәң, күп. Халыҡ был эшмәкәрлекте яҡшы ҡабул итә. Беренсе йылда ихаталарҙы нисек эшләнеләр - алдашыуҙар, сифатһыҙ ремонт. Икенсе йыл хәлдәр бер аҙ яҡшырҙы. Быйыл тағы ла яҡшыраҡ. Ресурстар булыу менән эште артабан дауам итәсәкбеҙ. Тәү сиратта иң насар ихаталар тәртипкә килтереләсәк. Бөгөн беҙҙең талаптарҙы аңлаған һәм эшен сифатлы башҡарған подрядсылар бар".

Шулай уҡ Радий Хәбиров юлдарҙың насарлығы тураһындағы мөрәжәғәттәрҙең күп булыуын билдәләне. 2024 йылға тиклем аҡсаның билдәле бер өлөшө Өфө юлдарын ремонтлауға, баш ҡалаға инеү һәм сығыу юлдарын ремонтлауға йүнәлтеләсәк. Был йәһәттән республика Башлығы Өфөләге Комсомол урамында, Ибраһимов бульварында башҡарылған эштәр тураһында һөйләне. Был участкаларҙа юлдар ғына түгел, ә ундағы инфраструктура тулыһынса ремонтланған.

Өфөлә 14 мең квадрат метр майҙанлы хоспис, балалар онкологияһы һәм гематологияһы үҙәге, балалар өсөн үҙенсәлекле "Салют" реабилитация үҙәге төҙөү, Башҡорт дәүләт университеты менән Өфө дәүләт авиация техник университетын берләштергән Өфө фән һәм технологиялар университетын булдырыу һәм башҡа көнүҙәк мәсьәләләр ҙә иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Мәғариф темаһына килгәндә, Башҡортостан Башлығы киләсәктә республикала 12 полилингваль гимназия буласағын тағы бер тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм үҙенең 5 йәшкә тиклем бер рус һүҙен дә белмәүе, бөгөн ҡабаттан туған телен өйрәнеүе тураһында белдерҙе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостан йылды нисек тамамлай һәм киләсәккә ниндәй пландар ҡора? Радий Хәбиров һүҙҙәре менән әйткәндә: "Беренсе - тажзәхмәт. Бөгөн беҙҙә 8,5 мең койка түгел, ә 1,5 мең урын һәм ауыр хәлдәге 200 пациент бар. Сир менән нисек көрәшергә икәнен беләбеҙ, табиптар тәжрибә тупланы. Икенсеһе - иҡтисад. Беҙ йылға юғары иҡтисади күрһәткестәр менән инәбеҙ: сәнәғәт индексы 106 процент тәшкил итә. Инвестицион климатты яҡшыртыу буйынса эшмәкәрлегебеҙ һөҙөмтә бирҙе. Предприятиеларҙы әкренләп аяҡҡа баҫтырабыҙ. Ҡыҫҡаһы, ҡайҙа йәшәү һәләте күрәбеҙ - һауыҡтырабыҙ". Пландарға килгәндә... Бөгөнгө ауыр һәм ҡатмарлы, иртәгәһенә ни булыры билдәһеҙ заманда алдан ҡысҡырыуҙан да файҙа юҡ. Бары тик Башҡортостандың девизына әүерелгән йүнәлештән генә тайпылмаҫҡа инде: "Алға!"**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҺӘЙКӘЛ УРЫНЫНДА ҠАЛАСАҠ!

**Социаль селтәрҙәрҙә Салауат Юлаев һәйкәлен урынынан күсереү хаҡында таратылған ялған хәбәрҙе БР Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса Фәнни-производство үҙәк директоры Данир Ғәйнуллин урынһыҙ яңы йыл шаяртыуы тип атаны.**

"Һәйкәлдең үҙе лә, урыны ла - һаҡ аҫтында. "Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының мәҙәни мираҫ (тарих һәм мәҙәни ҡомартҡылары) объекттары тураһында" Федераль закон һәйкәлдәрҙе хатта бер метр ҙа ситкә күсереүҙе тыя. Реставрация үткәргәндә лә һәйкәлгә бер генә элемент та өҫтәргә йә алып ташларға рөхсәт ителмәүе хаҡында бер нисә тапҡыр әйтеп кителгәйне инде. Скульптор С.Тавасиев менән архитектор И.Ғәйнетдинов ҡулдары менән булдырылған һәйкәл бер ниндәй үҙгәрешһеҙ һәм үҙ урынында ҡалырға тейеш!" - тип яҙҙы үҙ диуарында Данир Ғәйнуллин.

Фәнни-производство үҙәге етәксеһе аңлатма биреүенсә, Салауат Юлаевҡа һәйкәл федераль әһәмиәттәге мәҙәни мираҫ булып тора, уның сиктәре һәм һаҡланыусы объект булыуы билдәләнгән. Шуға күрә проект-тикшеренеү эштәре тамамланғандан һуң башланасаҡ реставрация тәртиптә ҡаралғанса ентекле күҙәтеү аҫтында буласаҡ. "Объекттағы бөтөн эштәр махсуслаштырылған ойошмалар менән хеҙмәт мөнәсәбәттәрендә торған һәм квалификациялары Башҡортостан мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау үҙәге тарафынан ентекле тикшереү үткәреп аттестацияланған белгестәр тарафынан ғәмәлгә ашырыласаҡ", - тине Фәнни-производство үҙәге директоры.

БР Кинематографтар берлеге рәйесе Зөһрә Бураҡаева ла, имеш, реставрациянан һуң "Һәйкәл Үҙәк баҙар ҡаршыһындағы транспорт ҡуласаһы уртаһында Өфө халҡы һәм баш ҡала ҡунаҡтарын һөйөндөрәсәк" тигән яңылыҡты көлкөлө хәбәр тип белдерҙе. "Уйлап ҡарағыҙ, һеҙ, балалыҡ аңынан сыҡҡан өлкән кешеләр, беҙҙең милли батырыбыҙға ҡуйылған һәм дәүләт символы булған һәйкәлде Ағиҙелдең бейек ярынан ысынлап та бына шулай сауҙа павильондары янына, машиналар һәм трамвай шауы аҫтына килтереп ҡуйырҙар тип уйларға йөрьәт итәһегеҙме? Һәм шулай итеп тарихты, беҙҙең ошо символ һәм бренд асылын, мәғәнәһен боҙоп күрергә итәһегеҙме?" - тип яҙҙы йәмәғәт эшмәкәре һәм теләһә ниндәй хәбәрҙәргә тиҙ ышанып барыусы кешеләргә Яңы йыл теләге юрарға кәңәш итте. Был теләк, һис шикһеҙ, бойомға ашасаҡ: Салауат Юлаевтың яңыртылған һәйкәле үҙ урынында, Ағиҙелдең бейек ярында, киләсәктә лә халҡыбыҙ ғорурлығы булып ҡаласаҡ!

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ауыҙ боҙолоу

**Ауыҙ боҙолоу, йәки русса "кандидоз" тип аталған сирҙән дә халыҡ дауаһы бар. Түбәндә бер нисә ысулды килтерәбеҙ.**

❖ Ауыҙ эсенә көнөнә 2-3 тапҡыр әрем, һарымһаҡ йәки һуған һутын һөртөгөҙ. Бынан алда ауыҙҙы таҙартырға кәрәк. 5-7 көндән хәлегеҙ яҡшырыр. Шулай ҙа дауаланыуҙы ҡапыл туҡтатырға ашыҡмағыҙ, тағы ла 2-3 аҙна дауам итегеҙ.

❖ Балан һәм мүк еләге һуттарында бәшмәктәрҙе бөтөрә торған тәбиғи антибиотиктар һәм витаминдар күп. Был һуттарҙың береһе менән ауыҙ ҡыуышлығын сайҡатыу, йәки уларҙы уртлап, оҙағыраҡ тотоп тороу файҙалы. Был рәүешле дауаланыу оҙайлығы 1 айҙан да кәм түгел.

❖ Һары мәтрүшкә үләне микробтарға ҡаршы һәм яраларҙы уңалтыуға булышлыҡ иткән көслө үлән. Ауыҙ боҙолғанда уның төнәтмәһен ҡулланалар. 1 ҡалаҡ һары мәтрүшкәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут талғын утта ҡайнатырға һәм һөҙөргә. Ике аҙна дауамында көнөнә 5-6 тапҡыр ошо төнәтмә менән ауыҙҙы сайҡатырға.

❖ Һаҙанаҡ та (багульник болотный) ауыҙ боҙолғанда бик яҡшы ярҙам итә. 20 грамм үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, талғын утта 15 минут тоторға, шунан һөҙөргә. Төнәтмә менән көнөнә 5-6 тапҡыр ауыҙҙы сайҡатырға. Дауаланыу ауырыуҙың хәленә ҡарап дауам итә.

❖ 1 ҡалаҡ петрушка тамырына 1 стакан һыуыҡ һыу ҡойорға һәм утҡа ҡуйырға. Ҡайнар хәлгә еткереп, утты һүндерергә. 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 5-6 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ укроп орлоғона ярты литр ҡайнар һыу ҡойрға. Йылыға төрөп, 1 сәғәт төнәтергә, шунан һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ас ҡарынға 1/3 стакан күләмендә эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ содаға 1 стакан ҡайнатылған һыу ҡойоп, иреп бөткәнсе болғарға. Һыуытырға һәм тәүге тәүлектә 2 сәғәт һайын, һуңынан һәр 4-6 сәғәт һайын ауыҙҙы сайҡатырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Урындыҡтың өрлөгө үҙ-ара яҡын урынлашҡан бағана йәки бурсаларҙа торған. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарҙа терәү таяуҙарҙың ике яғынан өсмөйөш "шаршауҙар" ҡағыу ғәҙәте булған. Был терәктәрҙе үҙенсә нығытып тотороп ҡуйыу ысулы ла. Асыҡ ҡалған трапеция формаһындағы тишектән түшәм аҫтына йылы һауа ингән. "Шаршауҙар" өҫтөнә бысаҡ йәки циркуль ярҙамында сыймаҡлап биҙәк төшөрөлгән: параллель һыҙыҡ, көкерсәк, түңәрәк, ярым түңәрәк. Ҡайһы бер өйҙәрҙә биҙәк өлөштәре буялған.

Урындыҡ ситен оҙонса таҡта-йәҙләк - яңҡырыҡ, урындыҡ ширлеге - ҡаплап торған. Уның өҫтө шыма йәки һырлы булған. Ҡайһы осраҡта уға ҡырҙары теш, тел, баҫҡыс рәүешле ҡырҡылған селтәр кәрниз ҡағылған. Таҡта өҫтөндә һырлы йәки шыма ҡаймаһынан өҫтәрәк ҡалҡып торған биҙәк таҫмаһы ("арҡан", "мөйөштәр", ҡыя шаҡмаҡтар теҙмәһе һ.б.) йәки яртылаш уйымланып торған тишек һәм түңәрәктәрҙән торған орнамент урынлашырға мөмкин. Тәүге осраҡта биҙәккә яҡын ерлек тә тулыһынса, йәки өлөшләтә батырынҡы итеп эшләнгән.



*Урындыҡ биҙәктәре. Экспедициялар материалдары буйынса. Рәссамы И.Н. Сабитов*

Урал буйында (Ғафури, Стәрлетамаҡ райондары) урындыҡ кәрнизенә алдан ҡырҡылған биҙәктәр ҡағылған. Кәрниз таҡтаһы арҡыры тура дүртмөйөштәр ярҙамында өлөштәргә бүленгән, уларға ике яҡтан көҙгөлә сағылған кеүек итеп урынлаштырылған биҙәктең ҙур булмаған деталдәре терәлеп торған. Һындар низелер аңлатҡан булһа кәрәк. Орнаменттың ҡайһы бер элементтары үҙенең ыҡсымлығы менән символдарҙы хәтерләтә. Икенселәре деталле композиция хасил итә, гүйә, ниндәйҙер тарих һөйләй. Ҡайһы бер биҙәктәрҙә зооморф мотивтар сағылыш тапҡан.

Урындыҡты шулай уҡ биҙәгәндәр: ал яғын таҡта менән өлөшләтә ҡаплап, үтәнән-үтә тишеп биҙәк һалғандар. Ярым түңәрәк, бейек көмбәҙ, өсмөйөштәр теҙмәһе, ҡыя шаҡмаҡ рәүешендәге вентиляция тишектәре эшләнгән һәм арҡыры һыҙат булып урынлашҡан.



*Урындыҡтағы вентиляция тишектәре*

Урындыҡ семәрле булмаған осраҡтарҙа ситенән һалынып торған тәслә балаҫ ябылған һәм тояҡтарын биҙәргә тырышҡандар. Бер ни тиклем яҫыраҡ бурсаларҙың ҡырҙарын төрлө ҙурлыҡтағы ярым түңәрәк, оҙонса түңәрәк рәүешендәге биҙәк менән семәрләгәндәр, һирәк осраҡта ябай ғына биҙәк төшөргәндәр.

Йорт эсен йыһазландырыу элементы булараҡ урындыҡтар ағас өйҙә барлыҡҡа килеүе тураһында яҙып үткәйнек. Әммә ҙур булмаған ҡалҡыу урын ҡайһы осраҡта тирмә эсенә лә ҡуйылған. "Алдар менән Зөһрә" башҡорт халыҡ эпосында Зөһрә ҡунаҡтарҙы ҡаршы алып, тирмәгә үткәреүе һәм төрлө балаҫ-яҫтыҡтар менән ҡапланған урындыҡҡа ултыртыуы тураһында бәйән ителә. Көньяҡ башҡорттар бик оҙаҡ йылдар мәҙәни һәм иҡтисади бәйләнештәр тотҡан нуғай халҡында тирмәләргә ағастан эшләнгән тәпәш карауаттар, йә йышыраҡ кейеҙ һәм балаҫтар менән ҡапланған һәм ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы ултыртҡан киң, тәпәш дивандар "урындыҡ" тип атап йөрөтөлгән. XX быуаттың 50-се йылдарында көньяҡ башҡорт ауылдарында өй стеналарына беркетеп ҡуйылмаған ыҡсым ғына урындыҡтарҙы осратып булған. Кәрәк саҡта уларҙы күсереп ҡуйып булған. Ысынында был төбөндә бөтә кәрәк-яраҡты һаҡларлыҡ киң йәшник, тиергә мөмкин. Алғы яҡтан семәр йәки буяуҙар менән һүрәт төшөрөп биҙәлгән.



*Күсермәле урындыҡ, 1958 йыл. Г.И. Мөхәмәтшин һүрәте*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ИШЕТКӘЙНЕГЕҘМЕ?

# УҘҒАН ЙЫЛДЫҢ...

## ун дүрт бүләге



● 2021 йылдың 1 июленән йәшәү минимумынан түбән килемле һәм тулы булмаған ғаиләлә тәрбиәләнеүсе 8 йәштән 14 йәшкәсә балаларҙың һәр ҡайһыһы 5 мең күләмендә өҫтәмә түләү ала башланы. Атай йәки әсәй суд ҡарары менән алимент алырға хаҡлы йәки уларҙың береһе ғаиләне яңғыҙ тәрбиәләгән осраҡта тулы булмаған ғаилә тип иҫәпләнә.

● 2021 йылдың көҙөнә тиклем ҙур стажы булмаған йәш әсәләргә сирләп киткән балаһын ҡарау буйынса ваҡытлыса хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡ (больничный) өсөн эш хаҡының ни бары 60-80 проценты ғына түләнде. Тулы эш хаҡын алыу өсөн кәмендә 8 йыл эш стажы кәрәк ине. Был ғәҙелһеҙлек төҙәтелде: хәҙер сирләп киткән 7 йәшкә тиклемге баланы ҡарау буйынса, стаж күләменә ҡарамаҫтан, атай йә әсәйгә эш хаҡы 100 процент күләмендә түләнәсәк.

● Килеме йәшәү минимумынан кәм булған ҡатындар йөклөлөктөң иртә срогында ҡатын-ҡыҙ консультацияһында иҫәпкә торған осраҡта элекке кеүек бер тапҡыр түгел, ә ай һайын 5320,5 һум (Башҡортостан буйынса) пособие аласаҡ. Был түләү ғариза биргән айҙан башлап бала тыуҙырған айға тиклем түләнә, ғаризаны "Дәүләт хеҙмәттәре" аша Пенсия фондына ебәрергә кәрәк.

● Владимир Путин ҡул ҡуйған указға ярашлы, 2021 йылдың мартынан 3 йәштән 7 йәшкә тиклемге балалар ҡараған аҙ килемле ғаиләләр өсөн пособие күләме арттырыла. Ошоға тиклем был пособие күләме һәр балаға 5038,5-әр һум тәшкил иткән хәлдә лә, ғаилә аҙ тәьминәтле булып иҫәпләнә икән, пособие 7557,75 һумғаса арттырыласаҡ. Был хәлдә лә ғаилә килеме йәшәү минимумынан кәм ҡала икән, пособие 10 077 һумға тиклем арттырыла.

● 2021 йылдың көҙөнән 14-22 йәшлек йәштәргә "Дәүләт хеҙмәте. Мәҙәниәт" ҡушымтаһы аша дәүләт иҫәбенә ил буйынса концерттар, спектаклдәр һәм күргәҙмәләр ҡарау өсөн "Пушкин картаһы" алырға мөмкин. Ошоға тиклем был картала 3000 һум аҡса булһа, хәҙер уға 5000 һум күсереләсәк. Башҡортостанда 155 мең кеше ошондай картаға эйә булды. Владимир Путин күрһәтмәһе буйынса тиҙҙән "Пушкин картаһы" менән ватан кинофильмдары өсөн дә иҫәпләшергә мөмкин буласаҡ.

● Ташламалы ипотека Рәсәй граждандарының бөтәһенә лә йыллыҡ 7 процент менән кредит алырға мөмкинлек бирә. Был программаны 2021 йылда тамамлау ҡаралған булһа ла, уны 2022 йылдың йәйенә тиклем оҙайтырға ҡарар ителде. Иң юғары кредит суммаһы - 3 млн һәм торлаҡ хаҡының 15 процентын тәүге взнос итеп түләү ипотеканың шарты булып тора. Фатирҙы төҙөләп яткан йорттан уны төҙөүсе ойошма аша йәки яңы төҙөлгән йорттан алырға була.

● Был яңылыҡ, әлбиттә, социаль түләүҙәргә ҡағылмай, шулай ҙа ул бик мөһим һәм файҙалы. 2021 йылдың 2 апреленән Өфөнән Стәрлетамаҡ һәм Мәләүез аша Күмертауға тиклем "Орлан" экспресс-поезд йөрөй башланы, ә сентябрҙә уның маршруты Ырымбурға тиклем оҙайтылды. Ошоға тиклем 11 йыл инде Өфө менән Ырымбур араһында тимер юл хәрәкәте юҡ ине, хәҙер иһә был көньяҡ төбәккә 6 сәғәт эсендә барып етергә була.

● Рәсәй коронавирустан теркәлгән өс һәм уның төрҙәрен иҫәпләп - биш, ә инде әле эшләнеп ятыусы төрҙәрен дә иҫәпләп - ете вакцинаға эйә берҙән-бер ил. "СпутникУ" һәм "Спутник лайт" шуларҙың иң күп ҡулланылғаны һәм бойондороҡһоҙ сит ил белгестәре тарафынан хупланған төрҙәре. Рәсәйҙә бөтөн вакциналар ҙа бушлай яһала.

● 2021 йылда ил буйынса сәйәхәттәр өсөн кешбәк программа бик ҙур популярлыҡ менән файҙаланды. Башҡортостан шифаханаларға һатылған путевкалар һаны буйынса Рәсәйҙә туристар иң күп килгән төбәктәр иҫәбенә инде. Был программа 2022 йылда ла ғәмәлдә ҡаласаҡ. 2022 йылдың 18 ғинуарынан 22 апреленә тиклем Рәсәй буйынса сәйәхәткә йәки ҡунаҡханала йәшәгән өсөн "Мир" картаһы менән иҫәпләшеп, хаҡтың 20 процентын (тик 20 меңдән дә күберәк суммала түгел) кире ҡайтарып алырға була.

● 2021 йылда дәүләт "туристик кешбэк" программаһы кеүек үк, йәйге балалар лагерына путевка хаҡының да 20 процентын түгел, ә ярты хаҡын ҡайтарып бирҙе һәм 2021 йылдың 25 майынан 120 миллионлыҡ 5175 путевка һатып, ил буйынса өс лидер төбәк иҫәбенә инде. 2022 йылда был программаның дауам ителәсәге хаҡында әлегә мәғлүмәт булмаһа ла, уны ҡабатлауҙары бик мөмкин.

● 2021 йылда Социаль страховка фонды компания һәм ойошмаларға эшкә ҡабул ителгән һәр бер эшһеҙ кеше өсөн аҡса түләне. Был эшһеҙлек кимәлен кәметеү һәм эш хаҡы сығымдарын ҡаплау маҡсатында ғәмәлгә ашырылды. Башҡортостанда эшкә ҡабул ителгән һәр хеҙмәткәр өсөн компанияларға 19 153 һум түләнде. 950 эш биреүсе компания 1 568 кешене, шул иҫәптән, 55 инвалидты, уҡыу йорттарын тамамлаған 28 йәш кешене, пенсия алды йәшендәге 275 кешене, бер үҙе ғаилә аҫраған йәки күп балалы 180 ата-әсәне эшкә ҡабул итте.

● Бәләкәй һәм урта бизнесҡа ҡараған компаниялар ярты хаҡҡа рөхсәт ителгән ватан софты (программалау тәьминәте) һатып алырға мөмкин. Рәсәйҙең Цифрлаштырыу буйынса министрлығы ошондай программа тәҡдим итә. Исемлектә әлегә документ әйләнеше, сауҙа, логистика, персонал һәм финанстар менән идара итеү, шулай уҡ башҡа йүнәлештәр буйынса 50-нән ашыу программа бар.

● Рәсәйҙәрҙең ер участкаларына газ хәҙер бушлай үткәреләсәк. Беҙгә бары участка сигенән йортҡа тиклем газ торбаһы үткәреүҙе һәм газ ҡорамалдары (ҡаҙан, һыу йылытҡыс, торбалар, плитә, хисаплау приборы) өсөн түләргә кәрәк була. Владимир Путиндың күрһәтмәһе буйынса Дәүләт Думаһы шундай закон ҡабул итте. Башҡортостанда бөтәһе 2500 торлаҡ пунктында 180 мең йортҡа газ үткәреү бурысы тора. Әгәр ауылға электән газ үткән булһа, айырым йорттарға газ бушлай тоташтырыласаҡ.

● 2021 йылда шундай төр һалым айырмаһы индерергә ҡарар ителгәйне - кешеләр үҙҙәренә һәм балаларына спорт-һауыҡтырыу саралары өсөн түләгән суммаларының 13 процентын ҡайтара ала. Был яңы һалым айырмаһы дауаланыу, белем алыу, ДМС, страховка һәм пенсия взностары кеүек "социаль айырма" төркөмөнә инә һәм дөйөм лимит буйынса 15 600 һум аҡса кире ҡайтарыла.

**✓ "Муса Мортазин менән бәйләнештә булып, йәшерен йыйылыштарҙа совет власына ҡаршы көрәш ойоштороу мәсьәләләрен күтәрә. Колхозды юҡҡа сығарыу өсөн агитациялар алып бара", - тигән ғәйепләү менән хөкөм ҡарары сығарыла.**



ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

**Күптән түгел ҡулыма Мифтахетдин Аҡмулла тураһында ике ҡыҙыҡлы мәҡәлә килеп эләкте. Шағирҙың тыуыуына 190 йыл тулған көндәрҙә ошо хаҡта гәзит уҡыусылар менән дә бүлешке килә. Улар икеһе лә уҙған быуаттың 20-се йылдарында "Башҡортостан" гәзитендә баҫылған. Тәүгеһе 1924 йылда. Авторы - Сәғит Мерәсов. 1926 йылдың 26 авгусында баҫылғанының авторы Дауыт Юлтый. Тәүгеһе Мифтахетдин Аҡмулланың биографияһы хаҡында ҡиммәтле генә мәғлүмәттәр бирә. Икенсеһе асыҡ хат рәүешендә яҙылған.**

# КЕМ УЛ СОЛТАНМӘХМҮТ ЮЛДАШЕВ?



Солтанмәхмүт үҙ ҡулы менән тултырған анкета дәфтәре.

Сәғит Мерәсовтың мәҡәләһендә Аҡмулланың әлегә аҙ билдәле шиғыры баҫылған:

*Оло тип әйткән түрәң муллаң - әрәмтамаҡ,*
*Күңеле ҡара, үҙе ала, ирене ялаҡ.*
*Тоғро һүҙҙе әйтһәк, аттай сығынлай,*
*Дау тиһәң, арыҡ аты китә сабып.*
*Йөрәккә түҙмәй әйтәм был һүҙҙәрҙе*
*Һеҙҙәй ҡасҡыр йөрәгемде яралаған.*
*Йыһанда тоғролоҡ һәм дә хаҡлыҡ*
*Һаман шулай йөрөрмө тапталмай?*
*Ватылғас таш йөрәклек, аҡһөйәклек*
*Фәҡир халыҡтар ҙа бер шатланырмы?*

Был шиғырҙың һуңғы дүрт юлы Әхәт Вилданов тарафынан төҙөлгән "Аҡмулла. Шиғырҙар" китабында донъя күрә. Ә тәүге алты юлы Аҡмулланың шиғырҙары араһында әле булһа ла осрамай. Бынан тыш, Сәғит Мерәсов: "Аҡмулла башҡорт старшинаһы Буранғолдоң ҡушыуы буйынса 1895 йылдың 8 октябрендә Миәс менән Һарыҫлан ауылы араһында Ғәфиәт һәм Дәүли тигән башҡорттар тарафынан үлтерелә", - тигән мәғлүмәт тә бирә.

Ә бына Дауыт Юлтый мәҡәләһе шуныһы менән ҡыҙыҡ. Унда Аҡмулла менән яҡын таныш булған Солтанмөхәмәт тигән кеше хаҡында һүҙ бара. Мәҡәләне тулыһынса бирәм.

**"Ошо көндә минең тарафтан мәшһүр башҡорт шағиры Аҡмулланың шиғырҙары һәм тәржемәи хәлено бәйле материалдары йыйылып ята. Уның тураһында беренсе сыҡҡан мәжмүгәһендәге (Барый Батталдың һүҙ башы менән) шиғырҙары һәм "Үрнәк" матбуғаһында Ҡаҙанда, Мәржәни мәрсиәһе менән бергә сығарылған икенсе нәшеренән башҡа баҫылған әйберҙәре юҡ. Тәржемәи хәлено бәйле материалдарҙан Риза Фәхретдиндең "Аҫар"ы һәм "Шура" журналында баҫылған, Хәсән Ғәли, шулай уҡ Сәғит аға Мерәҫовтың бәғзе бер яҙма әйберләренән башҡа бер нәмә лә юҡ. Ул материалдарға ҡарағанда, Аҡмулланың тыуған йылы, айы, көнө лә асыҡ билдәле түгел. Аҡмулла тураһында материалдары булған кешеләрҙән (шиғыр, парсалары, тәржемәи хәлено ҡағылышлы материалдары, иҫтәлектәре, хаттары, ҡулъяҙмалары һаҡланған булһалар) уларҙы минә ебәреүҙәрен йәки белдереүҙәрен һорайым. Тарихи ҡиммәте булған материалдарға хаҡ та түләрбеҙ. Ваҡыты менән төрөк матбуғатында ла Аҡмулла тураһында әҙәби баһалар ҡуйылған мәҡәләләр баҫылыуы ишетелә. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: Тамъян - Ҡатай кантоны Ташбулат ауылының Солтанмөхәмәт тигән кешеһенең Троицкиҙа Аҡмулла менән күп йылдар бергә тороуон һәм уның тураһында күп кенә хәтирәләр һәм шиғырҙарын белеүен һөйләйҙәр. Солтанмөхәмәт бабанан ул турала хәтирәһен яҙып ебәреүен айырым рәүештә һорайбыҙ.**

**Адрес: Уфа, "Башкнига" Дауыт Юлтый".**

Билдәле булыуынса, Дауыт Юлтый 1925-1926 йылдарҙа Мәскәүҙә СССР халыҡтарының үҙәк нәшриәтендәге милли әҙәбиәт секцияһында эшләй. Ошо секция бөгөнгө көндә ҡиммәте баһалап бөткөһөҙ булған ике китапты баҫтырып сығара. Тәүгеһе, 1925 йылда, Ш. Бабичтың шиғырҙары, икенсеһе Хәбибулла Ғәбитовтың "Ыныйҡай менән Юлдыҡай" шиғри драмаһы. Мәҡәләлә Д. Юлтыйҙың башҡорт шағиры Аҡмулланың шиғырҙары һәм тәржемәи хәлено бәйле материалдар йыйыуын, артабан, ихтимал, китап итеп баҫтырыу маҡсаты менән эш итеүе билдәләнә.

Асыҡ хатта "Тамъян - Ҡатай кантоны Ташбулат ауылының Солтанмөхәмәт тигән гражданиндың Троицкиҙа Аҡмулла менән күп йылдар бергә тороуон һәм уның тураһында күп кенә хәтирәләр һәм шиғырҙарын белеүен һөйләйҙәр" тигән һөйләм бар. Хәҙерге Әбйәлил районының Ташбулат ауылында йәшәгән Солтанмөхәмәт бабай кем ул?

Был һорау менән мин Әбйәлил районының Күсем ауылында йәшәүсе курсташым, билдәле шағирә Зөлфирә Ҡарағужина-Мораташинаға мөрәжәғәт иттем. Күсем ауылы Ташбулат ауыл советына ҡарай, йәнә лә Зөлфирә Фәрит ҡыҙы хәҙер күп йылдар инде тыуған ауылы һәм Ташбулат ауылы халҡы менән шул төбәктең тарихына, шәхестәренә бәйле бик матур саралар үткәрә. Ул минә Солтанмөхәмәт тигән кеше тураһында беренсе тапҡыр ишетеүен, ә бына Троицкиҙа уҡып ҡайтып, аҙаҡ оҙаҡ йылдар Күсем ауылында мулла булып торған Солтанмәхмүт Юлдашев тигән кеше йәшәгәнлеге хаҡында әйтте. Исемдәренең яңғырашы оҡшаған, әлбиттә, тик Д.Юлтый "Солтанмөхәмәт" тип яҙа. Яңылыштымы, әллә икеһе ике кешеме? Бәлки, ағалы-ҡустылы Юлдашевтарҙыр?

Солтанмәхмүт Юлдашев - репрессия ҡорбаны. Һорауға яуап эҙләп, мин уның ейәнйәт эшен өйрәндем. Документта тыуған йылы 1871 йылдың аҙағы, яңы стиль менән 1872 йылдың башы, тип күрһәтелгән. Әбйәлил районының Күсем ауылынан. 1900 йылдан ошо ауылда мулла булып тора. Һөнәре - игенсе һәм мулла. Фирҡәһеҙ. Белемле - Троицкиҙа мәҙрәсә тамамлаған. Ғаиләһендә алты кеше. Урта хәлле: ике өйө, бер келәте һәм бер мунсаһы бар. Бынан тыш, дүрт бейә бәйләй, бер ҡонан, өс һыйыр тота.

Беренсе тапҡыр 1930 йылдың 5 мартында ҡулға алына. Өс айҙан, 5 июнь көнө енәйәт кодексының 58-10 статьяһы буйынса биш йылға хөкөм ителә. Сәбәбе: колхоз төҙөүгә ҡаршы агитация алып барыу һәм хөкүмәттең халыҡтан көсләп иген йыйыуына ҡаршылыҡ күрһәтеү.

1930 йылдың 13 февралендә Ташбулат ауылында ҙур йыйылыш үтә. Йыйылышта Ташбулат һәм Күсем ауылдары халҡы ҡатнаша. Көн тәртибенә халыҡтан иген йыйыуҙы ойоштороу һәм колхоз төҙөү эшен яйға һалыу кеүек мөһим мәсьәләләр ҡуйыла. Йыйылышта ауыл муллаһы Солтанмәхмүт Юлдашев: "Халыҡта иген юҡ. Әгәр ҙә бер генә бөртөк бойҙай тапһағыҙ ҙа, башымды киҫергә бирәм", - тип ҡаршы сыға. Ауыл халҡы үҙ малы менән колхозға инергә теләмәне тигән өгөтләүҙәр башланғас, С. Юлдашев тағы ла һүҙ ала һәм шаяртыу ҡатыш: "Колхозға ингән кешеләрҙең ҡатындарына Африканан кешеләр килтереп ҡушалар. Колхоздың нәҫелен яҡшыртыу өсөн", - тип хәбәр ташлай. Башҡорт телендә латин хәрефтәре менән яҙылған хөкөм ҡарарында тап шулай тип яҙылған.

Уның авторитеты, уҡымышлы булыуы үҙ эшен эшләй. Ауылдаштары колхозға инеүҙән баш тарта. С. Юлдашевты ауылдаштарынан айырып, төрмәгә оҙатыуҙан башҡа әмәл ҡалмай. Икенсе тапҡыр 1937 йылдың 3 декабрендә ҡулға алына һәм алты көндән: "Муса Мортазин менән бәйләнештә булып, йәшерен йыйылыштарҙа совет власына ҡаршы көрәш ойоштороу мәсьәләләрен күтәрә. Колхозды юҡҡа сығарыу өсөн агитациялар алып бара. Һуғыш башланасағы һәм совет власының юҡҡа сығыуы хаҡында хәбәрҙәр тарата",- тигән ғәйепләү менән хөкөм ҡарары сығарыла. Белорет ҡалаһының төрмәһендә 9 декабрҙән 10 декабргә ҡарай төндә атыла. Ейәнйәт эшендә ике исем күрһәтелгән. Ейәнйәт эше Солтанмәхмүт Юлдашевҡа ҡарата асылған булһа, хөкөм ҡарары Солтанмөхәмәт Юлдашевҡа ҡарата сығарылған. Шуға күрә, Дауыт Юлтый мәҡәләһендә телгә алған Солтанмөхәмәт шул уҡ Солтанмәхмүт Юлдашев булып сығыуына хәҙер шик юҡ.

Солтанмәхмүт (Солтанмөхәмәт) Юлдашев, ысынлап та, ейәнйәт эшендә яҙылғанса, Муса Мортазин менән яҡын аралаша. 1919 йылдың ҡышында М. Мортазин полкында башта аҡтарға, аҙаҡ ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыша. 1936 йылдың авгусында Муса Мортазин ике аҙна самаһы бер туған бажаһы (катындары бер туған була - **С.Г.**) Ташбулат ауылы уҡытыусыһы Ситдиҡов Харунда ҡунаҡта булып китә. Үҙенең элекке яуҙаштары менән, тәү сиратта, Солтанмәхмүт Юлдашев менән дә осраша. Муса Мортазиндың яуҙашы, Мифтахетдин Аҡмулла менән күп йылдар бергә Троицкиҙа йәшәгән Солтанмәхмүт (Солтанмөхәмәт) Юлдашев хаҡында киләсәктә ваҡытлы матбуғатта тағы ла һүҙ булыр, тигән ышаныс бар.

**Гөлсәсәк САЛАМАТОВА,**
**Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты.**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Башҡорт яугирҙары, тәүлектәр дауамында йылы аш та күрмәйенсә, арыпталсығып бөткән хәлдә лә, метрҙан ашыу ҡар ҡаплаған яландар аша үтеп, билдәләнгән маршрут буйынса хәрәкәт итеп, ҡул һуғышы менән тиерлек, Давыдовка, Александровка ауылдарын дошмандан таҙартып, алға бара. Корпус разведкаһы тирә-яҡтағы барса торлаҡ пункттарында дошман частары урынлашыуы хаҡында хәбәр итә: Фромандиновкала - артиллерия бригадаһы һәм дошмандың 400-ҙән ашыу һалдаты һәм офицеры, обоздар, Журавлевка ауылынан көньяҡтараҡ - артиллерия полкы, Ивановка ауылында - танкылар һәм дошман автоматчиктарының ҙур төркөмө. Беҙҙең 8-се корпустың дошман тылынан сығырға тейешле маршруты буйындағы Штеровка, Федоровка, Никитовка ауылдарында, Юлино 2-се утарынан төньяҡтараҡ булған ат һарайҙарында дошман ғәскәре урынлашҡан була. Ҡайҙа ҡарама - немец частары, уларҙың танкылары, артиллерияһы һәм бихисап тере көстәре. Уйлап ҡараһаң, армия штабының ошо үлемесле хатаһы меңәрләгән батыр яугирҙарыбыҙҙың ғүмеренә һуңғы нөктә ҡуйған икән. 8-се атлы гв. корпусы һәләкәте, һуғыш ваҡытына хас булғанса, кире ҡайтара алмаҫлыҡ юғалтыуҙар иҫәбенә индерелеп, башҡаса бер ниндәй ҙә баһа алмай ул саҡта. Ни эшләйһең инде: ошо ғәрәсәт йылдарында бер ниндәй ҙә стратегик һәм тактик схемаларға һис тура килмәгән, совет ғәскәрҙәрен аяуһыҙ юғалтыуҙарға дусар иткән бойороҡтар аҙ булмай.

Башҡорт дивизияһы яугирҙары Владимировка ауылына етеп килгән мәлдә яҡындағы ҡалҡыулыҡтан, 15 танк артына ышыҡланып, ике батальон дошман пехотаһы беҙҙең һалдаттарға ҡаршы сыға. Авангардта 60-сы атлы полк яугирҙары бара, әммә тик уларҙың үтә һирәгәйгән сафтары дошман атакаһын кире ҡаға алмаҫ ине. Гв. подполковнигы Г. Фондеранцев гв. өлкән лейтенанты Хәсән Бикчуринды артиллеристарҙы ярҙамға саҡырырға ебәрә, ә үҙе тыл подразделениелары һәм штабта хеҙмәт иткән яугирҙар менән ут һыҙығына сыға.

Дошман бөтә төр ҡоралдарынан беҙҙең яугирҙар өҫөнә ут яуҙыра, дошман танкылары ла, ҡарҙы соҡоп кереп яткан атлыларға төбәп, бер туктауһыҙ пушкаларынан һәм пулеметтарынан ата башлай. 40 - 50 метр ара ҡалғас, беҙҙең һалдаттар дошман танкыларына ПТР мылтыҡтарынан ут аса. Рядовой Ибраһимов беренсе атыуҙан уҡ дошмандың "Тигр" танкыһын емертә. Исмәғил Кәбиров һәм Сабир Ишморатов та берәр танкыны туҡтата.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

# ТӘҮҘӘ ҺИН ЫРЫУЫҢДЫ АСЫҠЛА,

## ырыуың башҡортлоғоңдо раҫлар…

**Башҡортостан юлдаш каналы аша "Бәйге"не - беренсе башҡорт милли уйындары чемпионатын ҡарағанһығыҙҙыр. Оҡшанымы? Оҡшамай әллә! Беренсе бит! Милли бит! Һәр тамаша үҙенән-үҙе барлыҡҡа килмәй. Уны кемдәрҙер ойоштора, көс түгә. Тамаша булараҡ, тамашасыға еткерерҙән алда ул бик күп юл үтә, ваҡиғаларға байып, йүргәктән сыҡҡан бала кеүек, аяҡ баҫа, нығына, халыҡ биргән баһаны көтә. Ошо чемпионаттың нисек барлыҡҡа килеүе тураһында һөйләүен һорап, БР Стратегик тикшеренеүҙәр институтының бүлек мөдире, этнограф, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Юлдаш ЙОСОПОВҡа мөрәжәғәт иттек.**

### Аҫабалыҡ ҡасан барлыҡҡа килгән?

Милләт булып формалашҡансы ырыуҙар араһындағы ыҙғыштар арҡаһында тарҡаулыҡ булған, тиҙәр. Улай уҡ ҡырҡа раҫларға ярамай, сөнки дошманлашыу һәр бер йәмғиәттә күҙәтелә. Шуны аңларға кәрәк: ырыуҙарға бүленеү тарҡаулыҡтың төп сәбәбе түгел, ә ырыуҙарҙың үҙҙәрен ырыу булараҡ таныуы, идентификациялауы, тип ҡабул итергә кәрәк.

Тарихи Башҡортостан сиктәрендә иң башта ырыуҙарҙың биләмәләрен бүлеп ҡарағандар, йәғни һәр бер ырыу үҙенең аҫабалыҡ хоҡуғын тулыһынса файҙаланған. Ниңәлер тик Иван Грозный осоронда ғына аҫабалыҡ хоҡуғы бирелгән, тигән хата фекер нығынған. Әлеге ваҡытта тарихсылар аҫабалыҡты Алтын Урҙа осорондағы процестар менән бәйләй. Мин дә тарихи Башҡортостандағы аҫабалыҡтың үҫешен 14-се быуаттағы ваҡиғалар менән бәйләйем. Нәҡ шул осорҙа, Туҡтамыш хандың идараһы ваҡытында, аҫабалыҡты булдырыу өсөн шарттар барлыҡҡа килә. Башҡорттар Туҡтамышты хан булараҡ ҡабул иткәндәр. Ул осорҙа һәр хандың төп проблемаһы - яугирҙар етмәү. Сыңғыҙхандың вариҫтары күп, һәр беренә ғәскәр кәрәк. Кемдең һуғышсан яугирҙары күп, шул бөтөн яҡтан, бигерәк тә сәйәси яҡтан өҫтөнлөк алған. Башҡорттарҙың яугирлығын яҡшы белгән Туҡтамыш, үҙ яғына ауҙарыу өсөн, уларҙың аҫабалыҡ хоҡуғын танырға мәжбүр була.

Әлбиттә, быға тиклем дә башҡорттарҙың үҙ иерархияһы, сәйәси төҙөлөшө булған. Дөйөм алғанда, 14-се быуатта ошо структура хоҡуҡи төҫ ала, аҫабалыҡ системаһы формалаша барып, ырыуҙар үҙҙәренең статусын раҫлай. Тарҡаулыҡ мәсьәләһенә килгәндә, низағҡа алып килгән шарттар, ҡабатлап әйтәм, һәр бер йәмғиәттә булыуы ихтимал. Ырыуҙарға бүленеп йәшәү һис кенә лә тарҡаулыҡты аңлатмай. Беренсенән, иктисади проблемалар тартҡылашҡа алып килеүе ихтимал. Ер өсөн талаштар ҙа булғандыр. Мәҫәлән, "Бабсаҡ менән Күсәк" эпосында бөрйәндәр менән ҡыпсаҡтар араһындағы шундай мөнәсәбәт сағылған. Сюжет һыҙығы әкиәткә тартым булһа ла, ул бит ниндәйҙер тарихи ваҡиғаларҙан сығып ижад ителгән. Ул әҫәрҙә беҙ бер нисек тә фантазия емеше тип ҡабул итә алмайбыҙ. Тимәк, шуға оҡшаш ниндәйҙер сетерекле хәлдәр булған.

Ике йыл элек Ҡаҙандан коллегабыҙ 1735-1740 йылдарҙағы ихтилал тураһында бик ҡыҙыҡлы сығанаҡ баҫтырҙы. Билдәһеҙ автор (аноним) башҡорт ғәскәрен һүрәтләгән. Яугирҙар мобилизация ваҡытында ырыу-ырыу туплана. "Әйҙәгеҙ, бөтә башҡорттар, тупланығыҙ", тип түгел, ә һәр ырыу айырым оран буйынса йыйыла. Салауат Юлаев осоронда ла башҡорттар шулай туплангандыр, тигән уйҙамын. Башҡаса ҙур майҙанда йәйелеп йәшәгән башҡорттарҙы тиҙ генә бергә туплап булмай. Ғөмүмән, күсмә тормош алып барған халыҡтарҙа ырыуҙарға бүленеү, иң беренсе, хәрби торошҡа бәйле. Икенсенән, бындай бүленеш хужалыҡ эштәрен алып барыу өсөн дә ҡулай. Кем, ҡайҙа, күпме икәне һәр саҡ билдәле. "Сыңғыҙнамә" ҡиссаһынан башҡорттарҙың тыуған ил төшөнсәһен нисек аңлауы тураһында белергә була. Был әҫәрҙәге риүәйәттәр буйынса башҡорт ырыуҙарының, башҡорттарҙың легендар бейҙәренең Сыңғыҙханды ҡабул итеүен аңлайбыҙ. Хан шуның өсөн башҡорттарға хоҡуҡ атрибуттары - инсегниялар (ҡош, ағас, тамға, оран) тәғәйенләгән дә инде.

### Ырыуҙар системаһы

Һаҡланып ҡалған яҙма сығанаҡтарҙың авторҙары иң тәүҙә һандарға һәм ҙур ваҡиғаларға иғтибар иткән. Ябай халыҡтың тормош шарттары ул сығанаҡтарҙа, ғәҙәттә, сағылыш тапмаған. Башҡорт йәмғиәтенең эске торошо тураһында төҫмөрләргә генә ҡала. Бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ, 16-сы быуатта Иван Грозный Ҡаҙанды баҫып ала. Урта Волга буйының Рус дәүләтенә ҡушылыу осоро башлана. Нәҡ ошо ваҡыттағы тарихи сығанаҡтарҙа башҡорттар үҙҙәрен күрһәтә лә инде. Уларҙан күренеүенсә, башҡорттар айырым бер башҡорт династияһы түгел, ә ырыуҙар берләшмәһе - сәйәси субъект һымаҡ ҡабул ителә. Артабанғы 16-18-се быуаттарҙағы сығанаҡтарҙан күренеүенсә, башҡорттар үҙҙәренең эске сәйәси донъяһын тик ырыуҙар берҙәмлеге аша күргән, донъяға ошо берләшмә аша ҡараған. Хәрби мобилизация, ырыуҙарҙың сиктәре, ергә хоҡуҡ мәсьәләләре, ғаилә ҡоролошо, аҫабалыҡ - бөтәһе лә тарихи сығанаҡтарҙа нығынған система булып күҙ алдына баҫа. Шундай һығымта яһарға була: ырыуҙар системаһы башҡорт йәмғиәтенең, сәйәси системаһының төп сағылышы булған.

### "Беҙ - урман башҡорттары"

Бөгөн беҙ әҙәби тел нормалары нығынған осорҙа йәшәйбеҙ. Элек бит ундай нормалар булмаған. Ул осорҙа башҡорт теленең диалекттары күберәк тә булғандыр, әммә һәр ырыу вәкилдәре бер-береһен талмасһыҙ ҙа төшөнгән. Әле беҙҙең өсөн төп мәсьәлә - башҡорт ырыуҙарын нимә берләштергәнен аңлау. Башҡорт ырыуҙарын нимә башҡорт итеп тота? Элек нисек булған, бөгөн хәлдәр нисек? Минеңсә, төп сәбәп - ул сәйәси автономия. Ул нисек формалашҡан? Буштан-буш үҙе килеп сыҡмаған бит. Ул, иң тәүҙә, тәбиғәт шарттарына бәйле. Мәҫәлән, йыш ҡына, ана, башҡорттар, ҡаҙаҡтар, нуғайҙар бер-береһенә оҡшаш, тип сағыштырырға яратабыҙ. Улар башта бер халыҡ булған, аҙаҡ тарҡалғандар, тип ебәрә ҡай берәүҙәр. Ә бит башҡорт ырыуҙарындағы кешеләрҙе айырып ҡараһаҡ, улар бер-береһенә оҡшамаған даһа! Ҡырҡтан ашыу ырыу халҡының һәр береһенең үҙенсәлеге бар, әммә улар икенсе милләт кешеләренә оҡшаған, тип фекер йөрөтөп булмай. Нимәһе ҡыҙыҡ: башҡа милләттәрҙә улай күп ырыуҙарға бүленеш юҡ та. Тимәк, ырыу системаһы башҡорттарҙа бик борондан булған, йәшәгән, нығынған. Мәҫәлән, ҡаҙаҡтар, нуғайҙар йәшәгән далаға барып сыҡҡан башҡорт "Былар бында нисек көн итә икән?" тип аптыраясаҡ. Урал тауҙарын киң дала менән сағыштырып булмай. Дымға бай урмандар менән ҡапланған территория беҙҙең хужалыҡта, йәшәйештә тәрән эҙ ҡалдырған. Ә дала ерендә сиктәрҙе бүлеү ҡыйын түгел. "Быйыл һеҙ көтөүегеҙҙе бында алып йөрөйһөгөҙ, һеҙ тегендә", тип әйтеү етә. Йәғни, хужалыҡты көйләү бер ниндәй ҡыйынлыҡтар тыуҙырмай. Ә башҡорттар йәшәгән урындарҙа былай эшләп булмай, сөнки һәр ырыуҙың тәғәйен ер майҙаны бар, ул шулай быуаттар дауамында нығынған. Кемдәрҙендер ҡиммәтле тиреләр (ул ваҡытта валюта ролен үтәгән) эшкәртергә мөмкинлеге бар, кемдәрҙер рудаға бай урында төпләнгән. Ҡыуып сығарып ҡара һин уны эҫенгән еренән! Ошондай көнкүреш үҙенсәлектәре сәйәси автономияға мөмкинлек биргән дә инде. Башҡорттар дөйөм дала цивилизацияһының өлөшө булһалар ҙа, унда йәшәмәгәндәр, урмандарҙы хуш күргәндәр. Шуға ла арҙаҡлы шәхесебеҙ Ғәли Соҡорой "Беҙ - урман башҡорттары", тип яҙғандыр. Тимәк, беҙ тарихи үткәнебеҙ менән күсмә халыҡтарҙан ҡырҡа айырылабыҙ.



*Тарихи Башҡортостан сиктәрендә иң башта ырыуҙарҙың биләмәләрен бүлеп ҡарағандар, йәғни һәр бер ырыу үҙенең аҫабалыҡ хоҡуғын тулыһынса файҙаланған. Ниңәлер тик Иван Грозный осоронда ғына аҫабалыҡ хоҡуғы бирелгән, тигән хата фекер нығынған. Әлеге ваҡытта тарихсылар аҫабалыҡты Алтын Урҙа осорондағы процестар менән бәйләй. Мин дә тарихи Башҡортостандағы аҫабалыҡтың үҫешен 14-се быуаттағы ваҡиғалар менән бәйләйем. Нәҡ шул осорҙа, Туҡтамыш хандың идараһы ваҡытында, аҫабалыҡты булдырыу өсөн шарттар барлыҡҡа килә. Башҡорттар Туҡтамышты хан булараҡ ҡабул иткәндәр. Башҡорттарҙың яугирлығын яҡшы белгән Туҡтамыш, үҙ яғына ауҙарыу өсөн, уларҙың аҫабалыҡ хоҡуғын танырға мәжбүр була.*

### Башҡортлоҡ идентификацияһы

Автономия булғас, эске ойоштороу алымдары булырға тейеш. Һис шикһеҙ, ырыуҙар системаһы - аҫаба булған ата-бабаларыбыҙҙың төп нигеҙе булған. Улар ергә хужа ғына булмаған, уның байлыҡтары менән дә файҙаланған. Быны аңлау бик мөһим. Юҡ, Сыңғыҙхан да түгел, рус батшалары ла түгел - бер кем дә бирмәгән беҙгә был ерҙе, ул бик борондан башҡорттарҙың үҙ ере булған. Сығанаҡтар ҙа шуны раҫлай. Мәҫәлән, рус батшаһының Жалованный Грамота бирергә хоҡуғы юҡ, сөнки ерҙәр уныҡы түгел. Ул, был ерҙәр башҡорттоҡо, тип, Оберегательная Грамота ғына бирә алған. Тыуған еребеҙ, тәбиғәтебеҙ, экологик мөмкинлектәребеҙ эске сәйәси системаның төп факторы булған. Быуындан-быуынға күсә килгән ошо тотороҡлоҡ. Сыңғыҙхан дәүерендә лә, Алтын Урҙа тарҡалғандан һуң да, Рәсәйгә ҡушылғас та, башҡорт ихтилалдары ваҡытында ла был система үҙен аҡлаған. Башҡортлоҡ идентификацияһының төп асылы - бер-беребеҙ-

✓ *Футуролог киләһе йөҙ йыллыҡта кешелек 100 йылға түгел, 20 мең йылға алға китәсәк, тип раҫлай. Прогресс тиҙлеге йылдан-йыл арта бара. Бер нисә йыл эсендә генә техника, бәйләнеш, геномдарҙы өйрәнеү буйынса күпме алға киттек.*



ҙе ырыу-ырыу бүленеше аша танып белеүҙәләр, минеңсә. Шуныһыҙ ул тарихи ысынбарлыҡтан төшөп ҡалыр ине.

### Тарҡау түгел, берҙәм улар!

Башҡа халыҡ вәкилдәре беҙҙең араға инһә (башҡорт бит киң күңелле), мәҫәлән, ҡалмыҡтар йә нуғайҙар, кемгә бара, шул ырыу эсендә аралар тәҙөгәндәр. Нуғай-бөрйәндәр ана шулай килеп ҡушылған төркөмдөң бер өлөшө. Улар ситкә тибелмәгән, әҙер системаның ағзаһына әйләнгән. Бер ырыу вәкиле лә нығынған тәртиптәрҙе үҙгәртә алмаған. Миҫал өсөн, бер династия кешеһе үҙен баш тип иғлан итте, ти. Хәҙер яһаҡты тик ул ғына йыйырға тейеш. "Бөгөндән миңә буйһонаһығыҙ, яһаҡты миңә түләйһегеҙ, сөнки мин - баш", - тиһә, икенселәр: "Самалап ҡара, ҡоралды яугирҙар беҙҙә лә бар!" - тип яуап бирәсәк. Һуғыша белгән, яҡшы ҡоралланған ҡырҡтан ашыу ырыуҙы берәмләп буйһондороп ҡара! Тарҡау түгел, берҙәм улар! Тамаҡ иҫәбенә ер эшкәртеп йәшәүсе игенселәр түгел дә баһа улар! Еңел һөйәкле бит улар! Һә тигәнсе йыйылалар! Ғәйнәләрҙе алайыҡ. Тимергә бай ерҙә ултыралар, уҡ башаҡтарын, һөңгө остарын үҙҙәре етештерә. Башҡа ырыуҙарҙың да, бәләкәй булһа ла, ғәскәре бар, ашар тамағы бар. Тейеп ҡара һин башҡортҡа! Бөтәһе өсөн бер юғары власть булдырырлыҡ та түгел.

### Паскарти - башҡорт ҡалаһы

Башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙә бер нисә сауҙа үҙәге булған. Йыйылалар ҡушылған ерҙә, географик яҡтан унайлы урында урынлашҡан Өфө - иң билдәлеһе. Бында тауарҙар төрлө яҡтан килтерелгән һәм һатыу итеү халыҡ-ара кимәлдә барған. Йәйгеһен беҙҙә ғилми сессия үтте. Унда билдәле ғалим Александр Григорьевич Юрченко ла ҡатнашты. Ул махсус рәүештә 1375 йылда төҙөлгән Каталония атласы буйынса шөғөлләнә. Фалантия сауҙагәрҙәре һорауы буйынса эшләнгән был картала әлеге Өфө урынында Паскарти ҡалаһы күрһәтелгән. Тимәк, бынан алты быуат ярым элек Башҡорт тигән ҡаланы, сауҙа үҙәге булараҡ, халыҡ-ара кимәлдә лә белгәндәр.

### Йәмғәтселеккә сиктәр юҡ

Ырыуҙар хәрәкәтен йәнләндереү проектына тотонорға нимә этәрҙе һуң? Йәмғәтсе, Ҡоролтай ағзаһы булараҡ, төп бурысым - башҡорт халҡын берләштереү. Уны тормошҡа ашырыу өсөн егеттәр менән оҙаҡ уйландыҡ. Тарихи Башҡортостан сиктәрендә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе бер ҡорға туплау, берләштереү - төп ниәтебеҙ. Ырыуҙар берләшмәһен нигеҙ итеп алдыҡ һәм ошо йүнәлештә эш башланыҡ. Яңыса бер нәмә лә ҡулланмайыҡ, бары үткән быуаттың 90-сы йылдарында башланып киткән ырыуҙар ҡорон иҫкә төшөрҙөк, юрматылар күтәргән байраҡты артабан алып киттек. Эште көнбайыш райондарҙан башланыҡ. 2011 йылда гәрәйҙәр, 2012 йылда ҡаңлы, йылан ырыуҙары вәкилдәре башланғысты дауам итте. Бөгөнгә Башҡортостан сиктәрен аша сыҡтыҡ, был бүленеш беҙгә мөһим дә түгел. Ғәйнә ырыуы йыйындары, мәҫәлән, Пермь крайының Барҙа районында үтте. Бындай саралар йәмғәтселекте туплауға, үйфекерҙәребеҙҙе киңерәк йәйелдерергә мөмкинлек бирә.

### Герб хужаһы - ырыу!

Икенсе проект яңыраҡ башланды. 2020 йылдың 1 октябрендә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тарафынан Геральдика комиссияһы ойошторолдо һәм ырыуҙар атрибуттары, инсегниялары раҫланды. Быға тиклем уларҙың график сағылышы булмаған, бөрәү ҙә атрибуттарҙың һүрәтен (тамғаларҙан башҡа) күҙ алдына килтермәй ине. Тарихта һөйләп кенә ҡалдырылғанды күрһәтеү бик мөһим. Эмблема, логотип рәүешендә сағылдырыу балаларса килеп сыға, етмәһә, ундай сағылдырыуҙың юридик нигеҙе лә булмай. Ә был бик мөһим мәсьәлә. Геральдика ысулдарын ҡулланып, комиссия тарафынан раҫланған ырыу гербтары булдырыу - халыҡ-ара юридик көскә эйә булған аҙым булды. Ырыуҙар геральдикаһын булдырып, беҙ тулы хоҡуғыбыҙҙы ҡулланабыҙ. Бында бит һүҙ ниндәйҙер шәхси, муниципаль гербтар тураһында бармай, ә ырыу гербы тураһында. Аңлағыҙ: был гербтың хужаһы - ырыу! Ырыу вәкилдәре уны дөйөм йыйында, йә булмаһа, һайланған йәмғәтселек советында ҡабул итә.

### Бәйге йолаға әйләнер

Быйылғы проектыбыҙ "Башҡорт халыҡ уйындары "Бәйге" тип атала. Элек бит һабантуйҙар, төрлө йыйындар тик кәңәш ҡороуҙар, һөйләшеүҙәр менән генә үтмәгән, төрлө ярыштар, бәйгеләр уҙғарылған. Ошо йоланы тергеҙеү өсөн ойошторолдо ла инде был сара. Тәүге бәйгене Янауыл районында уҙғарҙыҡ. Артабан уны туймазылар ҡабул итте. Тәүге ярыштарҙа икешәр команда ҡатнашһа, Туймазыла үткән ырыу-ара чемпионатта һигеҙ команда көс һынашты. Заманлаштырылған традицион уйындар тип ҡабул итергә кәрәк был бәйгеләрҙе. Бик күп физик көс талап итеплә был ярыштарҙа, команда рухы тәрбиәләнә. Бәйгеселәр үҙ ырыуының данын яҡлай һәм уларҙа үҙ ҡорона һөйөү тойғоһо уяна. Киләһе йыл был проект тағы ла киңәйер һәм тарихи Башҡортостан сиктәрен солғар тиген уйҙабыҙ. Ни булһа ла, был бер тапҡыр ғына үткәрелә торған сара түгел, бәйге йолаға әйләнергә тейеш.

### Йүнәлештәр күп

Башҡорттар тарихын ғилми яҡтан тәрәнерәк өйрәнеү, халыҡҡа еткереү - үҙе бер ҙур йүнәлеш. "Башҡорт ырыуҙары тарихы" проекты уны тормошҡа ашыра башланы ла инде. Һәр ырыуға бағышланған күп томлыҡ сығарыу - ҙур ҡаҙаныш. Халыҡ-ара журналдарҙа баҫылған төп мәҡәләләр был йүнәлешкә киңерәк мөмкинлектәр бирә. Ошо материалдарҙы туплап, йомғаҡлап, йәмғиәттә башҡорт генофонды тураһында объектив фекер нығынырға тейеш.

Йүнәлештәр күп. Мәҫәлән, башҡорт ырыуҙары гимндарын өйрәнеү, заманса кимәлдә яңғыратыу уйы бар. Башҡорт ырыуҙары парадын, бәлки, 1812 йылғы Ватан һуғышының 110 йыллығына арнап үткәрербеҙ. Был сараға бик күп кеше йәлеп итергә кәрәк: һыбайлылар, ҡурайсылар, барабан һуғыусылар. Ҙур әҙерлек талап итә был сара. Тарихтан билдәле булыуынса, 1837 йылда губернатор Перовский батшаға башҡорт ғәскәренең парадын күрһәткән. Был турала һәйбәт сығанаҡ бар. Унда парад нисек үтеүе һүрәтләнгән. Француз һуғышын сағылдырған гравюралар аша башҡорттарҙың парад кейемдәрен тергеҙергә кәрәк. Башҡорт маршын өйрәнеү ҙә күп ваҡыт талап итә.

### Аңлы аңлар

Төрлө ырыуға ҡараһаҡ та, бер-беребеҙ, үҙенсәлектәребеҙ тураһында күберәк белһәк, был ойошоу өсөн төп шарт буласаҡ. Дөйөм башҡорт милләтен ырыуҙар тарихы, уларҙың үҙенсәлектәре аша өйрәнһәк, рухыбыҙ нығыясаҡ, үҙ милләтебеҙ өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уянасаҡ. Эпик әҫәрҙәрҙән иң боронғоһо булған "Урал батыр" беҙгә төп байраҡ һәм юл күрһәтеүсе маяҡ булырға тейеш. Аңлы кешеләр Урал һүҙенең тик географик атама ғына түгел икәнен күптән аңлай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Элек күп кенә ауыл сәхнәләренең артҡы яғында тәбиғәт күренешен сағылдырған ҙур ғына полотно була торғайны. Ғәҙәттә, уны ошо ауылдан сыҡҡан йә булмаһа ситтән килеп ялланган берәй һәүәҫкәр рәссамдың картинаһы биҙәй ине. Урыҫсалап, задник, тип атай торғайнылар. Сәхнәләге йырбейеү, төрлө тамашалар, йәнәһе, тәбиғәт ҡосағында уҙа. Тәү ҡарамаҡҡа, матур ҙа, йәмле лә күренә. Ләкин ваҡыт уҙа килә, тамашаларға йәм биргән һүрәткә иғтибар кәмей бара. Уны күрәләр ҙә, күрмәйҙәр ҙә һымаҡ була башлай. Картинаның авторын да, ҡасан эшләнгәнен дә оноталар. Ләкин ул бар! Яңы хужа, яңы ҡараш килгәнсе, минең барлығымды онотмағыҙ, тигәндәй, ул шул килеш эленеп тора, үҙ вазифаһын үтәй. Ә картинаны тыуҙырыусы рәссам ҡайҙа? Ул бит тырышҡан, күңел көсөн түккән, юҡтан бар яһаған. Хәтер ҡыҫҡа булмаһын өсөн һәр тамашаның барлыҡҡа килеү тамырын белергә һәм онотмаҫҡа кәрәк шул. Тамашаның тамыры була.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# РОБОТТАН ҠАЛЫШМАҪҠА...



Рэймонд Курцвейл - билдәле Америка ғалимы һәм футуролог. Ул үҙенең фән, техника, һаулыҡ һалма интеллект һәм кеше ғүмерен оҙайтыу өлкәһендәге тормошҡа ашыусан күрәҙәләре менән дан алған. Мәҫәлән, 1980 йылдарҙа Интернет селтәре барлыҡҡа киләсәген, 1996 йылда шахмат буйынса донъя чемпионы компьютерҙан еңеләсәген, 2000 йылдарҙа ДНК шифрҙары серҙәре асыласағын алдан әйтә. Рэй Курцвейл 1999 йылда АҠШ президенты Билл Клинтон ҡулынан технология өлкәһендәге иң оло бүләк - Технологиялар милли медален ала. Бынан тыш, уны Американың өс президенты ун ике докторлыҡ дәрәжәһе һәм хөрмәт билдәләренә лайыҡ тип таба. Күптән түгел Рэй Курцвейл Мәскәүҙә үткәрелгән "Глобаль киләсәк 2045" Халыҡ-ара конгресында ҡатнашҡан һәм тормошобоҙҙоң ҡайҙа тәгәрәүе хаҡында һөйләгән.

Футуролог киләһе йөҙ йыллыҡта кешелек 100 йылға түгел, 20 мең йылға алға китәсәк, тип раҫлай. "Прогресс тиҙлеге йылдан-йыл арта бара. Бер нисә йыл эсендә генә беҙ техника, бәйләнеш, геномдарҙы өйрәнеү буйынса күпме алға киттек. Мәҫәлән, ДНК шифрҙарын асып бөтөү өсөн ун меңләп йыл кәрәк буласаҡ, тип фаразлана ине. Әммә эш ун йыл тирәһе ваҡыт эсендә атҡарылды", - ти Рэй Курцвейл. Ысынлап та, бөгөн ҡулыбыҙҙағы смартфон ярҙамында беҙ бөтә төр мәғлүмәттәрҙе белә алабыҙ. Күп белеү тормошобоҙға яңы һәм юғары технологияларҙы индереүгә булышлыҡ итә. Бынан тыш, Рэй Курцвейл техник прогресс тиҙлеге йыл да арта барасаҡ, тип фаразлай: "Уйлап ҡарағыҙ: XV быуатта Иоганн Гутенберг китап баҫыу станогы уйлап тапҡан. Ул киң ҡулланыла башлаһын өсөн 400 йыл ваҡыт талап ителгән. Ә бына АҠШ, Европа, Рәсәйҙә стационар телефонды уйлап сығарыу һәм киң ҡуллана башлауҙың арауығы 50 йыл ғына тәшкил иткән. Кәрәҙле телефондыҡы - 7 йыл. Социаль селтәрҙәрҙеке - 3 йыл. Компьютер техникаһы ла 11 ай һайын яңырып тора. Әлеге ваҡытта минең кеҫәмдә ятҡан смартфон ҡырҡ йыл элек университетта уҡыған сағымда ҡулланған компьютерыма ҡарағанда бер нисә миллиард тапҡыр көслөрәк. Егерме биш йылдан ул йөҙ мең тапҡыр бәләкәйерәк һәм миллиардтар тапҡыр көслөрәк буласаҡ. Бынан тыш, ул кеше тәненә берләштерелгән буласаҡ. Былар фантазия түгел, ысынбарлыҡ", - ти футуролог. Беҙ үҙен-үҙе етештерә алыусы нанотехнологик механизмдар барлыҡҡа киләренә ышанмайбыҙ. Был өлкәләге асыштар бөгөн ниндәй тиҙлек менән үҫешеүен иҫәпкә алғанда, уны күреп өлгөрмәүебеҙ ҙә ихтимал. Әммә Р.Курцвейлдың иҫәпләп сығарыуҙары буйынса техник прогресс темптары ун йыл һайын ике тапҡырға шәбәйә бара. Йөҙ йыллыҡ үҫеш юлын кешелек 25 йыл эсендә үтеп сығасаҡ. Киләһе ун йыл үҙ эсенә егерме йылды, унан һуңғыһы ҡырҡ йылды алып торасаҡ. Шунлыҡтан, XXI быуат егерме меңләп прогресс темпына торошло буласаҡ. Бынан тыш, ғалим фекеренсә, бер йылдан барлыҡ информацион технологияларҙы ярты хаҡ түләп аласаҡбыҙ.

Рэй Курцвейл кеше ғүмеренең оҙайлығы ла шәп темптар менән үҫә барыуын билдәләй. XVIII быуатта ул йылына бер нисә көнгә арта барған, ә XIX быуатта - бер нисә аҙнаға. Хәҙер кеше ғүмере йылына яҡынса 120 көнгә оҙайып бара. Гендар, клонлау, дарыуҙар етештереү, биотехнологик үҙгәртеүҙәр кеүек төрлө асыштарҙы күҙ уңында тотҡанда, ун йылдан кеше ғүмере йылына бер йылға оҙаясаҡ. Ҡартайыу процесын иһә, наномедицина, биотехнология, гендар инженерияһы кеүек юғары технологиялар ярҙамында еңәсәкбеҙ. Смартфондың программаһын үҙгәрткән кеүек, үҙ геномыбыҙҙы тиҙ генә үҙгәртеп тора, үҙебеҙгә яңы программа һалып, төрлө ауырыуҙарҙан һаҡлана аласаҡбыҙ. Шулай уҡ, XXI быуаттың беренсе яртыһында молекуляр роботтар уйлап табылыуы көтөлә, улар кеше организмында йәшәйәсәк һәм ауырыуҙар барлыҡҡа килеүгә юл ҡуймаясаҡ. "Шулай итеп, әгәр ҙә ун йыл тирәһе йәшәп өлгөрһәгеҙ, күпме теләйһең, шунса йәшәү мөмкинлегенә эйә буласаҡһығыҙ", - тип иҫәпләй Рэй Курцвейл.

Етештереү өлкәһендә лә бик ҙур үҙгәрештәр көтөлә. Эшләү өсөн кешегә мотлаҡ бер географик нөктәгә бәйле булыу кәрәкмәйәсәк, тулыһынса киберкинлектә эшләйәсәкбеҙ. Матди милеккә ҡарағанда, интеллектуаль милек етештереү өҫтөн торасаҡ. Шулай уҡ 2040 йыл кешеләре үҙ-ара бик тығыҙ бәйләнгән биологик һәм электрон фекерләүҙе берләштереүсе гибрид булыуы бар. Сөнки кешенең биологик фекерләү тиҙлеге билдәле: кеше бер секунд эсендә 1026 иҫәп сығара ала. Был һан ҡапыл ғына бер нисек тә үҫеп китергә уйламай. Әммә техника интеллектының мөмкинлектәре арта бара. Иҫәпләүҙәр буйынса 2050 йылға 1000 доллар торған компьютер бер миллиард кеше мейеһенә торошло буласаҡ. Шуның өсөн дә XXI быуат урталарында кеше мейеһе һәм машина интеллекты үҙ-ара тығыҙ бәйләнеш тотасаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нанотехнологиялар үҫешкән, кешеләр өсөн барлыҡ эштәрҙе лә роботтар башҡарған заманға тиклем йәшәргә күп тә ҡалмаған, Рэймонд Курцвейл фекеренсә. Был осорҙа кешеләргә күп уйларға, күп белергә кәрәк буласаҡ. Кеше хайуандарҙан фекерләү ҡеүәһе менән айырылып торған кеүек, роботтарҙан да шул үҙенсәлеге менән айырылып торор, моғайын. Тимәк, нәҡ фекерләй белеү беҙҙе мәғлүмәт биреүсе смартфондан айырып торасаҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әҙерләне.**

***✓ Күҙ алмаларының ағын әйләндереп, ҡараларын ҡылыйландыра биреп танау осона йүнәлтеп, әсәлә сарсаған бурҙайҙай телемдә һәлберәтә төшөп, иҫкә бер төрлө һантый әҙәмдәй иркен итеп, мәғәнәһеҙ, хаяһыҙ йылмайып ебәрҙем.***



Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# ҺӨНӘРСЕЛӘР ҺӘМ ӨЙРӘНСЕКТӘР

("Хәтерҙәге хәтирәләр" циклынан)

Иҫәнғол дауаханаһында эшләп йөрөгән саҡта "Тиҙ ярҙам" станцияһының водителе Әхмәт ағай көтмәгәндә-уйламағанда мине үҙҙәренә ҡунаҡҡа йәүкәләне. Көтмәгәндә, тип әйтеүем шунан килә, беҙ уның менән эш буйынса тимәһәң, яҡындан аралашҡан, бер табаҡтан аш ашаған, бер күрәгәнән ҡымыҙ һемергән әшнәләр ҙә түгел түгеллеккә, тағы йәш айырмабыҙ ҙа апаруҡ ҡына, мин яңы әрме сафында хеҙмәттә йөрөп ҡайтҡан егет, ә ул ҡырҡ йәштән уҙған ир уртаһы кеше, ике бала атаһы. Малайҙары ҙурайған инде, күптән үҫмерлеккә ингән, йомош һылтауынан дауахананың гаражына килеп күренгеләйҙәр ылғый, ҡатыны терапия бүлегендә шәфҡәт туташы булып эшләй. Әхмәттең һүҙ ыңғайында тубытыуына ҡарағанда, әле ойошторолаһы табынды улар, олонан ҡубып, ҙурҙан ҡормаҡсылар икән. Ғаиләләләр унда парлап барыры көн кеүек асыҡ, ә мин - буйҙаҡмын, ирекле, үҙаллы, бойондороҡһоҙ йәшәүҙе хуп күрәм, өйләнеү, муйынға мәленән алда ҡабаланып тормош ҡамытын кейеү ике ятып бер төшөмә инеп сыҡмай әлегә. Вайымһыҙ, елғыуар йәшәү рәүешем дә күсмә ҡаҙаҡтыҡылай - бөгөн бында, иртәгә тегендә, ҡайҙа ҡыҙыҡ, ҡайҙа мәрәкә, ҡайҙа кәмит - мин шунда. Етем ҡорһағы ете ҡат тиҙәр бит, тамаҡ туйыр ерҙе лә алдан ҡарап-байҡап ҡына йөрөйөм үҙем дә. Әлеге өндәшелгән ерҙә ҡыутомшоҡ йәшәйештең ҡоро-һарыһы, ҡаты-ҡотоһона күнгән, күнеккән тамағым һис шикһеҙ туйыр, уныһы бәхәсһеҙ, әммә үҙемдән әллә күпмегә оло йәштәгеләр менән йыйылышып ултырыу миңә ҡыҙыҡ, та кәрәк тә түгел һымаҡ.

Саҡырған ергә бар, ҡыуған ерҙән кит, тиҙәр бит, саҡырылғас, ни булһа ла булыр, барайым. Йәнә, орҙо-бәрҙерәк, яндырайыраҡ холоҡло Әхмәттең саҡырыуы ла бигерәк үҙенсәлекле килеп сыҡты, ул кире ҡаҡҡыһыҙ, бойорғандай итеп һуҡ бармағын минең тарафҡа һөңгөләй ҡаҙаны: "Ызначит, молодой человек, мы приглашаем тебя, киләһең, килмәй генә ҡара! Берәй юҡ һылтауҙы табып, уйлап сығарып, һүҙемде йыға ҡалһаң, сматри, башҡаса миңә яҡынлайһы, күрешәм, тип ҡул бирәһе булма! Ясно выразился?" Төшөнмәгән ҡайҙа, төшөндөм. Тағы йор һүҙле, көләмәс, лаҡап һөйләргә әүәҫ Әхмәттең шаяртып, уйынлыысынлы, ййы сыҡҡан һайын ҡабатлаған бер әйтеме лә бар бит әле: "Саҡырып ҡунағың килмәһә, ауырып бисәң үлмәһә, шунан ҡыйыны юҡ!"

Шулай итеп, барырға ҡарар ҡылдым, бер сменала, уртаҡ эш атҡарған хеҙмәттәшемә ҡыйынлыҡ, мәшәҡәт тыуҙырмаҫҡа булдым, һин дә мин эшләп йөрөгән, ҡап урталай бүлһәң, упа достоиндан ике бисә сыҡмалы, сәләмәтлеге тышҡа бәреп торған ҡатыны ла имен генә була күрһен. Ҡоро ҡашыҡ ауыҙ йырта, ҡулды төбө тишек кеҫәгә тығып барып инеү килешеп бөтмәҫ, тип, күстәнәскә затлы әрмән коньягын һатып алып, ҡултыҡ аҫтына "Ҡош һөтө"тип аталған ҡаплы кәнфит ҡыҫтырҙым да, киттем кисҡырын ҡасаба осондағы кирбестән һалынған йортҡа. Күрепбелеүемсә, Әхмәттәр шул ике ҡатлы йорттоң аҫҡыһында өс бүлмәле фатирҙа йәшәй. Ни хәл итмәк, әҙерәк кенә ултырырмын да, мәжлес ҡыҙа төшһә, һиҙҙермәй, ҡунаҡтарҙың күҙенә артыҡлап салынмай ғына сығып та һыпыртырмын, Әхмәткә һый-хөрмәт өсөн рәхмәтте һуңынан, иртәгеһен әйтермен әле. Исем өсөн булһа ла барып күренеп киткәс, ихтирамың, иғтибарың шулдыр, эшкә һынаманың, тип мыжый алмаҫ аҙаҡ, бүре лә туҡ, һарыҡтар ҙа имен, был осраҡта, бөттө-китте.

Ысынлап та, ҡунаҡтарҙы күп итеп йыйғандар, ян-тирәләге ауылдарҙан яҡын ҡәрҙәштәре, сыбыҡ осо туғандары килгән, араларында мин күргән-белгән таныштар ҙа бар, таныш түгелдәр ҙә. Күрешеп, көңгөр-ҡаңғыр хәл-әхүәл белешкәндән һуң ир-ат, абруй-дәрәжәләренә, тотҡан урындарына, йәшәлгән йәштәренә ҡарап, ҡурсаҡтай ҡуҫтарланған, һыланған-һыйпанған ҡатындарын яндарына алып, сиратлап өҫтәл тирәләй ултырыша, урынлаша башланы. Кимәле ярты һыңарҙың биләр биләмәһе, һағыр ҡуналҡаһы алдан тәғәйенләнгән - ҡуңыр еремә төртөп күрһәтеп әйҙүкләмәһәләр ҙә, бер яҡ мөйөштән, ишек ҡырлауынан урын алдым. Бер үҙем, тип бошонһам да бөтөнләй үк яңғыҙ түгелмен икән дәбаһа, көтмәгәндә-уйламағанда, яр аҫтынан яу сыҡҡан, бына һиңә мә, һиҙремләүемсә, кемеһененңдер ҡарындашынмы, яҡын һеңлеһенме, алыҫ балдыҙынмы, әллә күҙ алдында йөрөгән ултыраҡ бикәсенме шунда, тәбәнәк буйлы, ҡыҫҡа аяҡлы, ҡалҡыу янбашлы, тар бәрхәт күлдәгенә саҡ, илла-алла менән һыйған тыңҡыш кәүҙәле, еҙ батмустай ерән сәсле, һайыҫҡан йоморҡаһылай һипкелле бер ҡыҙҙы миңә терәп, йәнәшәләтеп ултыртып та ҡуйҙылар.

Әхмәттең ҡәтғи, кире ҡаҡҡыһыҙ итеп саҡырыу сәбәбе, ниһайәт, асыҡланғандай итте, шулай итеп, үтемһеҙ тәғәмде балғалаҡҡа һалып, теләкһеҙ ҡабып, ауырлыҡ менән йотоп ебәрерлек ошо үтә йәмһеҙҙән саҡ ҡына юғары, урта сибәрҙән һиҙелерлек ҡайтыш һылыуҙы миңә димләмәкселәрҙер, шыма килеп сыҡҡан осраҡта, һылап, тағып, йәбештереп үк ҡуймаҡсыларҙыр. "Димсе диңгеҙ кисерә" тиҙәр бит, күҙләштереүселәр, ҡоҙалаусылар әүәле лә булған, хәҙер ҙә бар. Һайланған һаҙға батҡан, ултырыр ултырыш урыны тапмай, аҙып-туҙып, һикрәңләгән ас саранча сиңерткәһеләй оса-ҡуна торғас, ҡаптым ҡармаҡҡа, көтмәгәндә. "Юҡ инде, мин улай тиҙ генә, күндәм генә баш һалып, телһеҙ-тешһеҙ ауыҙлыҡланғандарҙан, тибешмәйенсә өнһөҙ тышалғандарҙан түгел, тәртә араһына ла ҡаршылыҡһыҙ тыға алмаҫһығыҙ, бешмәгән мәмәйҙе икенсе урындан, ситтән эҙләгеҙ, йәме?"- тип йыуатам үҙемде эстән.

Теге ҡыҙ ултырышыу, урынлашыу ығы-зығыһынан файҙаланып, шыпырт ҡына ҡаш аҫтынан минең яҡҡа ҡыҙыҡһыныусан, һынамсыл һирпелгәйне, мин дә үҙ сиратымда, уны оҡшатҡандай, үҙһенгәндәй итеп текәлеп, дөйөм иғтибарҙы артыҡлап йәлеп итмәй генә, һыумейе, шыр тиле кешеләй ауыҙымды ышпайтып, күҙ алмаларының ағын әйләндереп, ҡараларын ҡылыйландыра биреп танау осона йүнәлтеп, әсәлә сарсаған бурҙайҙай телемде һәлберәтә төшөп, ике донъя, бер мөрйә тормошта көн иткән, зиһен-аң кимәле тап-таҡыр, иҫкә бер төрлө һантый әҙәмдәй иркен итеп, мәғәнәһеҙ, хаяһыҙ йылмайып ебәрҙем. Был минең аңыш, семтем дә аҡыл сағылмаған фиғелемдән шикләнде, һипһенде шикелле, тумалаҡ, тығыҙ аяҡ сираҡтарын ишеп, күлдәгенең наҡыҫ итәген ҡымтып, тубығы яғына тарта төшөп, ике арала һиҙелерлек арауыҡ ҡалдырып, арыраҡ шылды. "Ситкә тибәреп, саф хистәремде яуапһыҙ итмә, зарыҡтырма, һылыуым, китмә берүк, ташлама мине аяуһыҙ яҙмыш ҡосағына!" Эскерһеҙ, ихлас һөйөүгә туҡылған игелекле уйымды тормошҡа ашырырға теләп, мөкиббән китеп ғашиҡ булған мәжнүн ише, быжыр биттәрҙән сиратлап үпәкәй итергә йыйынғандай ыңғайы ҡыҙҙың артынан тартылғайным, был, яҡын юлайһы, һырпаланаһы булма, тигән фиғелдә һыпатһыҙ йөҙөн уҫал төмһәртте. Шөкөр, ҡотолдом әләйгәс был аяҡлы бәләнән дә, өнөндә шөрләттем, инде килеп төшөнә инеп йөҙәтермен, ҡотон алырмын, шай.

Һүҙ ҙә юҡ, хужабикә ҙур ҡалаларҙағы һиммәтле ресторан залына торошло, һәммәһе юғары зауыҡ менән урынлаштырылған күркәм өҫтәл хәстәрләгән. Буштың атаһы күптән үлгән, сәбәпһеҙ, осраған береһенең алдына һый ҡуйып, ҡалъя һоғондора һалып бармайҙар хәҙерге көндә, йә берәйһенең юбилейы, бәпес туйы, ҡул ҡулды йыуыу һөҙөмтәһендә ҡутараһынан килгән табыш, йә бүләк, юҡ тигәндә таныш-белешлек арҡаһында алынған Маҡтау ҡағыҙы йыуыла. Ә унда инде ундай мәжлестәргә ҡоро ҡул барыу шыпа ла килешмәгән эш, түш кеҫәндәге конвертта тәғәмләнер ризығынды ҡапларлыҡ төйөрөм генә аҡса ятыу фарыз. Баҙар иҡтисады шарттарында шулай һәммәһе лә алдан уйланыла һәм иҫәпләнә. Ә теге саҡтағы Әхмәттәрҙең табыны, һиҙемләүемсә, бер ниндәй сәбәпһеҙ, маҡсатһыҙ йыйылғайны. Иркенләп күңел асып ултырыуҙыр теләктәре. Ысынлап та, ятһырап-тартынмаған, бер-береһе менән аралашып, ҡатышып йәшәгән таныштар, ауылдаштар, дуҫтар ирәүәнләп, иркенләп байрам итә.

* * *

Һәүетемсә башланып, кемуҙарҙан һыу буйы итеп һөйләнелгән хәбәрҙән, ҡашығаяҡ шалтырауынан, бер яҡ ҡырҙағы ултырғысҡа ҡуйылған магнитофондан ағылған бейеү көйөнән ҡорт күселәй геүләп ҡуҙғыған тынсыу табын ҡыҙған ғына мәлдә ишек ауыҙында ҡойто кейенгән, урта йәштәрҙәге бер ир күренде; башында бумазыйҙан тегелгән, маңлай өлөшөнә, ҡолаҡсындарына яһалма йөн ишараты йәбештерелгән алама кәпәс, өҫтөндә ҡаҡашыуҙан йылтырап ҡатҡан фуфайка, аяҡтарында сүсинкә бийма, үҙе күрер күҙгә үтә лә күрмәлекһеҙ - тәрән йыйырсыҡтар сыбарлаған яҫы маңлай, ялбыр, тура тартып ҡушылып үҫкән яҫы ҡаштар, шешенке ҡабаҡтар, ҡан һауып ҡыҙарған күҙҙәр, ҡырынмағанлыҡтан шырт төк япҡан һалынҡы биттәр бергә ҡушылып таушалған, йоҡоһоҙлоҡтан арып талсыҡҡан ындырһыҙ йөҙҙө хасил итәләр. Торғаны бер шыҡһыҙ күләгә, торғаны бер өркөткөс баҡса ҡарасҡыһы. Йыйылыусылар кем йөрөй әле ваҡытһыҙ һуңлап, бимазалап, тигәндәй, бар иғтибарҙы инеүсегә йүнәлтеп, бер аҙға ғына тынып шымтайыштылар. Уҫлаптай, шупан кәүҙәле ир урынһыҙ килеп ингәнен абайлап, икеләнгәндәй туҡтап ҡалды, һырыған салбарына йәбешкән ҡар бөртөктәрен һыпырып, аяҡтарын алмаш-тилмәшләне, кире боролорға йыйыныпмылыр, ҡайырылып ишек тотҡаһын һәрмәгәйне генә, инеүсене мәлендә шәйләп өлгөргән йорт хужаһы, тауыш алыштырмай ҡамасаулаған магнитофондың тауышын бөтөнләй баҫып, тәбәнәк кәүҙәһен төмрәңләтеп, ҡоласын киң йәйеп, йөҙөн айҙай балҡытып, уға ҡаршы атланы:

- Һо, кемде күрәм, Ғәйсәр абзый, был һин түгелме?

Ир асарбаҡ түҫ-башынан ары китмәгән шыҡһыҙ ҡиәфәтенән оялғандай, үртәлгәндәй, ҡулындағы йоран бейәләйҙәрен һалып, уңлы-һуллы бийма ҡуңыстарын ҡаҡҡылағандан һуң кәпәсен систе, йомро башының түбә тапҡырында майланып тырпайған тыңлауһыҙ, саллана төшкән сәстәрен рәткә килтереп һыйпаны:

- Ызнамы, танының тәки, эрәхмәт. Өй беренсә әрһеҙ хәйерселәй кем әйенсеrange... 

(Дауамы бар).

ҺАБАҠТАР

# АСЫУЫН ЕҢГӘН КЕШЕ КӨСЛӨ

## ВИЧ-инфекция йөрөтөүсе ҡатын монологы

**Хәтерегеҙҙәлер, СПИД һәм ВИЧ-инфекцияһы тураһында иң беренсе 1987 йылда һөйләй башланылар. Мин уның хаҡында 9-сы класта уҡығанда беренсе тапҡыр ишеттем. Был көндө беҙҙе, 8-10 класс уҡыусыларын, тамаша залына йыйҙылар һәм ошо темаға телетапшырыу күрһәттеләр. Был аббревиатуралар тураһында педагогтарыбыҙҙың да береһе лә анығ ҡына бер нәмә лә белмәй. Ул ваҡытта ниндәй ҙә булһа хәүеф-хәтәр янағанда ла, хәҙерге һымаҡ, бөтәһен дә асып-ярып һалып бармайҙар ине бит. Улар беҙҙән тик иғтибар менән тыңлауыбыҙҙы ғына үтенде.**



Микроскоп аша төшөрөлгән ниндәйҙер анализдар, лаборатория тикшереүҙәрен күрһәттеләр, тәүге ҡорбандар булыуын һөйләнеләр. Ә беҙгә, йәштәргә, океан артында нимә булһа ла - барыбер, иғтибарһыҙ, шаярып-көлөп тыңланыҡ. Шулай ҙа был ҡурҡыныс сирҙең тик енси юл менән күсеүе хаҡында хәбәр итеүҙәре нығ иҫемдә ҡалған. Совет осоронда енси бәйләнеш, секс тигән һүҙҙәр киң мәғлүмәт сараларында бик һирәк осрай ине. Шуға ла уны һәр кем бик оят нәмә тип ҡабул итте. Эргәмдәгеләр нимә тигәндер инде, пырхылдап көлөп ебәрҙем, миңә башҡалар ҡушылды. Бөтәһен дә ҡыуып сығарып булмай бит инде, бер уҡытыусы килде лә, мине елтерәтеп сығарып ебәрҙе. Һәр кемдә эске ҡаршылыҡ бар, берәүҙәр уны тыя белә, икенселәр, киреһенсә, уны тышҡа сығара. Миндә лә был көс етерлек ине: "Миңә был тапшырыуҙың кәрәге лә юҡ, сөнки мин уның менән бер ҡасан да ауырымаясаҡмын!" - тип ҡысҡырып сығып киткәнем хәтерҙә.

Боронғоларҙың, соҡорҙо һикереп үтмәйенсә, "һоп" тип әйтмә, тигәне раҫ икән йәки, кем әйтмешләй, "никогда не говори никогда": бына байтаҡ йыл инде "инфекция йөрөтөүсе"ләр рәтендә диспансер иҫәптә торам. Инфекциялы һәм иммун дефициты вирусын йөрөтөүсе тигән терминдарҙы яҡшы белгәндәр, бәлки, тапҡанһың ҡайғырыр нәмә, һин бит инфекция йөрөтөүсе генә, ә ауырымайһың, тиер. Кеше хәлен кеше белмәй, тигән һымаҡ, үҙ хәлемде үҙем генә аңлайым. Йылдан-йыл мөшкөлләнә барыуымды тоям. Саҡ ҡына һыуыҡҡа ла сыҙамайым, тамаҡ шешә, тән температураһы күтәрелә, хәлһеҙлек, күңел төшөнкөлөгө бер ҡасан да ташламай. Ҡасандыр эргәмдә йүгереп йөрөгән яҡындарым да яйлап ситләште. Ауырыуға ҡарағанда күберәк ана шул яңғыҙлыҡ тойғоһо мине бөтөрә.

Үҙемдең бәләмдә, бәхетһеҙлегемдә, әлбиттә, бер кемде лә ғәйепләргә йыйынмайым. Бөтәһенә лә тик үҙем генә ғәйепле мен. Аҡылһыҙлығым, дөрөҫөрәге, тәкәбберлегем хаҡы бик ҙур булды: бөтә ғаиләм, карьерам, киләсәгем менән түләнем.

Баштан-аяҡ ғашиҡ булып, нығ яратып сыҡтым тормошҡа. Училищела уҡығанда уҡ таныштҡайныҡ, бер-беребеҙҙе саҡ ҡына күрмәй торһаҡ, үлер хәлгә килеп һағындыҡ. Дуҫтар беҙҙең мөнәсәбәткә һоҡланып, нисәмә быуындың мөхәббәт символына әйләнгән Зөһрә һәм Таһир тип йөрөттеләр. Ул армияла саҡта бер кемдең һүҙенә лә, әсәй-атайҙың тыйыуына ла ҡарамай, бер түгел, ике тапҡыр барып ҡайттым ирем янына. Ике йыл буйы меңәрләгән саҡрым араны тоташтырып, хат яҙыштыҡ. Ҡайтҡас та һоратырға килде.

Бик матур итеп тормош ҡороп ебәрҙек. Бер-бер артлы ике ҡыҙыбыҙ тыуҙы. Тик... Бер-беребеҙҙе нисек яратһаҡ, шул тиклем үк көнләшеп аптыраттыҡ. Ул саҡ ҡына эштә оҙаҡлаһа, үҙемә урын таба алмайым, ҡайтып инеү менән яралы йыртҡыстай ташлана инем. Мин ваҡытында өйҙә булмаһам, ул мине шулай ҡаршыланы. Ул ниндәй ҡотҡо булғандыр, хатта үҙ туғандарыбыҙҙан ҡыҙғана инек берберебеҙҙе.

Иремә, ысынлап та, ҡатын-ҡыҙҙар бер ҡасан да битараф булманы, ул һәр ваҡыт гүзәл заттың иғтибар үҙәгендә ине. Минең холоҡто белгәнгәме, ул коллективта тыуған көндәргә, юбилейҙарға йөрөргә тырышманы, мин дә унан айырым байрам кисәләренә атлығып торманым.

Шулай, бер йыл 8 Март алдынан эштән ҡайтманы. Бындай ваҡытта башҡа йүнле уй киләме ни? Көттөм-көттөм дә сығып киттем. Барһам, бригадалары эштән һуң ҡатын-ҡыҙҙарын байрам менән ҡотлап табын ҡорған. Тик уның артында минең ир күренмәй. Күпме тырышһам да, уны таптырып, бөтә өҫтәлдәрен пыран-заран килтереүемде иҫләмәйем. Ярһып, аффект хәлендә булғанмынмы, әллә ен алмаштырҙымы, белмәйем. Илай-илай төнгө ҡала буйлап атлайым. Яҡтыһы булған фатирҙарҙың бөтәһендә лә минең һөйөклө ирем ултыралыр, кемделер иркәләйҙер, наҙлы һүҙҙәр һөйләйҙер кеүек, көнләшеүҙән йөрәгем алҡымыма тығыла. Артымдан бер ир ҡыуып етте. Бер ҙә таныш булмаған ирҙең 8 Мартты бергә ҡаршыларға тәҡдимен ҡыуанып ҡабул иттем, шуның менән балаларымдың атаһына, берҙән-беремә үс итергә уйланым. Бер грамм шарап эсмәһәм дә, иҫерек инем. Ул кешенең йөҙөн дә, ҡайҙа йәшәгәнен дә, нимә һөйләшкәнебеҙҙе лә хәтерләмәйем. Иртән ул мине машина менән илтеп ҡуйҙы.

Байрам табыны артында булмағас, хәләлем ҡайҙа булған тип уйлайһығыҙ? Дауаханала. Эштә аяғын йәрәхәтләп, тиҙ ярҙам машинаһы менән алып киткән булғандар. Ә ғаиләһенә хәбәр итергә береһе лә кәрәк тапмаған.

Бына ошолай үҙемдең тойғоларыма баш була алмау сәбәпле өҙөлөп һөйгән, бөтәһенән өҫтөн ҡуйған иремде, балаларымды, бөтә тормошомдо селпәрәмә килтерҙем. Юғалттым, тип шартлыса әйтәм, әлбиттә, улар мине береһе лә ташлап китмәне йәки ҡыуып сығарманы. Әммә бер-беребеҙгә бөтөнләй ятбыҙ хәҙер...

Бөгөнгө тормош тәжрибәмдән сығып, шуны әйтер инем: был донъяла асыуын еңә белгән кеше - иң көслөһө. Асыу бөтәһендә лә бар. Тик уны еңә белергә кәрәк, шул ваҡытта ғына үҙеңә-үҙең хужа була алаһың, әгәр ошо тойғоңа баш була алмайһың икән, башҡа бөтә яҡшы сифаттарыңды аяҡ аҫтына һалып тапайһың, тигән һүҙ...

Битараф, ғәмһеҙ кешеләргә элек йәнем һөймәй торғайны. Хәҙер уларға һоҡланам, сөнки ундайҙарҙың, "һалҡын аҡыл" менән эш иткәндәрҙең тормошонда бөтәһе лә үҙ урынында. Ә мин ҡасандыр бер баҫаһы урынға ике баҫып, оло апайҙар әйтә алмағанды тура әйтеп, үҙемдең һәр ваҡыт гәзел, дөрөҫ, ҡыйыу һәм ҡулымдан бөтә эш тә килеүе менән ғорурлыҡ тойғоһо кисереп, дөрөҫөрәге, тәкәбберләнеп, һөҙөмтәлә ошо көнгә төштөм. Һәр ваҡыт беренсе урынға үҙемде йәки яратҡан иремде ҡуйҙым. Тәү сиратта Аллаһу Тәғәләне ҡуйырға кәрәк булған... Бына шул гонаһым өсөн бик ҡиммәт түләнем.

Шуны әйтергә теләйем: асыу менән бер нәмә лә эшләмәгеҙ. Асыу, үс алыу тойғоһо кеүек үк упҡынға этәрә...

Монологты
**Лена АБДРАХМАНОВА**
яҙып алды.

ХӘТЕРКИТАП

# КҮҢЕЛЕНДӘ...

## донъя аҡлығы ине



**Фәүзиә апай Рәхимғолованың ижады менән беҙҙең быуын бала саҡтан таныш. Уның кескәйҙәр өсөн ҡойоп ҡуйған рифма-ритм менән яҙылған аңлайышлы шиғырҙары үҙенән-үҙе ятланыла торғайны.**

Ә шағирәнең үҙе менән шәхси танышыу уның һуңғы йылдарына тура килде, тиһәм, дөрөҫөрәк булыр. Мин уның янына тәү тапҡыр радиоға тапшырыу эшләр өсөн барғайным. Шунан алып, әҙибә менән бәйләнеш өҙөлмәне. Минең атай-әсәйҙән өлкән булғас, Фәүзиә апай миңә һәр саҡ "ҡыҙым", тип өндәшә торғайны. Шағирә өйөнән бик сығып йөрөмәне, шуға ла үҙенә йыш саҡырып торҙо. Ғәҙәттә, эштән һуң апайҙың янына барып сыға инем. Фәүзиә апай уңған хужабикә, һәм уның һәр саҡ ҡоймаҡҡа әсетеп әҙерләп ҡуйған шыйыҡ ҡамыры була. "Кем килһә лә ҡоймаҡ менән һыйларға яратам", ти торғайны ул ихлас йылмайып.

Эйе, Фәүзиә апайҙың тәмле ҡоймағынан да ауыҙ итергә, эс серҙәрен дә тыңларға насип булды. Тыштан һәр ваҡыт тыныс, ипле күренгән апайға шатлыҡтарҙан тыш, хыянатты ла, ауырлыҡтарҙы ла кисерергә тура килә. Ләкин ул һәр нәмәгә фәлсәфәүи ҡараштағы булды. Етемлектә үткән бала сағын иҫенә төшөргәндә лә, зарын түгел, яҡты мәлдәрҙе телгә алыр ине. Шуны ла әйтергә кәрәк, Фәүзиә апай сәйәхәт итергә, ер-һыу күрергә яратҡан, юл-сәфәрҙәге ҡыҙыҡ хәлдәрҙе, кәтөлмәгән осрашыуҙарҙы һөйләп көлдөрөп ала. Тағы ла шағирәнең асылын күрһәткән бер күренеште телгә алырға кәрәк. Уның фатирына ингәс, залда мебель түгел, ә дүрт стенаһын биҙәгән пейзажға иғтибар итәһең. Эйе, стеналар туғай, йылға, тау менән уратып алынған һәм барып-барып, тышта тәҙрәне ҡаплап үҫкән ағастар араһына алып инеп киткәндәй. Ошо тәбиғәт эсендә йәшәүе менән сикһеҙ ғорур ине Фәүзиә апай. Ә яҙыу өҫтәле ҙур түгел, тегеү машинкаһы өҫтәле ошо хеҙмәтте үтәй, Фәүзиә апай уға тылсымлы өҫтәлгә ҡараған кеүек ҡарай.

Бер барғанымда кесе йәштәге мәктәп балалары менән булған осрашыуын һөйләп алды. "Нығ оялып ултырҙым, ҡып-ҡыҙыл булып, тирләп бөттөм", ти. Был һүҙҙәр мине нығ аптырауға һалды. Ни өсөн икәнен һораным һәм һис уйламаған-көтмәгән яуап алдым: "Шундай матурҙар балаҡайҙар, эргәләрендә уларҙы йәмһеҙләп ултырамдыр инде, тип уйлайым да, оялам".

Фәүзиә Рәхимғолованың шундай хыялый, эскерһеҙ булып ҡалыуы кемдәрҙер өсөн, бәлки, сәйер ҙә тойолғандыр. Ләкин ул феномен ине. Маҡсатлы, тырыш булыуы менән күптәргә өлгө булырлыҡ. Студент йылдарында әхирәте Кәтибә Кинйәбулатованың мандолинала оҫта уйнағанын күреп, иҫе китә һәм үҙе лә өйрәнергә ҡарар итә. Мандолина серен үҙе өсөн аса, ғүмере буйы ошо музыка ҡоралынан айырылманы. Осрашыуҙарға йөрөгәндә лә шағирәнең ҡулында мандолина була торғайны.

Студент йылдарында илһамланып шиғыр яҙа башлайҙар. Был мәлдәрҙә Кәтибә апай ҙа иҫләп ала торғайны. Педагогтары (хәҙер генә исемен хәтерләмәйем) дәрестә шиғыр яҙыу алымдарын аңлата. Ҡанатланған ике ҡыҙ шиғыр яҙалар һәм уны мөғәллимдәренә алып баралар. "Шиғыр өсөн фекер кәрәк", ти уҡытыусы. "Ҡайтып барышлай, Фәүзиә минән: "Кәти, нимә була икән ул фекер?"- тип һораны, мин үҙем дә был һүҙҙе аңлата алманым", тип шул замандарҙы иҫләп көлөп алғайны. Был ике шағирә башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙә тос өлөш индерҙе.

Фәүзиә апай әҙәбиәтте уҡып барҙы, ижади торошто бик яҡшы белде, төплө анализлауы, тәрән һығымталар яһауы менән мине аптырата торғайны. Һүҙ сәнғәте, бөгөнгө әҫәрҙәр тураһында сәғәттәр буйы һөйләшеп ултырабыҙ. Был яҙмалар миндә һаҡлана, ҡасан да булһа, донъя күрер, тип уйлайым.

"Бал ҡорто һәм күбәләк" тигән автографлы китабын ҡәҙерләп һаҡлайым. Теүәл 26 йыл элек яҙып бүләк иткәйне. "Фәрзәнә ҡыҙыма. Өр-яңы йыл менән ҡотлап, иң изге теләктәр теләп, бәхет, мөхәббәт, шатлыҡ, ижад ҡыуаныстары юлдаш булһын, тип, бик нығ яратып, Фәүзиә апайың. Ғәфү ит инде, бармаҡтарым тыңламай. 16.12.95."

Фәүзиә Рәхимғолова миңә бау менән аҫып йөрөтә торған ручка ла бүләк итте. Уны ла һаҡлайым. Ҡулыма алһам, Фәүзиә апайҙың йөрәк йылыһын тойғандай булам...

"75 йыл йәшәйем әле, үҙемә шулай һүҙ бирҙем", тигәйне ул. Саҡ ҡына етмәй ҡалды...

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ХУШ ЕҪТӘР ДАУАЛАЙ

■ Төрлө хуш еҫтәр менән дауалау ябай граждандар араһында ғына түгел, ә медицина хеҙмәткәрҙәре араһында ла киң популярлыҡ яулай бара. Мәҫәлән, Америка Ҡушма Штаттарында Америка онкология йәмғиәте был дауалау ысулын традицион медицина менән бергә ҡулланырға тәҡдим итә. Ароматерапия ниндәйҙер ауырыуҙан дауаламай, әммә ҡайһы бер пациенттарға сирҙең кире тәьҫирен еңергә булышлыҡ итә, мәҫәлән, йоҡоһоҙлоҡтан, күңел болғаныуынан, баш ауыртыуынан ҡотолдора, ти белгестәр. "Ароматерапияла ҡулланылған эфир майҙары сәскә, үҫемлек япрағы һәм тамырынан алына, - ти Цинциннати штатындағы клиника директоры Хал Блэтмен. - Был майҙарҙы ванна ингәндә йәки ингаляциялар рәүешендә ҡулланырға була". Стрестан һәм мускулдар көсөргәнешенән ҡотолоу өсөн ала миләүшә йәки розмарин майы файҙалы. Бөтнөк һәм имбирь майын күңел болғаныуы һәм арыуға ҡаршы ҡулланалар. Эвкалипт майы тын юлдарын дауаларға ярҙам итә. Ароматерапияның кире эҙемтәләре лә бар. Табиптар был майҙарҙың бик "әүҙем" булыуын белдерә һәм аллергияға килтереү мөмкинлеген иҫтә тоторға кәңәш итә.

■ Ҡара шоколад ҡандағы насар холестерин кимәлен кәметә, ә ағы холестеринды күтәрә. Сан-Диего университеты ғалимдары үткәргән бәләкәй генә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡара шоколад составындағы флаванол матдәләре йөрәккә файҙалы. Тикшеренеүҙәрҙә 31 кеше ҡатнашҡан, уларҙың ҡайһы берҙәре 15 көн дауамында 51-әр грамм ҡара (70 процент какао), ҡайһылары аҡ шоколад ашарға тейеш булған. Ҡатнашыусыларҙың ҡан баҫымы, ҡан әйләнеше, липидтар циркуляцияһы, ҡандағы глюкоза кимәле даими тикшерелеп торған. Тестар күрһәтеүенсә, ҡара шоколад ашаусыларҙың "яҡшы" холестерин кимәле юғарыраҡ булып сыға. Ҡара шоколад йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртергә һәләтле булһа ла, тикшеренеүселәр уны артыҡ ашамаҫҡа кәңәш итә, сөнки уның калорияһы ла юғары.

■ 2030 йылға ирҙәрҙең ғүмер оҙайлығы ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына етәсәк, ти ғалимдар. Әлегә тиклем көслө заттар ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда аҙыраҡ йәшәй ине, әммә бөгөн уларҙың ғүмер оҙайлығы үҫеше күҙәтелә. Белгестәр фекеренсә, был ирҙәрҙең сәләмәтлегенә күберәк иғтибар итә башлауы, айырыуса тәмәке тартмауы, зарарлы производстволарҙа эшләмәүе менән бәйле. Әгәр ҙә 1920 йылдарҙа ир-егеттәрҙең 80 проценты тәмәке тартһа, был зарарлы ғәҙәт менән бәйле сирҙәрҙең күбәйеүе үткән быуаттың 70-се йылдарына тура килә. Бөгөн иһә ирҙәр тәмәкенән йышыраҡ баш тарта, шул уҡ ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙар араһында тәмәке тартыусылар күбәйә, ти ғалимдар. Был статистик тикшеренеүҙе үткәреүсе профессор Лес Мэйхью әйтеүенсә, һуңғы 20 йыл эсендә ир-егеттәрҙең ғүмер оҙайлығы 6 йылға артҡан, әгәр ҙә был һан артабан да ошонан кәмемәһә, яҡындағы 20 йыл эсендә ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡыуып етәсәк.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көй тыңлау хәүеф тойғоһон һәм депрессияны кәметә, кәйефте яҡшырта һәм баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәрен уята. Әммә Америка ғалимдары билдәләүенсә, эш эшләгән ваҡытта яратҡан көйөңдө тыңлау эштең сифатына кире йоғонто яһай икән. Неврологтар көй һәм тауыштарҙың мейе функцияларына тәьҫирен тикшереп, тулы тынлыҡта ғына мейенең яҡшыраҡ эшләй алыуын асыҡлаған.

ОЛОЛАР ИҒТИБАРЫНА

**"Киске Өфө" гәзитендә йыл дауамында Башҡорт тарихы йылына, башҡорттар тарихына арналған бихисап мәҡәләләр донъя күрҙе. Ғәҙәттә, гәзит уҡыусыларыбыҙ "Баҫмағыҙҙы көтөп алабыҙ, уны өтөр-нөктәһенә тиклем йығылып ятып уҡыйбыҙ", тиҙәр, шуға ла уларҙың иғтибарлылыҡтарын һынап ҡарау маҡсатында үткән йыл аҙағындағы 46-сы һанда 20 һорауҙан торған викторина тәҡдим иткәйнек. Әллә һорауҙарыбыҙ артыҡ ауыр булды, әллә ни әүҙемлек тойолманы.**

# ГӘЗИТЕБЕҘҘӘ - ТАРИХЫБЫҘ САҒЫЛЫШЫ




Шулай ҙа, вәғәҙә - иман, тигәнде хәтерҙә тотоп, инселәнгән бүләктәребеҙҙе еңеүселәргә юллайбыҙ: иң тәүгеләрҙән булып һәм иң тулы яуаптарҙы Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан хаҡлы ялдағы уҡытыусы Фәниә Әкрәм ҡыҙы Фәйзуллина ебәрҙе. Үҙе тураһында ул бына нимәләр яҙған: "Ж. Кейекбаев исемендәге Сәйетбаба урта мәктәбендә 40 йыл уҡытыусы булып эшләнем. "Башҡортостан тарихы", "Башҡорт мәҙәниәте" ("Тормош һабаҡтары") фәндәрен уҡыттым. Башҡорт халҡының тарихын, мәҙәниәтен, шөғөлөн күрһәткән, үткәнен, бөгөнгөһөн һәм киләсәген сағылдырған Тыуған яҡты өйрәнеү музейы ойошторҙом. Музей бөгөн Сәйетбаба ауыл мәҙәниәт йортонда урынлашҡан "Сәйетбаба" республика башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәгенең бер йәме булып тора. Эш дәүерендә "Киске Өфө" гәзитен дәрестәрҙә киң файҙаландым, сөнки гәзит материалдары күп өҫтәмә мәғлүмәт сығанағы булып тора. Гәзитте сыға башлағанынан бирле алдырмай ҡалғаным юҡ".

Шулай итеп, беҙ вәғәҙә иткән 7 томлыҡ "Башҡорт энциклопедияһы" Ғафури районына, **Фәниә Фәйзуллинаға** юлланды. Шулай уҡ Мәләүез районы Иштуған ауылының 75 йәшлек "егете" **Ғәйнетдин Сәмсетдин улы Камалетдиновҡа** ла, тулы яуап бирә алмаһа ла, викторинала ҡатнашҡаны өсөн беҙҙән бүләк - Ә. Әсфәндиәровтың "История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий" китабы.

**Ә яуаптарҙы белеп тә, беҙгә яҙып ебәрергә йөрьәт итмәгәндәр үҙҙәренең белемен һынап ҡарай ала. Викторина яуаптары:**

**1.** "Ысын башҡорт олатайының һәм өләсәйенең һандығында кәмендә ете батыр, ете хайуан тураһында һәм ете тылсымлы әкиәт, ете доға, ете шиғыр, ете йыр, ете йомаҡ, ете көләмәс, ун ете таҡмаҡ ята, улар әйткәндәрҙе ейәненә өйрәтә" - был юлдар башҡорт өсөн мөһим булырға тейешле, БДУ докторанты, философия фәндәре кандидаты Зилә Рәхмәтуллина төҙөгән "Башҡорттарҙың намыҫ кодексы"нда булырға тейеш ( №2)

**2.** "Башҡортостандың мишәр балаһы" псевдонимы менән мөрәжәғәт 1918 йылда "Башҡорт" гәзитендә баҫыла (№5).

**3.** Башҡорт халҡының азатлыҡ көрәшен сағылдырған башҡорт телендәге тәүге төҫлө, Ғәли Ибраһимов романы буйынса дүрт сериялы "Кинйә" телефильмы 1986 йылда төшөрөлә. Сценарий авторы - Фуат Биишев, режиссеры - Әмир Абдразаҡов, ҡуйыусы режиссеры - Рафаэль Биккинин (№6).

**4.** "Беҙҙең төп ырыуыбыҙ - Суҡлы-Ҡай, ә беҙгә яҡын ырыуҙарҙан Саңаҡлы-Ҡай, Йөрәкле-Ҡай, Таулы-Ҡай, Ҡай йәиһә Ҡайлы ырыуы составына инә", - тип башҡорт этносын яҡшы өйрәнгән күренекле ғалим Әхмәтзәки Вәлиди Туған яҙған (№6).

**5.** Башҡорт шағиры, мәғрифәтсе, суфыйсылыҡтың Нәҡшбәндиә тәриҡәтенә ҡараған билдәле дин эшмәкәре Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой (Мөхәммәт-Ғәли Ғәбделсалих улы Кейеков) 5 мәҙрәсәлә белем ала, XIX быуаттың 70-80-се йылдарында 4 мәртәбә Мәккәгә хаж ҡыла. Үҙе иҫән сағында иҫке төрки телендә 6 китабын нәшер итә һәм бик күп ҡулъяҙма мираҫ ҡалдыра. Уның 9 күләмле ҡулъяҙмаһы Башҡортостандың Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала, шунсаһы уҡ Ҡаҙан федераль университеты Ғилми китапханаһының көнсығыш ҡулъяҙмалары секторында, ә бер ни тиклеме Санкт-Петербургта Рәсәй Фәндәр академияһының Көнсығыш ҡулъяҙмалары институтында һаҡлана (№9).

**6.** Мәләүез районы биләмәһендә 18-се быуатта төҙөлгән Воскресенск баҡыр иретеү заводы 1870 йылда Англия компанияһы етәкселегенә күсә. 1891 йылда инглиздәр уны һата. 1902 йылда ул эшмәкәрлеген тулыһынса туҡтата (№11).

**7.** Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районы Ҡолсом ауылы башҡорто Дәүләтхужа Ишкилде улы Сиражетдинов - бөтә донъяға билдәле монументаль һәйкәлдәр оҫтаһы Салауат Щербаковтың атаһы (№13).

**8.** Башҡорт халҡын үҫтереү стратегияһы 2020 йылдың 25 декабрендә ҡабул ителә. Ике өлөштән, 10 стратегик йүнәлештән тора (№13).

**9.** Башҡорттарҙың этник үҙенсәлеге тураһында: "Башҡорттар араһында ҡәбилә һәм клан берҙәйлеге, дөйөм башҡорт берҙәйлеге кеүек үк, иң юғары берҙәйлек булып, әлеге көнгә тиклем һаҡланып ҡалған", - тип Америка тикшеренеүсеһе Аллен Франк яҙып ҡалдырған (№17).

**10.** "Башҡорттарҙа шундай көйҙәр күп, уларға теләһә ниндәй композитор көнләшеп ҡарар ине", - был күренекле тарихсы-крайҙы өйрәнеүсе, этнограф, фольклорсы, археолог Руф Игнатьев һүҙҙәре (№24).

**11.** "Башҡорттарҙың беҙгә 1904 йылда Соколовтың китабы буйынса билдәле булған һәм өйрәнелгән тамғалары иртә төрки дәүләттәренең аҡһөйәктәре һәм хакимлыҡ итеүсе династиялары символикаһына барып тоташа", - профессор Игорь Кызласов Башҡорттарҙың этник тарихы һәм антропологияһы буйынса уҙғарылған фәнни сессиялағы "Башҡорт геральдикаһы тамырҙары: иртә Урта быуат дәүләттәренең аҡһөйәктәр тамғаһы" тип аталған сығышында шулай тип белдерә (№28).

**12.** Ҡатайҙар быйыл унынсы тапҡыр йыйыла, улар - иң әүҙем башҡорт ырыуҙарҙың береһе (№35).

**13.** Башҡорт телендә өс диалект булыуын, башҡорттарҙың төньяҡ-көнбайыш диалектының үҙаллы, көнбайыш диалекты булыуын нигеҙләгән, башҡорт диалектологияһы фәнен Бөтә Союз төркиәт аренаһына сығарған ғалим - быйыл тыуыуына 135 йыл тулған билдәле башҡорт тел ғилеме, төрки телдәренең диалектология, лексикология, терминология һәм лексикография өлкәһендәге белгесе Таһир Ғәлләм улы Байышев (№35).

**14.** Башҡортостан Республикаһының Милли архивы ҡарамағында 2017 йылда Шәжәрә үҙәге ойошторола (№37).

**15.** Ҡышҡа ҡарай башҡорт аттары бөҙрәләнеп торған оҙон йөн менән ҡаплана. Тап бөҙрәләнеп торған оҙон йөн башҡорт атының иң төп билдәләренең береһе (№38).

**16.** Ғалим, социолог, тарихсы, инженер Йәҙгәр Бәшировтың башҡорт тарихына ҡағылышлы китаптары: "Бөйөк Башҡортостан. Халыҡтарҙың этник тамырҙары, ойошоуы һәм үҫеше", "Урта быуат хандары: Башҡорт хан", "Ҡол Ғәли һәм башҡорт халҡының мәҙәниәте тураһында", "Боронғо башҡорттар" ( №40).

**17.** Граждандар һуғышында 2-се Башҡорт уҡсылар полкы яугирҙары - яҡташтарыбыҙ үҙҙәре теккән байраҡ аҫтында дошман менән алышҡан. Хәҙер ул Башҡортостандың Милли музейында һаҡлана. Ошоға тиклем был байраҡ шәхси коллекцияларҙа һаҡланған, Башҡортостанға АҠШ-тан ҡайтарылған (№41).

**18.** "Топонимияның ижадсыһы - халыҡ, ә уның сығанағы халыҡтың үҙ ерендәге тормошо, хеҙмәте, ижады, тәбиғәтте танып белеү һәм үҙләштереү ҡеүәһе, уй-фекер һәм хыял донъяһы, заманалар аша үткән көндәлек эшмәкәрлеге, тарихи яҙмыш юлдары. Был йәһәттән топонимика фольклорға яҡын тора," - ти шағир, ғалим, филология фәндәре докторы, профессор Рәшит Шәкүр (№43).

**19.** Ырымбур өлкәһенең башҡорт фольклорында сағылыш тапҡан берҙән-бер генерал губернаторы Василий Алексеевич Перовский (№42).

**20.** Башҡорт ғәскәрҙәре музейы Карауанһарайҙа булдырылыуы ихтимал (№42).

БАЛАЛАР ИҒТИБАРЫНА

# Ә ҺЕҘ ТАРИХТЫ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?



**Шулай уҡ йәштәр, мәктәп уҡыусылары үҙ тарихы менән ҡыҙыҡһынамы, тамырҙарын беләме, баҫма матбуғатты уҡыймы икәнен асыҡлар өсөн дә былтырғы 47-се һанда йыл дауамында гәзитебеҙҙә сыҡҡан мәҡәләләр нигеҙендә бәләкәй генә викторина һорауҙарын тәҡдим иткәйнек. Был йәһәттән бөрйәндәр алдын булып сыҡты. 7 томлыҡ "Башҡорт энциклопедияһы" Иҫке Собханғолдан тәүгеләрҙән булып тулы яуаптар ебәргән Айһылыу Ғәбиҙуллинаға. Афарин!**

**Үҙҙәренең белемен һынап ҡарарға теләүселәр өсөн викторина яуаптарын тәҡдим итәбеҙ:**

**1.** Борон умартасы ҡортон ҡотло кешегә генә һатҡан. Был осраҡта даланлы ҡорт үҙ көсөн юғалтмаған - ул ике ҡортсоға ла ҡот килтергән. "Ҡотһоҙға ҡорт ҡунмаҫ, умартаһында ҡорт тормаҫ", - тип юҡҡа әйтмәгәндәр (№2).

**2.** Салауат Юлаев, Степан Разин, Сыңғыҙхан, Кемаль Ата Төрк, Эдип, Гарнагон, Юлғотло, Нөгөш, Миңлеғәли Шайморатов... Башҡарған ролдәренең осона сығып булмаһа ла, сәнғәт һөйөүселәр өсөн Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры Хөрмәт Үтәшев - сәхнә генералы. (№3)

**3.** Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми "Урал" поэмаһында башҡортлоҡтоң асылын ҡурайға тиңләй.

*Башҡортлоҡ - ул милләт кенә түгел,*
*Ҡурай кеүек ябай, ҡатмарлы.*
*Ерҙә әле рух бар, халыҡ рухы,*
*Ҡабул итмәй ул рух юҡ-барҙы*
(№6).

**4.** 11 йәшендә 42 картинала уйнаған, былтыр сентябрҙән алып быйылға тиклем Голливудта киноға төшкән ҡыҙ - Марта Тимофеева, уның башҡорт туғаны - Арыҫлан Ҡырымсурин (№9).

**5.** 1895 йылда венгр ғалимы А. Вамбериҙы Башҡортостан буйлап Ризаитдин Фәхретдинов менән Мөхәмәтсәлим Өмәмтбаев оҙатып йөрөй һәм уға башҡорт теле буйынса материалдар йыйыуҙа ярҙам итә (№11).

**6.** Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы аппаратының баш белгесе Радик Бәхтиев етәкләгән төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының иң билдәле ойошмаһы "Без - башҡортлар" тип атала (№13).

**7.** Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең нәҫеле эске йылан ырыуына ҡарай (№15).

**8.** "Типтәр" терминының килеп сығышына ишара булырҙай,
*Иле типкән - ир булмаҫ,*
*Ташлап киткән - ер булмаҫ,*
*Көтөү типкән мал булмаҫ,*
*Күңел типкән - йәр булмаҫ,* тигән башҡорт мәҡәле бар (№18)

**9.** Борон балды тар ғына батманға йыйғандар. Балды батмандар менән һанау ғәҙәте яһаҡ тәғәйенләгәндә һәм йыйғанда ҡулланылған (№34).

**10.** "Башҡорт Википедияһында" мәктәп йәшендәге балалар, үҫмерҙәр, йәштәр, шулай уҡ телгә булғандар өсөн ойошторолған конкурс "Башҡорт исемдәре 2021" тип аталды (№38).

**Еңеүселәрҙе ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Яңы йыл һәммәбеҙгә лә сәләмәтлек, яңы уңыш-ҡаҙаныштар, бәхетле тормош килтерһен! Бергә булдыҡ, бергә ҡалайыҡ!**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

# БАУЫРҺАҠ - ТАБЫН ЙӘМЕ



**Иғтибар итһәгеҙ, байрам өҫтәле милли ризыҡтар булғанда тағы ла күркәмерәк, йәмлерәк. Бигерәк тә бауырһаҡ, сәк-сәк өҫтәлде биҙәй. Уны һәр кем үҙе белгәнсә һәм теләгәнсә бешерә. Һеҙгә Күгәрсен районы Аҙнағол ауылында йәшәгән Ләйсән Хөрмәт ҡыҙы СӘЛИХОВАнан рецепт тәҡдим итәбеҙ.**

- Күптәр, айырыуса йәштәр, бешереүе оҙаҡ, тип, сәк-сәк, бауырһаҡ кеүек тәмләкәстәрҙе әҙерләмәҫкә тырыша. Башта ғына шулай тойола ул. Бер өйрәнеп алһаң, гел бешерге генә килеп тора. Ваҡыт кәрәк, әлбиттә. Түҙемлек тә талап ителә. Сабыр ғына, ҡабаланмай ғына тотонһаң, һис шикһеҙ, бауырһағығыҙ ҙа, сәк-сәгегеҙ ҙә уңып бешер. Мин үҙем уны байрамға, ҡунаҡҡа алданыраҡ, ваҡыт иркенерәк булғанда әҙерләйем. Был көндә башҡа ҡамыр эшен планлаштырмайым.

Шулай итеп, 6 йомортҡа, ауылдыҡы булһа тағы ла яҡшыраҡ, бысаҡ осонда ғына сода һәм тоҙ, 1 балғалаҡ үҫемлек майын бергә ҡушып, күпергәнсе болғатам, миксер булһа, тағы ла яҡшыраҡ. Килеп сыҡҡан массаға иләнгән ондо яйлап ҡына һалып, ҡамыр баҫам. Ондоң юғары сортлыһын алырға тырышығыҙ һәм уны мотлаҡ иләгеҙ, ул ондо таҙартып ҡына ҡалмай, кислород менән дә байыта. Баҫып бөткәс, уны ябып, ярты сәғәткә "ял итергә" һалам.

Бауырһаҡ ереле-ваҡлы булмаһын өсөн уны тигеҙ генә итеп ҡырҡып, ике усым менән бауға оҡшатып һуҙып сығам да, бер тигеҙ генә итеп киҫәм. Бер-береһенә тейеп йәбешеп ятмаһын, таҡтаға йәбешмәһен өсөн аҙыраҡ он һибәм. Ҡоро таҫтамалға теҙергә лә мөмкин.

Бешергәндә һаҡ һәм иғтибарлы булырға кәрәк. Һауыт һай булырға тейеш түгел, ҡайһы бер үҫемлек майы, ҡамырҙы төшөргәс, ҡапыл күпереп таша.

Ярылып бешмәһен өсөн ҡамырҙы ҡайнар майға төшөрмәйем. Ҡайнап сыҡҡас, уттан алып торам да, бер аҙ һыуынғас ҡына бауырһаҡты һалам һәм утҡа ҡуйып, әҙләкһеҙ генә болғатып торам. Ҡабарып, өҫкә ҡалҡып сыҡҡас, бер төрлө төҫкә ингәнен көтөп, һөҙөп алам. Яҡынса 7-8 минутта матур ғына ҡыҙара.

Сиропты түбәндәгесә әҙерләйем: 4-5 ҡалаҡ бал, ярты сынаяҡ һыу һәм 1,5-2 стакан шәкәрҙе ҡушып, һүрән утта 8-10 минут ҡайнатам. Бал һымаҡ һуҙылып ҡына торһа, ул әҙер тигән һүҙ.

Ҡулды аҙ ғына һыулайым да, бауырһаҡҡа сиропты һалып, матур тәрилкәләргә өйөп ҡуям.

Йыш ҡына туғандарға никахҡа, туйға барғанда күстәнәскә сәк-сәк, бауырһаҡ бешереп алып барам. Шуны һынағаным бар: әгәр бауырһаҡтар бер-береһенә нығ йәбешһә, йәш кәләш һәм кейәү араһы нығ яҡын була. Йомшағыраҡ, таралыбыраҡ торған саҡтар ҙа булғылай. Ул сағында йәштәрҙең мөнәсәбәте тарҡауыраҡ һымаҡ.

**Лена БАРЫЕВА яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Башҡаларҙың асылыуына ярҙам итеп, үҙегеҙгә асылыш килер

Үҙегеҙ әле генә яһаған йыһан сәйәхәтенә башҡаларҙы ла ылыҡтырып ҡараманығыҙмы? Был бушҡа ваҡыт үткәреү генә булыр, сөнки башҡалар һеҙ үткән әҙерлекте үтмәгән. Башҡаларға ярҙам итеүҙең икенсе ысулдары ла бар. Ни тиклем күберәк ярҙам күрһәтһәгеҙ, үҙегеҙгә шул тиклем күберәк ярҙам алырһығыҙ.

Уҡытыусы бишенсе синыф уҡыусыһы Шондың һуғыш суҡмары булыуына, өйгә эшен насар эшләүенә даими зарлана. Малайҙың ата-әсәһен әңгәмәгә саҡырғас, әсәһе: "Күрәһең, ул уҡыу өсөн тыумағандыр инде", - ти, аптырап. "Ул үҙе, әлбиттә, быының менән килешер ине, - ти уҡытыусы. - Әммә был уға киләсәктә проблемалар тыуҙырыуы мөмкин. Уның үҙбаһаһы түбән. Башҡалар менән аралашҡанда, сәбәп булмаһа ла, ул үҙен яҡлау позицияһына баҫа".

Ата-әсә ҡапыл бер-береһенә ҡарап ала һәм риза булыуҙарын белдереп, баш ҡаға. "Һеҙ тап өҫтөнә баҫтығыҙ. Беҙ нимә эшләргә беләбеҙ", - тип ышандыра атай кеше.

Бер нисә көн дауамында улар беҙ өйрәткән медитация - көйләп булған өндәге төш күреү менән шөғөлләнә. Ата менән әсә көсөргәнештән арынып, Шонды дүрт метр буйлы, үҙенең синыфташтарынан аша ҡарап тороусы, үҙ-үҙенә ышаныусан һәм ихтирамлы итеп күҙ алдына килтерә. Артабан улар Шонға ла күҙҙәрен йомоп, үҙ алдына хыялланырға ҡуша. Улар уға уйҙарында ғына нисек итеп регбиҙа гол индергәнен, мәктәп парады менән идара иткәнен, матур яҙыу конкурсында еңеү яулауын һүрәтләй.

Бер ай үткәс, уҡытыусы был атай-әсәйгә шундай һүҙҙәр яҙып ебәрә: "Шонды танырлыҡ та түгел. Быға нисек өлгәштегеҙ?" Улар уҡытыусыға бер нәмә лә әйтмәй. Ә мин серҙе асам.

Шондың ата-әсәһе тәүҙә үҙҙәре өсөн эшләй, һуңынан инде улдары өсөн. Тәүҙә үҙеңә ярҙам итергә кәрәк, аҙаҡ өндәге төш ярҙамында башҡаларға ла, хатта улар һеҙҙән бик алыҫта булһалар ҙа, ярҙам итә алаһығыҙ. Алда яҙылған кәңәштәр аша һеҙ башҡаларға изгелек эшләү һәләтен һәм теләген астығыҙ. Хәҙер һеҙҙең өсөн иң мөһиме - үҙегеҙҙе шәхесегеҙҙе үҙгәртеү өсөн программалау. Тәү сиратта тормошоғоҙҙа яҡшыртыуҙы талап иткән өс өлкәне билдәләгеҙ. Ниндәй өлкәләр икәнен һәр кем үҙе асыҡлай, улар кире йоғонтоға тиҙ бирешкән, фекерләүҙе сикләгән, үҙбаһаны төшөргән өлкәләр булырға тейеш. Өс өлкәне һайлап, түбәндә бирелгән күнекмәне өс тапҡыр эшләгеҙ. Үҙбаһаны яҡшыртыуға ярҙам иткән күнекмә:

- Яҡшылап ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм бер нисә тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.
- Үҙегеҙҙең әлеге хәл-торошоғоҙҙо күрегеҙ - мәҫәлән, әгәр сәләмәтлегегеҙҙе нығытыу өҫтөндә эшләһәгеҙ, үҙегеҙҙе күңел төшөнкөлөгөндә, арыған итеп күрегеҙ.
- Ошо картинаның өҫтөнә ҙур ҡыҙыл хәрефтәр менән "Алып ташларға" тип яҙығыҙ һәм уны алыштырығыҙ.
- Хәҙер үҙегеҙҙе энергияғыҙ ташып торған итеп күрегеҙ. Нимә теләйһегеҙ, шуны еңел генә эшләйһегеҙ, хатта артығын да эшләй алаһығыҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ, үҙ аңығыҙҙа икәнлегегеҙҙе һәм яңы энергия заряды алыуығыҙҙы тойоғоҙ.

Бер сәғәттән йәки һуңыраҡ был күнекмәне икенсе өлкәләр өсөн ҡулланығыҙ. Ҡабат уйығыҙҙа ғына үҙгәртелергә тейеш картинаны һүрәтләгеҙ, һуңынан уны алмаштырығыҙ. Аңланығыҙмы? Хыялдағы образдар өсөн сик юҡ һәм улар һеҙҙе шул тулҡынға көйләй.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Студенттарға бер юлы бер нисә квалификация алырға, икенсе курстан һуң уҡыу йүнәлешен алыштырырға һәм башҡа факультеттарға күсергә мөмкин. Аспиранттар өсөн мотлаҡ диссертацияны алдан яҡлау тәртибе ҡайтарыласаҡ.*



*ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА*

# ШУНДАЙ ЯҢЫЛЫҠТАР

**РФ Дәүләт думаһы спикеры Вячеслав Володин 2021 йылдың декабрендә көсөнә ингән законлар хаҡында хәбәр итте."Был йылдың һуңғы айында беҙҙең граждандар өсөн мөһим яңылыҡтар эшкә ҡушыласаҡ - яңы тыуған сабыйҙы теркәү еңелләшәсәк, социаль әһәмиәттәге сайттарға бушлай инергә мөмкин буласаҡ. Финанс өлкәһендә кешеләрҙе яҡлаусы ҡайһы бер закондарға айырым туҡталып китәм,"- тип яҙҙы спикер.**

***Финанс пирамидалары.*** Ғәмәлдәге рәсми финанс ойошмалары менән оҡшаш исемен, төҙөлөшөн һәм йөкмәткеһен файҙаланып интернет ҡулланыусыларҙы алдауға ҡоролған һәм финанс хеҙмәттәре күрһәтеүгә хоҡуҡтары булмаған кешеләрҙе рекламалаған сайттар суд ҡарауынан тыш ғәмәлдән сығарыласаҡ. "Был ҡарар финанс пирамидаларын рекламалаусы ресурстар эшмәкәрлеген ваҡытында тыйыу мөмкинлеге бирәсәк",- ти Володин.

***Социаль әһәмиәттәге сайттар.*** Социаль әһәмиәттәге сайттарға бушлай инеү мөмкинлеге бирелә. Былдай ресурстар иҫәбенә дәүләт хеҙмәттәре һәм урындарҙағы үҙидара органдары, РФ дәүләт бюджеттан тыш фондтар һәм Дәүләт хеҙмәте порталы сайттары инә. Социаль әһәмиәттәге башҡа сайттар буйынса мәсьәләне махсус дәүләт комиссияһы ҡараясаҡ.

***Марка һуғылмаған продукция.*** Тауарҙарға, шул иҫәптән дарыуҙарға, махсус марка һуғыу талабын боҙған өсөн административ яуаплылыҡ ҡарала. Шул уҡ ваҡытта күрәләтә ялған идентификация сараларын ҡулланып тауарҙар етештереү, һатып алыу, һаҡлау һәм уларҙы һатыу маҡсатында ташыған өсөн енәйәт яуаплылығы - өс йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү язаһы ҡарала.

***Сил илдән килеүселәр өсөн бармаҡ эҙҙәрен алыу һәм медицина ҡаралыуы үтеү.*** Рәсәйгә 90 календарь көндән ашыу ваҡытҡа сит илдән килеүселәр бөтәһе лә дактилоскопик теркәлеү үтергә, фотоға төшөргә һәм медицина ҡаралыуы үтергә тейештәр. Һуңғы талап улар менән аралашасаҡ кешеләргә йоғоу хәүефе булған ВИЧ-инфекция, башҡа йоғошло сирҙәр, шулай уҡ наркотик бәйлелекте асыҡлау өсөн кәрәк. Был процедуралар Рәсәйгә килгән мәлдән 90 көн эсендә, ә эшләргә килеүселәр өсөн 30 көндә башҡарылырға тейеш.

***Банктағы кәметелмәүсе ҡалдыҡ аҡса.*** Банктар сираттағы түләүен башҡартыу өсөн заемсының иҫәбендә кәметелмәүсе ҡалдыҡ аҡсаһы булыуын талап итеүсе шартты кредит килешеүенә индерә алмай. Граждандар шулай уҡ кредит килешеүе төҙөгәндә уларға тағылыусы өҫтәмә (юридик ярҙам йә кәңәш) хеҙмәттәрҙән 14 көн эсендә баш тарта ала. Кредит биреүсегә заемсы өсөн кредит шарттары менән килешеүҙе һуңғыһының шәхси ҡултамғаһынан тыш төҙөү тыйыла.

***Гражданлыҡ хәле акттары.*** Гражданлыҡ хәле акттарын, мәҫәлән, бала тыуыуҙы теркәү, теләгән бер ЗАГС бүлегендә башҡарыла ала. Тантаналы шарттарҙа никах теркәү тәртибе илдең субъекттары тарафынан билдәләнә, ә никахты тарҡатыу тураһында элекке ир һәм ҡатындан йәки уларҙың аҡылы камил булмағандарының береһе исеменән нотариус раҫлаған ышаныс ҡағыҙы менән опекун йә башҡа кеше ғариза бирә ала.

***Әйләнә-тирә мөхит.*** Рәсәйҙә парник газдар бүлеп сығарыуҙы сикләү буйынса саралар: уларҙы дәүләт теркәүе, кәметеүҙең маҡсатлы күрһәткестәрен билдәләү, шулай уҡ газдар бүлеп сығарыуҙы кәметеү буйынса эшмәкәрлеккә ярҙам саралары ғәмәлгә индерелә башлаясаҡ.

***Һөнәре күп байыр.*** Юғары уҡыу йорттарына белем биреү программаларын һайлауҙа күберәк үҙаллылыҡ биреләү сәбәпле, вуздар хәҙер эреләтелгән һөнәр төркөмдәре буйынса белгестәр әҙерләй ала. Шулай итеп, студенттарға бер юлы бер нисә квалификация алырға, икенсе курстан һуң уҡыу йүнәлешен алыштырырға һәм башҡа факультеттарға күсергә мөмкин. Тағы бер яңылыҡ: аспиранттар өсөн мотлаҡ диссертацияны алдан яҡлау тәртибе ҡайтарыласаҡ.

***Мәғлүмәттәр асыҡлығы.*** Финанс ойошмаларына ҡулланыусыға башҡарылған операциялар, шулай уҡ ойошма менән килешеү төҙөргә теләүсе физик шәхескә бының менән бәйле бөтөн булған хәүеф ихтималлығы хаҡында тулы һәм дөрөҫ мәғлүмәт биреү бурысы йөкмәтелә.

***Инвалидтар мәнфәғәтендә.*** Инвалидтарҙы аяҡҡа баҫтырыуҙың техник саралары менән бергә улар үҙҙәре һатып алған саралар өсөн компенсациянан тыш, ярҙам менән тәьминәткә тағы ла электрон сертификат өҫтәлә. Реабилитацияның техник сараһы һатып алыу өсөн уны ярҙам алыусының һайлауы буйынса теләгән магазинда, шул иҫәптән онлайн рәүешендә файҙаланырға була.

*АФАРИН!*

# ҠУРАЙСЫЛАР БӘЙГЕ ТОТТО



**Ошо көндәрҙә Әҙһәм Исҡужин исемендәге Балалар сәнғәт мәктәбенең концерт залында 6-сы тапҡыр Ҡурайсыларҙың Әҙһәм Исҡужин исемендәге асыҡ ҡала конкурсына йомғаҡ яһалды.**

Ленин районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Әхиәт Ғәйетбаевтың һәм ул етәкләгән Балалар сәнғәт мәктәбе коллективының тағы бер маҡтаулы эшмәкәрлегенә шаһит булынды. Сөнки быйыл улар бер шәп мәҙәни сара - Милли музыка ҡоралдарында уйнаусы ҡала балалар конкурсын иң юғары кимәлдә үткәргәйне инде. Был Ленин районы башҡорттары ҡоролтайы атҡарған проект һәм уны киләһе йыл Өфө ҡала хакимиәтенең Мәҙәниәт идаралығына асыҡ ҡала конкурсына әйләндереү тураһында тәҡдим менән сығыш яһап, хуплау табып йөрөүҙәре. Сөнки был сараға әҙерләнгән ваҡытта уға 120 ҡатнашыусы ғариза биреп, Өфө балалары араһында милли музыка ҡоралдарында уйнаусыларҙың бик күп булыуына шаһит булынды һәм был ҡала кимәлендәге бик шәп проект буласағына инанылғайны.

Ә әлеге конкурс Өфө ҡала хакимиәтенең Мәҙәниәт идаралығы, Халыҡ ижады үҙәге, шулай уҡ Ленин районы хакимиәте һәм Ленин районы башҡорттары ҡоролтайы менән бергә ойошторолдо. Әлбиттә, конкурс онлайн форматта үтте һәм унда Башҡортостандың төрлө райондарынан һәм ҡалаларынан, Силәбе өлкәһенән, Ханты-Манси автономиялы округынан 104 ҡурайсы ҡатнашты. Ҡатнашыусыларҙың күплегенә генә түгел, ә оҫталыҡтары шул тиклем профессиональ юғары кимәлдә булыуына һоҡланылды. Ғөмүмән, беҙҙең ҡурай сәнғәте өлкәһендә шундай шәп йола нығынған: остаздар мәктәбе Ғата Сөләймәнов, Әҙһәм Исҡужин, Кәрим Дияров һ.б. бөйөк оҫталарҙан башлана һәм уларҙың уҡыусылары тарафынан дауам ителә. Был конкурста ла уҡытыусылар үҙ уҡыусыларын бәйгегә әйҙәп алып килгәйне.

Конкурстың иң юғары бүләгенә Сибай ҡалаһынан Шамил Күсәмишев лайыҡ булды. Ә балалар араһынан гран-при Өфө ҡалаһынан Радмир Ғүмәровҡа бирелде. Ғөмүмән, был бәйгелә лә Өфө ҡалаһында йәшәүсе һәм эшләүсе ҡурайсылар бихисап булыуын, быны мәҙәниәтебеҙҙәге уникаль күренеш тип, шулай уҡ ошондай конкурстарҙың матур һөҙөмтәһе тип билдәләргә кәрәк.

Силәбе өлкәһенән килгән 12 йәшлек ҡурайсы Алмаз Бикмәтов тә оҫталыҡта Башҡортостандағыларҙан бер ҙә ҡалышманы һәм һоҡландырҙы, ҡурайыбыҙҙың республиканан ситтә лә яңғыраясаҡ, яңы һәләттәр үҫеп сығасаҡ икәненә ышаныс уятты. Уның уҡытыусыһы Илһам Ғафаров Өфө башҡорттары ҡоролтайы бүләгенә лайыҡ булды.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

# БУЛДЫРҘЫ БИТ ИЛҺАМ!

**Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең 2021 йылдың 17 декабрендәге бойороғо менән башҡорт эпостарын башҡарыусы, халыҡ сәсәне, Ғафури районы Красноусол ауылының халыҡ театры режиссеры Илһам Байбулдин халыҡ ижадын үҫтереүгә индергән өлөшө өсөн Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең "Рәсәй күңеле" премияһы менән бүләкләнде.**

2006 йылда булдырылған "Рәсәй күңеле" премияһы халыҡ музыкаһы, халыҡ йыры, халыҡ бейеүе, традицион халыҡ мәҙәниәте, халыҡ оҫтаһы номинациялары буйынса халыҡ художество традицияларын һаҡлау һәм үҫтереү өлкәһендә күп йылдар емешле эшләгән, ҙур ижади ҡаҙаныштар өсөн тапшырыла. Ошо йылдар эсендә 200-ҙән ашыу фольклор, вокаль һәм хореография ансамблдәре, халыҡ хорҙары, йыр һәм бейеү ансамблдәре, оркестрҙар һәм халыҡ уйын ҡоралдары ансамблдәре етәкселәре, ижади коллективтар, үҙенсәлекле башҡарыусылар, халыҡ сәсәндәре, биҙәү-ҡулланма сәнғәте оҫталары - Рәсәйҙең халыҡ ижадын бөтә төрлөлөгөндә һаҡлаған, үҫтергән профессионалдар лауреат исемен алды.

2020 йылдан башлап йыл һайын һәр береһе 500 мең һумлыҡ биш "Рәсәй күңеле" премияһы тапшырыла.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

# БАШҠАЛАРҒА ӨЛГӨ

**Өфөнөң "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле "Пушкин картаһы" проекты буйынса атҡарылған программала әүҙем ҡатнашыусыларҙың береһе булды һәм белем биреү учреждениелары уҡыусылары өсөн концерттар ойошторҙо.**

Һуңғы айҙа ғына ансамбль Өфөлә 12 концерт күрһәтте, 5000-гә яҡын тамашасы килде. Әйтәйек, Әлмөхәмәтов исемендәге гимназияла, "Башҡортостан" дәүләт концерт залында, "Химик" мәҙәниәт һарайында, "Орион" ижад һарайында, Ҡала мәҙәниәт һарайында һәм М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында мәҙәни саралар уҙҙы. Йәш тамашасылар өсөн "Мираҫ" донъя халыҡтары йыр-бейеүҙәренән бай концерт программаһы әҙерләгәйне: "Күңелле уйындар", "Өс төп", "Берҙәм ғаиләлә", "Гармун", "Төймә", "Диңгеҙ буйында", "Хава нагила", "Маламбо", "Раз вечор" һәм башҡалар. Һәр концерт аншлаг менән үтте, тамашасылар артистарҙы ихлас ҡаршы алды, уҡыусылар ҙа концертты һоҡланып ҡараны. "Хәҙерге заманда үҫеп килгән быуынды дөрөҫ тәрбиәләү, сәнғәткә ылыҡтырыу мөһим. Профессиональ ижади коллективтар быға ярҙам күрһәтергә һәм балаларҙы мәҙәни тормошҡа йәлеп итергә тейеш. "Мираҫ" ансамбле сығыштарына йәш тамашасылар йыш йөрөй, һис шикһеҙ, коллектив балаларҙың ижади һәләттәрен үҫтерә, халыҡ йолаларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен күрһәтә", - тип белдерҙеләр ансамблдең матбуғат хеҙмәтендә.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 ғинуар "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**14 ғинуар "Йәш ғаилә фатир эҙләй"** (М. Рощин), мөхәббәт story. 16+
**15 ғинуар "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 18.00 16+
**16 ғинуар "Эңер төшкәс"** (А. Дударев), мелодрама. 18.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**15-16 ғинуар "Приключения белых мышей"** (С. Чураева). 11.00, 13.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 ғинуар "Үткәндәрҙе һағынып"** 1950-2000 йылдар хиттарынан концерт. 6+
**15 ғинуар Флүрә Килдейәрова бенефисы.** 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**15 ғинуар "Три поросенка"** (З. Сөләймәнов), музыкаль әкиәт. 13.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**13 ғинуар "Миллениум"** 2000 йылдар йырҙары. 6+
**15 ғинуар "Аҡ мондарға сорнап ҡарҙар яуа"** "Ашҡаҙар" төркөмө концерты. 18.00 6+
**16 ғинуар "У Камелька"** атай-әсәйҙәр һәм кескәйҙәр өсөн концерт. 12.00 0+

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҺЕҘ ЯРАТҠАН АВТОРҘАРЫБЫҘ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**51-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Саған. Зураб. Әрәсә. Иләү. Атаман. Интеграл. Манн. Насыри. Бесән. Индиго. Вәлиди. Генерал. Шешҡолаҡ. Наян. Наза. Лава. Ниәт. Оҫта. Срок.

**Вертикаль буйынса:** Изабелла. Иртәнсәк. Нөгөш. Әүернә. Ҡолмой. Ғиззәтуллин. Ананас. Әкиәт. Алҡа. Абдрахманов. Спартак. Солтан. Манты. Нәжми. Иҙән.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Ғинуар (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (7) дүшәмбе | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:24 | 17:09 | 18:39 |
| 11 (8) шишәмбе | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:26 | 17:11 | 18:41 |
| 12 (9) шаршамбы | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:27 | 17:12 | 18:42 |
| 13 (10) кесе йома | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:29 | 17:14 | 18:44 |
| 14 (11) йома | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:30 | 17:16 | 18:46 |
| 15 (12) шәмбе | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:32 | 17:18 | 18:48 |
| 16 (13) йәкшәмбе | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:34 | 17:19 | 18:49 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҺҮҘ АРАҺЫНДА*

# НИҢӘ БАЛАЛАР АУЫРЫУ?



**Бөгөнгө мәктәп уҡыусыларының сәләмәтлеге маҡтанырлыҡ түгел, ти Рәсәй белгестәре. Шуға ла белем алыу уларға ауыр бирелә.**

Ростов университеты ғалимдары билдәләүенсә, уҡыусыларға эмоциональ өлкә үҫеше үҙенсәлектәре менән бәйле психологик проблемалар хас. Уларҙың ҡайһылары ыңғай һәм кире тойғоларҙы ла ауыр айыра, йышыраҡ кире эмоцияларға бирелә, был иһә балалар стресы кимәлен арттыра.

Социологтар асыҡлауынса, һәр унынсы бала мәктәпкә йөрөргә лә яратмай, 45 проценты кәрәк булған өсөн генә уҡый, 40 процент бала белем алыуға ыңғай ҡарай. Бөгөнгө заман балалары, ысынлап та, мәктәптән ныҡ арый. 27 проценты арыу кисерә, 4 проценты хроник арыу хәлендә була. 1 процент балалар иһә, киреһенсә, артыҡ әүҙем, был да организмды һәм нервы системаһын арыта һәм кире эҙемтәләргә килтерә. Үткән быуаттың 70-се йылдарындағы мәктәп уҡыусылары менән сағыштырғанда, бөгөнгө уҡыусы бөтөнләй көсһөҙ. Уларҙың буйҙары ла бәләкәйерәк, физик торошо ла ҡәнәғәтләндерерлек түгел. Быға балаларҙың аҙ хәрәкәтләнеүе, телевизорҙы күп ҡарауы, шулай уҡ дөрөҫ туҡланмау, эҫәр һыуҙың сифатһыҙ булыуы ла, ғаиләлә һәм мәктәптә кисергән стрестар булышлыҡ итә.

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*



# ЮЛБАРЫҪТАР ТУРАҺЫНДА

**Йыл хужаһы - юлбарыҫ тураһында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр тупланған. Был йәнлек бесәй һымаҡтар ғаиләһенә ҡарай һәм барыһы араһында иң ҙуры. Уларға ҡағылышлы иң ҡыҙғаныс мәғлүмәттәрҙең береһе - юлбарыҫтарға Ер йөҙөнән юғалыу ҡурҡынысы янай. Был кешеләр эшмәкәрлегенә туранан-тура бәйле, әлбиттә. Бөгөнгө көндә булдырылған юлбарыҫтарҙы яҡлаусы һәм уларға шарттар тыуҙырыусы халыҡ-ара ойошмалар браконьерҙарҙан етеҙерәк эшләй алмай.**

Ата юлбарыҫтар буйға 3 метр оҙонлоҡҡа һәм 300 килограмм ауырлыҡҡа етә ала. Инә юлбарыҫтар уларҙан бәләкәйерәк була. Шулай уҡ был хайуандар 5-6 метр бейеклеккә һикерә һәм сәғәтенә 65 км тиҙлек менән саба ала. Башҡа бесәйҙәрҙән айырмалы рәүештә, юлбарыҫтар ағас башына менә алһа ла, унда ултырыуҙы хуп күрмәй. Уяу саҡтарында тик кенә ял итеп ятыуға ҡарағанда йөрөүҙе өҫтөн күрәләр.

Юлбарыҫтарҙың сағыу ҡыҙғылт-һарыға ҡара һыҙатлы туны ауға сыҡҡанда бик ярҙам итә. Сөнки ҡуш тояҡлы йәнлектәр, приматтарҙан айырмалы рәүештә, төҫтәрҙе икенсе төрлө айыра һәм үлән араһына йәшеренгән юлбарыҫты тиҙ генә аңғарып өлгөрмәҫкә мөмкиндәр.

Аҡ юлбарыҫтарҙың күҙҙәре күк төҫтә була һәм улар альбиностарҙан нәҡ шуның менән айырыла ла: альбинос юлбарыҫтың күҙҙәре ҡыҙыл һәм ҡара һыҙаттары юҡ.

Юлбарыҫтар ит менән генә туҡлана. Улар башлыса эре табышты - болан, ҡабан һәм хатта филдәрҙе ярата. Шулай уҡ бик яҡшы балыҡсылар: балыҡты алғы тәпәйҙәре менән тотоп, ярға ырғыталар. Кешегә лә ташланыуы ихтимал, әммә йышыраҡ ҡарт, ауырыу һәм яралылары башҡа ашар ризыҡ булмағандан йәки үҙ биләмәһен яҡлап һөжүм итә.

Һунар иткәндә юлбарыҫтар ҡыҫтырылып йөрөгән иптәштәрен яратмай, яңғыҙ сыға. Был уларҙы арыҫландарҙан айырып тора. Һунарға кисләтеп йәки төндә сығалар. Күҙҙәре лә яҡшы күрә, ҙур тәпәйҙәре лә йомшаҡ һәм тауышһыҙ баҫып йөрөргә булышлыҡ итә. Ашарына таба алмаған ата юлбарыҫ инә юлбарыҫтарға "ҡунаҡҡа бара" ала. Ҡунаҡ ашы - ҡара-ҡаршы тип, уларҙы ла үҙенә саҡырырға мөмкин. Ләкин үҙ енесенән булған башҡаларҙы табынға яҡын да килтермәй.

Юлбарыҫтың ҡолағында күҙҙәре бар икән! Дөрөҫөн әйткәндә, был - уларҙың ҡолаҡ осондағы ҡара фондан айырылып торған аҡ таптар. Ҡайһы берәүҙәр был "күҙҙәр" башҡа йыртҡыс йәнлектәрҙе иҫкәртеү өсөн тип иҫәпләй, икенселәр инә юлбарыҫты балалары бейек үлән араһынан күреп торһон, эҙ яҙлыҡтырмаһын өсөн кәрәк, ти.

Юлбарыҫтар, башҡа бесәй һымаҡтарҙан айырмалы, һыу инергә ярата һәм 6 километрға тиклем араны бер көсәнеүһеҙ йөҙөп үтә ала. Был уларҙың эҫе климатта йәшәүенә бәйле, тип аңлатыла.

Юлбарыҫ балалары донъяға килгәндә һуҡыр була һәм уларҙың ауырлығы 1 килограмға ла тулмай. Әммә улар бик тиҙ үҫә, 3 айлыҡ саҡта 10 килограмға етәләр. Ярты йәшкә тиклем инәләренең һөтөн имеп йәшәйҙәр, артабан йәнлектәрҙең көндәлек аҙығына күсереләләр. Бер йәш тулғанға тиклем уларҙы инә юлбарыҫ бағырға тейеш, сөнки улар үҙ-үҙен яҡлай алмай әле. Нәҡ ошо бер йәшкә тиклемгә осорҙа бик күп юлбарыҫ балалары үлә икән.

ХӘТЕРЛӘП...

# УҘҒАН ЙЫЛДЫҢ...

## иң төп ун мәҙәни ваҡиғаһы

**"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы 2021 йылдың иң ҡыҙыҡлы һәм иҫтә ҡалған 10 мәҙәни ваҡиғаһын билдәләне.**

**Беренсеһе** - VI Бөтә донъя фольклориадаһы. Был халыҡ-ара сара Рәсәйҙә беренсе тапҡыр үткәрелде. Фольклориадала ике донъя рекорды ҡуйылды - 57 илдән 71 милләт вәкилдәре ҡатнашҡан Дуҫлыҡ әйлән-бәйләне. Сара барышында Өфөлә "Фольклориада йөрәге" сәхнәһендә һәм 22 район-ҡалала 28 майҙансыҡта 61 концерт ойошторолдо. 8 көн эсендә Башҡортостанға 100 мең кеше, 60 мең турист килде.

**Икенсеһе** - республиканың Милли симфоник оркестры Мәскәү филармонияһының Чайковский исемендәге концерт залы һәм Санкт-Петербург филармонияһының Ҙур залында сығыш яһаны, Рәсәй ҡалалары буйлап гастролдәрҙә йөрөнө. Ижади коллектив шулай уҡ Екатеринбургта үткән VI Симфоник форумда ҡатнашты.

**Өсөнсөһө** - башҡорт әҙәбиәте классигы Мостай Кәрим повесы буйынса режиссер Айнур Аҫҡаров төшөргән тулы метражлы "Өс таған" нәфис фильмы. Презентацияһын һуң рәсми прокатҡа сыҡҡансы ул байтаҡ Рәсәй һәм халыҡ-ара кинофестивалдәрҙә ҡатнашты, төрлө номинацияларҙа наградалар яуланы. Уны интернеттан 1 миллиондан, ә кинотеатрҙарҙа 100 меңдән ашыу кеше ҡараны.

**Дүртенсеһе** - "XXI быуат яҙыусыһы" төбәк-ара форумы. Уның сиктәрендә Башҡортостан Башлығы яңы быуын вәкилдәре араһында йәмәғәт фекерен формалаштырыу, яҙыусыларҙы социаль яҡлау, тәржемә һәм китап сығарыу мәсьәләләрен билдәләне.

**Бишенсеһе** - Валериан Альбанов исемендәге ҡотопсолар музейы асылды. Ул Арктиканы тикшереүҙә ҡатнашҡан меңәрләгән яҡташыбыҙ иҫтәлегенә арналған. Яңы мәҙәни объект Өфөнөң туристик картаһын киңәйтеп кенә ҡалманы, ә тарихи мираҫты файҙаланыу өлгөһө лә булып тора.

**Алтынсыһы** - Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының "Дон Кихот" операһы премьераһы Мәскәүҙә Рәсәйҙең Ҙур театрында үтте. Спектаклгә әҙерлек 14 ай дауам итте, унда бер нисә йөҙ кеше эшләне. 400-гә яҡын костюм, уға 200-ҙән ашыу баш һәм 100 пар аяҡ кейеме тегелде. Төп партияны Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Аҫҡар Абдразаҡов башҡарҙы.

**Етенсеһе** - яҡташыбыҙ, скрипкасы һәм дирижер Владимир Спиваков исемендәге халыҡ-ара скрипкасылар конкурсы. Маэстро 2021 йылда тыуған ҡалаһына музыкаль марафон бүләк итте: ул III Халыҡ-ара скрипкасылар конкурсы менән башланды һәм "Владимир Спиваков саҡыра" тип аталған V юбилей фестивале булып дауам итте.

**Һигеҙенсеһе** - "АРТ-Ҡоролтай" беренсе мәҙәниәт форумы. Форумда Башҡортостан Башлығы "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһы старт алыуы хаҡында хәбәр итте. Был ярҙам мәҙәниәт өлкәһендә һөнәри белемле 35 йәшкә тиклемге белгестәргә тәғәйенләнә.

**Туғыҙынсыһы** - 2021 йылда өфөләр беренсе тапҡыр Башҡорт опера һәм балет театры сәхнәһендә "Алтын битлек" фестивален төбәк программаһын ҡарай алды. Сараны асыу тантанаһында фестиваль президенты, легендар актер, Рәсәйҙең халыҡ артисы Игорь Костолевский ҡатнашты.

**Унынсыһы** - "Яңы моң" халыҡ-ара музыкаль проекты. Был музыкаль телешоу Башҡортостан Юлдаш телевидениеһында барҙы. Конкурстың етәксеһе - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, республика Башлығының мәҙәниәт һәм йәштәр сәйәсәте мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе Радик Юльяҡшин.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҮҘЕБЕҘСӘ КЕЙЕНӘЙЕК!

**Фани донъянан арыныу йолаһын (саньяса) үтәү өсөн Һиндостанда йәшәүсе изге йәнгә бар донъянан кешеләр йыйылған, ти. Шунда изге кеше: "Мин һеҙгә саньяса бирәсәкмен, тик артабан һеҙ айырым бер төр кейем генә кейергә тейеш буласаҡһығыҙ", - тигән. "Ни өсөн? Беҙҙең эске булмышыбыҙ үҙгәрһә, тышҡы ҡиәфәтебеҙ ниндәй булһа ла ярамаймы ни?" - тип һораған халыҡ. "Эске һәм тышҡы донъяның бер ниндәй ҙә айырмаһы юҡ. Тыштағы - эстә, эстәге - тышта", - тип яуаплаған изге кеше.**



Аҡыллыға - ишара, ти халыҡ. Бөгөн беҙҙең тышҡы ҡиәфәтебеҙ генә түгел, эске донъябыҙ ҙа үҙгәрә, күңелебеҙҙе ситтәргә хас ҡиммәттәр баҫа бара. Былна шуның өсөн дә "Әйҙәгеҙ, башҡортса кейенәйек!" тип өндәшебеҙ һиңә, ҡәҙерле уҡыусым. Һүҙ, әлбиттә, тулыһынса милли кейемгә күсеү тураһында бармай. Бик күптәр милли элементтар булған көндәлек кейемдәрҙе кейергә теләк белдерһә лә, әлегә баш ҡалала бындай хеҙмәт күрһәтеүсе тегеү ательелары юҡ кимәлендә. Шулай ҙа арабыҙҙа кейеменә сағыу ғына берәй милли элемент өҫтәп ебәреп, ябай ғына күлдәген бынамын тигән сәнғәт өлгөһөнә әүерелдереүсе ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ишәйә бара. Уларҙың береһе - Өфө ҡалаһында йәшәүсе Альбина апай Исхаҡова шулай ти:

- Милли кейемдә ни тиклем генә ярятһам да, йәшерәк, балалар үҫтергән сакта уның ниндәйҙер өлөштәрен көндәлек кейемдәр менән бергә кейергә мөмкин икәнлеген уйлап еткермәгәнмен. Баҡтиһән, кеше араһына милли кейем кейеп сығыу өсөн дә рухи яҡтан өлгөрөп етергә кәрәк икән.

Ҡиәфәткә милли колорит өҫтәү өсөн күп тә кәрәкмәй. Мәҫәлән, көмөш беләҙек тағыу ҙа етә. Көмөш беләҙек таҡҡан башҡорт ҡыҙы әхлаҡһыҙ ҡыланмаясаҡ, сөнки ул үҙенә генә түгел, бөтөн башҡорт халҡына тап төшөрәсәген яҡшы аңлай. Тимәк, биҙәүес тә оло тәрбиәүи әһәмиәткә эйә була ала. Етмәһә, хәҙер теләгән кешегә бындай биҙәүестәрҙе ҡайҙан һатып алырға, тип аптырап ултырырға түгел. Һәр ювелир кибетендә ярым ҡиммәтле таштар менән биҙәлгән алҡалар, йөҙөктәр һатыла. Уҫалы һөнәрселәре бигерәк зауыҡлы сулпылар, беләҙектәр яһай, һатып ал да, рәхәтләнеп тағып йөрө! Әйҙә, бар донъя үҙенә лә, милләтеңә лә хөрмәт менән баҡһын. Бер-беребеҙгә көмөш беләҙек бүләк итеүҙе лә ғәҙәткә индерәйек, етмәһә, был металдың организм өсөн файҙаһы ла күптән асыҡланған.

Борон-борондан әллә ниндәй ҡиммәтле тиреле йәнлектәр төйәк иткән Уралда йәшәгән халҡыбыҙҙың һунарсылыҡ итеп, ҡама тундар ғына кейеп йөрөүен, үҙебеҙҙең ниндәй затлы һәм зауыҡлы заттан икәнебеҙҙе иҫкә төшөрәйек тә, кейемебеҙгә ниндәй ҙә булһа милли элемент өҫтәп ебәрәйек, гүзәл заттар! Нимә генә тимә, эске һәм тышҡы донъяның бер ниндәй ҙә айырмаһы юҡ, тыштағы - эстә, эстәге - тышта.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИПЛЕ КЕШЕ...

## иленән китмәҫ

Ҡул - ҡортһоҙ, донъя - телһеҙ, ил бolaһыҙ булмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле)**

Кем егерме йәштә бер ни ҙә белмәй, утыҙҙа бер ни ҙә эшләмәй һәм ҡырҡта бер ни ҙә уйлап тапмаған, ул бер ваҡытта ла бер ни ҙә белмәйәсәк, бер ни ҙә эшләмәйәсәк һәм бер ни ҙә уйлап тапмаясаҡ...

**(Аксель Оксеншерна ).**

Яуыздарҙы үлтереп кенә яуызлыҡты бөтөрөп буламы? Юҡ, яуызлыҡты арттырып ҡына була.

**(Блез Паскаль).**

Министр өсөн ахмаҡлыҡ эшләүгә ҡарағанда ахмаҡ һүҙ әйтеү ҡурҡыныслыраҡ.

**(Жан Франсуа Рец).**

Берәй кемгә яҡшы вазифа биргән һайын, мотлаҡ рәүештә туҡһан туғыҙ кәйефһеҙ һәм бер рәхмәтһеҙ кешегә юлығам.

**(Людовик XIV).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарт ғүмер буйы бил бөгөп эшләй, әммә мандып байып китә алмай. Уның ҡарауы, ул үҙендә ғәйәт бай тормош аҡылы туплай. Бер саҡ ул ер эшкәртеп йөрөгәндә, үҫмер улы берҙән-бер аттары юғалыуын хәбәр итә: "Атай, беҙҙә бәхетһеҙлек - атыбыҙ юғалған". "Нимә быны бәхетһеҙлек тип атайһың, улым? - ти ҡарт. - Ҡарарбыҙ, ваҡыт күрһәтер".**

**Бер нисә көндән, ысынлап та, ат тағы бер ат эйәртеп ҡайтып инә. "Атай, ниндәй бәхет, атыбыҙ үҙенә иптәш эйәртеп ҡайтҡан!" - тип шатлана үҫмер. "Ниңә һин быны бәхет тип атайһың, улым? - ти тағы ҡарт. - Ҡарарбыҙ, ваҡыт күрһәтер".**

**Күпмелер ваҡыттан һуң үҫмер эйәреп ҡайтҡан атты ауыҙлыҡлап, йөрөп килергә була. Ләкин ҡырағай ат артҡы аятарына баҫып, уны өҫтөнән алып ташлай. Үҫмер аяғын һындыра. "Атай, ниндәй бәхетһеҙлек, мин аяғымды һындырҙым", - ти көйөп улы. "Ниңә һин быны бәхетһеҙлек тип атайһың? - ти тағы атаһы. - Ҡарарбыҙ, ваҡыт күрһәтер". Үҫмер атаһының был фәлсәфәһенән әллә ни уртаҡлашмай ҙа, аңламай ҙа. Шуға ла өндәшмәй генә үткәреп ебәрә. Бына бер нисә көндән уларҙың ауылына батша һалдаттары килә һәм бөтөн егеттәрҙе яуға йыйып алып китеүҙәре тураһында белдерә. Ҡарттың йортона ла киләләр һәм уның улының аяғы зәғиф икәнен күреп, кире китәләр. Шунда ғына үҫмер нимә бәхет, нимә бәхетһеҙлек булыуын бер ваҡытта ла аныҡ билдәләп булмауын аңлай. Эйе, һәр саҡ нимә насар, нимә яҡшы икәнен ваҡыт раҫлағанын көтөргә кәрәк. Тормош шундай: насар тип раҫлағаның ваҡыт үтеү менән яҡшыға әйләнеүе мөмкин".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
30 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 09